

# Теле барҙың-иле бар

# Теле барҙың— иле бар

Өфө
«КИТАП»
1995

ББҠ 81.2 Баш
Т 34

Төҙөүсеһе *Зәйтүнә Ханова*

Т $\frac{4602000000-112}{М 121(03)-95}$ 148—95

ББК 81.2 Баш

ISBN 5-295-01607-2

© Төҙ.: Ханова З. Ҡ., 1995

# ИНЕШ ҺҮҘ

«Телең барҙа илең бар, илең барҙа иркең бар», — тигәйне башҡорт халҡының бөйөк улы Рәми Ғарипов. Йәмғиәтте демократлаштырыу таңында халыҡтар үҙбилдәләнеше өсөн бер ни тиклем мөмкинлектәр булдырылғас, күп милләттәр ошо мәңгелек хәҡиҡәтте байраҡ итеп күтәрҙе һәм, суверенлы республикалар иғлан иткәндә, һәр береһе аҫаба халыҡтың туған теленә дәүләт статусы бирҙе. Татар, сыуаш, мари, чечен, ингуш, белорус, ҡаҙаҡ, үзбәк, коми, хатта ғағауз һәм башҡа бик күптәр шулай эшләне, сөнки этносты һәм милли дәүләтселекте һаҡлап алып ҡалырға кәрәк ине. Бары тик күп милләтле республикаға әйләнгән Башҡорт илендә генә быны эшләүе мөмкин булманы — Башҡортостандың аҫаба халҡы булған башҡорттарҙың туған теле дәүләт теле итеп ҡабул ителмәне.

Ошо йыйынтыҡҡа мәҡәләләре ингән авторҙар — тел ғилеме белгестәре һәм хоҡуҡ яҡлаусылар, тарихсы һәм яҙыусылар, сәйәсмән һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре, ябай кешеләр һәм профессор, академиктар үҙ милли территорияһында милли дәүләтселеген булдырған аҫаба халыҡтың туған теленә дәүләт статусы биреү тураһында һүҙ йөрөтә.

Ә башҡорт теленә дәүләт статусын биреү проблемаһы туранан-тура төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тел фажиғәһенә килеп тоташа. Йыйынтыҡ авторҙары төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын әсә телендә уҡытыу кәрәклеге тураһында һүҙ алып бара икән, быны төньяҡ-көнбайыштағы татарҙарҙы көсләп башҡортлаштырыуға дәғүә тип ҡабул итергә ярамай. Белеүебеҙсә, унда тик татарҙар ғына йәшәмәй, һәм күп милләтле төньяҡ-көнбайышта татар проблемаһы юҡ — мәктәптәрҙә тотош татар әҙәби теле индерелгән, китапханалар татар телендәге китаптар менән тулы, гәзиттәр татарса сыға. Һүҙ бары тик, үҙ тарихи ерҙәрендә һәм үҙ дәүләтселегендә йәшәп тә, ошондай уҡ хоҡуҡтарҙан мәхрүм ителгән башҡорттарҙы татар телендә түгел, ә башҡорт телендә уҡытыу һәм үҙ туған телдәренә кире ҡайтарыу тураһында бара. Төньяҡ-көнбайыш тураһында тағы ла шуның өсөн өндәшмәй ҡала алмайбыҙ — һуңғы ваҡытта был проблема сәйәси характер ала башланы. Быға бер генә миҫал килтереү ҙә етә. Татарстандың тарихсы-академигы, йәмәғәт эшмәкәре һәм публицист Индус Таһиров 1994 йылда Ҡазан дәүләт нәшриәтендә баҫтырған «Бәйһеҙлек баҫҡыстары» тигән китабында былай тип белдерҙе: «Башҡортостанда,

уның Татарстанға терәлеп торған көнбайышында, 1 млн 100 мең милләттәштәребеҙ йәшәй. Улар үҙ ерҙәрендә, үҙ ватандарында йәшәйҙәр» (54-се бит). Бында 1920 йылда Татарстанға ҡушылған Бөгөлмә һәм Минзәлә өйәҙҙәре тураһында һүҙ ҙә бармай — Башҡорт иленең бөгөнгө төньяҡ-көнбайышы күҙҙә тотола. Һәм был дәғүә Башҡортостандағы татар ижтимағи үҙәге кимәлендә түгел, ә республика-ара мөхиттә, Татарстан менән Башҡортостан араһындағы мөнәсәбәттәр мөхитендә, Бөтөн донъя татар конгресы башҡарма комитеты рәйесе һәм Татарстан менән Рәсәй араһында һөйләшеүҙәр алып барыусы дәүләт делегацияһының даими ағзаһы тарафынан белдерелә.

Күреп тораһығыҙ, әгәр ассимиляция процестары туҡтатылмаһа, дәүләтселегебеҙ нигеҙҙәренә хәүеф янай, сөнки төньяҡ-көнбайыш — боронғо башҡорт мифологиялары һәм легендалары бишеге, халҡыбыҙҙың генофондын тәшкил иткән ерлек, Башҡорт иленә азатлыҡ даулап туҡтауһыҙ ихтилалдарға күтәргән үҙәк, мәжүси ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған Ыйыҡ таштар иле. Шунда халҡыбыҙҙың ҡан-күҙ йәштәре һеңгән Сөйәнтус, Тәфтиләүҙе ҡәһәрләгән нәфрәтле йыр ҙа шунда тыуған. Аҫаба башҡорт ерҙәре шунда.

Республика йәмәғәтселеге ошоларҙы юғалтыуҙан хәүефләнеп саң ҡаға. Тел юғалтыу ерҙе юғалтыуға килтерә. Телһеҙ милләт — илһеҙ милләт. Йыйынтыҡ авторҙары ошо хаҡта бәйән итә.

*Зәйтүнә ХАНОВА*

*Таһир БАИШЕВ, филология фәндәре кандидаты*

# «БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ КӨНБАЙЫШ ДИАЛЕКТЫ» ТЕМАҺЫНА

## 1954 ЙЫЛҒЫ ДИАЛЕКТОЛОГИЯ ЭКСПЕДИЦИЯҺЫНЫҢ ҒИЛМИ ОТЧЕТЫНАН[1]

Экспедиция етәксеһе: өлкән ғилми хеҙмәткәр, филология фәндәре кандидаты Т. Ғ. Баишев.

Экспедиция ағзалары: кесе ғилми хеҙмәткәрҙәр Т. Х. Күсемова һәм У. М. Ҡәйүмова, МДУ студенты Ә. Ғ. Биишев, СССР Фәндәр академияһының тел ғилеме институты аспиранттары Н. Х. Ишбулатов һәм Х. Ғ. Йосопов.

...Көнбайыш диалект башҡорт һәм татар халыҡтарының 3—4 быуат һуҙымында тығыҙ аралашып йәшәү, ике халыҡтың һәм уларҙың телдәренең бер-берeһенә йоғонто яһау һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән, һәр ике телдең үҙенсәлектәрен эсенә алған айырым диалект.

Көнбайыш диалект быға тиклем ни дәрәжәлә өйрәнелеүен күҙ алдына килтереү өсөн, бынан элекке йылдарҙа ойошторолған экспедицияларҙың маршруттарын биреүҙе тейеш таптыҡ.

1931 йылда Ҡырғыҙ-Миәкә районында 3 маршрут 25 ауылды тикшерҙе.

1933 йылда Туймазы районында 3 маршрут 31 ауылды тикшерҙе.

Шул уҡ йылда Янауылда — 20 ауылды.

1934 йылда Ҡариҙел районында — 30 ауылды.

Шул уҡ йылда Нуриманда — 11 ауылды.

1954 йылда Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарына сығарылған диалектология экспедицияһы 10 июндән 9 июлгә тиклем ваҡыт һуҙымында Асҡын, Балтас, Борай һәм Яңауыл райондарында 37 ауылда (башҡорт ауылдары — 30, татар ауылдары — 1, типтәр ауылдары — 5,

[1] ЦГИА. Ф. Р-1830. Оп. 1. Д. 65.

ҡатнаш ауылдар — 1) һөйләү телен яҡындан өйрәнеү өсөн барлығы 158 кешене ылыҡтыра.

Көнбайыш диалектын яҡындан тороп киң рәүештә өйрәнгәндән һуң, уның һис шикһеҙ үҙ аллы диалект булыуын, башҡорт халҡының берҙәм һәм дөйөм теле унан өҫтөн булыуын һәм уны үҙенә буйһондороуын асыҡ күреп була. Был диалекттың фонетикаһында, морфологияһында, грамматик төҙөлөшөндә һәм лексикаһында башҡорт теле үҙенсәлегенә хас булған формалар күп табыла. Был формалар бигерәк тә был диалекттың төп һүҙлек фондында һәм грамматика төҙөлөшөндә ныҡ һаҡланған.

Ләкин был диалект вәкилдәре бик күп быуаттар һуҙымында, күпселектә, татар халҡы менән аралашып йәшәүҙәре арҡаһында, уларҙың диалекты татар теле йоғонтоһона бирелгән һәм һәр ике телдең үҙенсәлектәрен эсенә алған диалект булып йәшәп килгән һәм йәшәй, уның төп һүҙлек фонды, һәр ике телдең бер-береһенә йоғонтоһо арҡаһында, татар теленең ҡайһы бер үҙенсәлектәрен эсенә алыу менән бергә, башҡорт теле үҙенсәлеген ныҡ һаҡлаған. Шуның өҫтөнә диалекттың үҙенә генә хас булған һүҙҙәр һәм терминдар менән үҙен башҡа диалекттарҙан һәм татар теленән айырып тора.

Шулай уҡ был диалекттың үҙенә хас булған, уны Көнсығыш һәм Көньяҡ диалекттарынан, шулай уҡ татар теленән айырып тора торған күп кенә тотороҡло һәм берҙәй морфологияһы һәм грамматика төҙөлөшө бар.

Көнбайыш диалектта һөйләшә торған башҡорттарҙың бик күп өлөшө Октябрь революцияһынан һуң һәр ваҡыт татар әҙәби телендә хеҙмәтләндерелеп килә. Был хәлгә ҡарағанда, уларҙың һөйләү теле татар теле тарафынан еңелеүе көсәйергә һәм тиҙләшергә тейеш тигән фекер уйға килә. Дөрөҫ, хәҙер уның татар теле тарафынан еңелеүе Октябрь революцияһынан элекке замандарға ҡарағанда, әлбиттә, көсәйергә тейеш һәм көсәйгән тип әйтергә кәрәк. Ләкин тел ул шул тиклем тотороҡло нәмә, уның еңелеүе шул тиклем аҡрын бара, уның еңелеүендәге процесты күреү өсөн Октябрҙән һуңғы дәүер бик әҙ ул. Улар хәҙерге көндә һәр урында үҙ диалекттарында һөйләшә, татар телендә һөйләшмәй, татар әҙәби теле улар өсөн бары китап теле, әҙәбиәт теле булып ҡына ҡалыуында дауам итә. Әлбиттә, беҙ бында зыялылар телен алмайбыҙ, зыялылар ҡатламы хәҙерге көндә үҙ диалекттарында ла һәм татар әҙәби телендә лә һөйләшә ала.

Был урында, зыялылар тураһында һүҙ ҡуҙғатҡас, шуны әйтергә кәрәк, ғөмүмән, зыялылар бер яҡтан да критерий булырлыҡ ҡатлам түгел. Бөтә тарих буйынса зыя-

лылар ике уртала йөрөгән халыҡтың телен, мәҙәниәтен һ. б. билдәләүҙә таяныслы критерий була алмаған ҡатлам һаналды. Шуның өсөн Ҡөнбайыш диалектын билдәләүҙә зыялылар телен нигеҙгә алмайбыҙ һәм ала ла алмайбыҙ — әгәр алһаҡ, ҙур хата яһаған булыр инек. Беҙ Ҡөнбайыш диалектын билдәләүҙә төп таяныс, төп критерий итеп төп һәм иң ҙур күпселек массаның көндәлек тормоштағы, көндәлек эш, хеҙмәт процесындағы һөйләү телен алабыҙ. Бына нәҡ шундай телдә балалар, йәштәр, ҡатын-ҡыҙҙар һәм оло быуындар һөйләшә, һәм ул тел — хәҙерге көндә лә бик тотороҡло тел.

Әгәр беҙгә «Татар теле киләсәктә еңеп сығасаҡмы?» тигән һорау бирелһә, беҙ, әлбиттә, «әгәр уларҙы артабан да хеҙмәтләндереү татар әҙәби телендә алып барылһа, ҡасан да булһа бер ваҡыт татар теле, һис шикһеҙ, еңеп сығасаҡ, башҡорт теле юғаласаҡ», тип яуап бирәбеҙ.

## Мәктәптәрҙә татар әҙәби теле

Асҡын районының Үрмияз ауылында 15 йыл буйына татар теле уҡытып килгән Ямал Вәлиәхмәтова түбәндәгеләрҙе һөйләне: «Татар әҙәби теле балалар өсөн ауыр. Уҡыусылар был мәсьәләгә кереп китһәк, былай тиҙәр: «Беҙ башҡорт милләтенән, беҙҙең үҙ телебеҙҙә уҡырға хаҡыбыҙ бар». Телдән һөйләгәндә башҡорт һүҙҙәрен бик күп ҡыҫтыралар. Яҙыуҙа башҡорт һүҙҙәренән ҡасырға тырышалар. Таҙа татар теленә өйрәтеү ҡыйын. Һөйләгәнсә яҙалар. Мин килеп татар телендә һөйләй башлаһам, мишәр, тиҙәр. Дөрөҫ татар телендә әйткәнде мишәрсә тиҙәр».

1933 йылда Яңауыл районына махсус ебәрелгән экспедиция ошоларҙы асыҡлаған.

Райондағы бөтә башҡорт һәм татар мәктәптәрендә быға тиклем уҡытыуҙар һәр ваҡыт татар телендә була килгән һәм татар телендәге дәреслектәр менән тәьмин ителгән. Башҡорт телендә уҡытыуға һәм шул телдәге дәреслектәр менән тәьмин итеүгә һис бер ваҡыт сара күрелмәгән.

Яңауыл, Ямаҙы, Аҡсәйет мәктәптәрендә башҡорт теле айырым фән рәүешендә индерелһә лә, ул да «исемдә бар, һанда юҡ» рәүешендә генә.

Күрәһегеҙ, ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты пленумының 1932 йылдың 4 майында быға тиклем татар телендә уҡытылып килгән башҡорт мәктәптәрендә 1932/33 уҡыу йылы башынан башҡорт телен айырым дәрес итеп индереү тураһындағы ҡарары үтәлмәгән.

Был материал бынан 21 йыл элек, 1933 йылда, яҙылған. Быйылғы (1954) экспедицияла шул уҡ хәлдәр раҫланды — башҡорттарҙың балалары, йәше һәм ҡарты көндәлек тормошта үҙ диалектында һөйләшә, мәктәптәрҙәге татарса уҡыу-уҡытыу теле яҙма тел генә булып йәшәп килә.

### Башҡортса гәзит-журнал һәм әҙәбиәт

...«Совет Башҡортостаны»н халыҡ алмай һәм уҡымай. Уны уҡыу йорттары, ауыл советтары, ҡайһы бер колхоз идаралары, китапханалар алдыра. «Әҙәби Башҡортостан» һәм «Башҡортостан уҡытыусыһы» журналдарын күп кенә алдыралар. Инде башҡортса ғилми, фәнни-популяр һәм художестволы әҙәбиәткә килгәндә, эш башҡаса тора. Ундай әҫәрҙәрҙе халыҡ һәм интеллигенция уҡымай булырға тейеш, сөнки беҙ күҙ һалған, һорашҡан китапханаларҙа башҡорт телендәге ундай әҙәбиәт йә бер ҙә булмай сыҡты, йә, булһа ла, бынан бер нисә йыл элек баҫылған, хатта латин алфавитында булған әҙәбиәт кенә табылды. Был хәл шуны белдерә, тимәк, был районларҙағы башҡорттар һәм татарҙар Сәйфи Ҡудаш, Мостай Кәрим, Әкрәм Вәли, Рәшит Ниғмәти һ. б. кеүек күренекле башҡорт яҙыусыларының башҡорт телендәге әҫәрҙәрен уҡымай.

*Жәлил КЕЙЕКБАЕВ, филология фәндәре докторы, профессор*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ ДИАЛЕКТТАРЫ ТУРАҺЫНДА [1]

...Көнбайыш-төньяҡ диалектҡа Башҡортостандың көнбайыш-төньяҡ өлөшөндә (Дүртөйлө, Илеш, Саҡмағош, Балтас, Яңауыл, Борай, Бөрө һ. б. районларҙа) йәшәүсе, телдәре тамам татарлашҡан, милләте яғынан ғына башҡорт иҫәпләнгән башҡорттарҙың һөйләштәре индерелгәйне [2].

Ләкин көнбайыштағы башҡорттарҙың һөйләү телен башҡорт диалекты тип атаусылар фекерен беҙ уртаҡлашмайбыҙ, сөнки Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә йәшәүсе башҡорттар татар телендә

[1] Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға. Мәҡәләләр йыйынтығы. Өфө, 1960. 7-се бит.

[2] Даян Ҡ., Харис Ә. Стилистика. Өфө, 1941. 51-се бит.

(татар теленең урта диалектында) һөйләшә. Шуға күрә улар татар телен «әсә теле» тип таный. Рәсми-юридик документтарҙа (анкетала, паспортта һ. б. документтарҙа) милләттәре яғынан «башҡорт», әсә теле — «татар теле» тип яҙылалар. Уларҙың һөйләү теленең татарлашыуы тарихи сәбәптәр арҡаһында килеп сыҡҡан, сөнки көнбайыш башҡорттары күп быуаттар буйына татар теленең һәм мәҙәниәтенең көслө йоғонтоһонда йәшәгән.

Рус тарихсыһы һәм телсеһе профессор В. Филоненко шул көнбайыш башҡорттарының теле хаҡында түбәндәгесә яҙа: «Өфө губернаһының көнбайыш өлөшөндәге башҡорттар телдәре яғынан тулыһынса тиерлек татарҙар менән ассимиляциялашҡан һәм шуға күрә уларҙың теле татар теленән айырылмай» [1].

Көнбайыш башҡорттарының һөйләү телендә башҡорт теленең ҡайһы бер элементтары булыу (мәҫәлән, ҡылым формаларында *-ай/-әй* дифтонгылары һаҡланыу: *ашай-ашамай, эшләй-эшләмәй* һ. б.) уларҙың һөйләү телен башҡорт диалекты тип иҫәпләүгә хоҡуҡ бирмәй әле, сөнки ҡылымдарҙа *-ай/-әй* дифтонгыларын ҡулланыу төп татар һөйләшендә лә бар [2].

*1960 йыл*

*Мөсәлиә ХӘЙРУЛЛИНА, филология фәндәре докторы, профессор*

## ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫ

Төньяҡ-көнбайыш регионында башҡорттар Асҡын, Бөрө, Балтас, Борай, Ҡалтасы, Илеш, Краснокама, Ҡариҙел, Яңауыл, Дүртөйлө, Туймазы һәм башҡа районд арҙа йәшәй. Был төбәктәрҙә йәшәгән халыҡтың теле, ғөрөф-ғәҙәте, мәктәптә башҡорт телен уҡытыу проблемаһы, балаларҙы халыҡтың фольклоры, әҙәбиәте, мәҙәниәте менән таныштырыу, тарихын өйрәнеү мәсьәләләре менән күптәр ҡыҙыҡһына.

Мин юғарыла әйтелгән регионда, Баҡалы районында, тыуҙым, уҡыным һәм мәктәптә уҡыттым. Беҙҙең ата-ба-

---

[1] Филоненко В. Башкиры. Өфө, 1915. 24-се бит.

[2] Тумашева Д. Г. «Некоторые фонетические особенности Тюменского диалекта татарского языка» (Сб.: «Материалы по диалектологии»). Ҡазан, 1955. 159-сы бит.

балар, нәçел-ырыу борон-борондан күсмә тормошта йәшәгән, малсылыҡ һәм игенселек менән шөғөлләнгән. Әле лә булһа ауыл эргәһенән үткән Ҡизгән йылғаһын аша сығып 2 километр самаһы барғас, урман эсендә, тау итәгендә ялан бар. Уны Иçке ултырыш (ултыраҡ) тип йөрөтәләр. Беҙҙең нәçел-ырыу башта шунда ултырған. Ҙур һыу (күл, йылға) булмағас, ул урындан күсеп китеп һыулы ерҙә нигеҙ ҡорғандар.

Минең тыуған-үçкән ауылым — Имәнкүпер (хәҙерге ваҡытта ауыл, сама менән әйткәндә, 20—30-сы йылдарҙан «Баҡалы» тип йөрөтөлә).

Ауылдың күсеп йөрөгәнлеген, минең нәçел-нәсәп, ырыуҙың ысын башҡорт икәнен ысынбарлыҡ үҙе күрһәтә. Был төбәк халҡының башҡорт икәнен үҙемдең ата-бабаларымдың бер нисә быуатты эсенә алған шәжәрәһендә килтерә алам. Рабиғ, уның уғлы Хәндәнби, аның уғлы Мөхәмәд Әмин хан, аның уғлы Ушинби, аның уғлы Майҡаби, аның уғлы Илбәкби, аның уғлы Алчакби, аның уғлы Төлкичакби, аның уғлы Сибиби, аның уғлы Булгаерби, аның уғлы Тычканби, аның уғлы Аҡбирҙе, аның уғлы Ҡалмыҡ, аның уғлы Шкәрә, аның уғлы Ҡарабаи, Атнағол, Хәбибулла, Әһлиулла, Ниғмәтулла, Хәйрулла. (Һуңғы 4 быуындың исем ялғауҙары мосолман диненә бәйле үҙгәртелгәндер, күрәһең.)

...Ҡайһы берәүҙәр төньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәгән халыҡтарҙың һөйләү телен «ул татар теле, уларҙың һөйләше татар теленең урта диалектына керә, улар ер алыр өсөн генә башҡорт булып яҙылған татарҙар», тип иçбатларға тырыша, йәғни башҡорт теленең көнбайыш диалектының йәшәп килеүен, башҡорттарҙың бында төп халыҡ булыуын шик аçтына ҡуйырға маташа. Ләкин тарихи документтар бының киреһен һөйләй.

Билдәле булыуынса, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары VII (1815—1817 йылдар), VIII (1838), IX (1850), X (1856) ревизияларҙа теркәлгән. Был төбәк башҡорттары тураһындағы мәғлүмәттәр 1897, 1920, 1926, 1939, 1970, 1979 һәм 1989 йылдарҙа халыҡ иçәбен алыу материалдарында сағыла.

Революцияға тиклем йәшәгән рус ғалимдарының һәм хәҙерге башҡорт ғалимдарының хеҙмәттәренә таянып, төньяҡ-көнбайыш регионында йәшәгән башҡорттарҙың нигеҙен боронғо аçаба башҡорттарҙың ҡәбиләләре һәм ырыуҙары тәшкил иткән, тип иçбатлана (аçаба башҡорттар — башкиры-вотчинники, ергә хужа булған төп башҡорттар).

Ғалимдар Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш этнографик районына ингән башҡорттарҙы 3 төркөмгә бүлә:

Ыҡ йылғаһы бассейны; түбәнге Ағиҙел; төньяҡ этнографик төркөм.

Беренсе төркөм Ыҡ йылғаһы буйҙарынан алып Татарстандың ҡайһы бер районларын үҙ эсенә ала. Быға бүләр (биләр), байлар, юрмый, ирәкте, гәрә, йылан ырыуҙары инә. Түбәнге Ағиҙел буйы — йәнәй, гәрә, ҡырғыҙ, йылан, елдәк, ҡанлы, ҡартын, таҙлар, ыуаныш ырыуҙары. Бында хәҙерге Илеш, Дүртөйлө, Бөрө, Ҡушнаренко, Саҡмағош, Благовар, Баҡалы, Шаран, Туймазы райондары, Татарстандың Минзәлә, Аҡтаныш, Аҙнаҡай, Бөгөлмә, Мөслим райондары. Төньяҡ этнографик төркөмөнә уран, гәйнә, балыҡсы, танып, һун ҡәбиләләре ҡарай. Бында Борай, Балтас, Ҡариҙел, Асҡын, Тәтешле, Яңауыл, Ҡалтасы, Краснокама райондары һәм Пермь өлкәһе башҡорттары инә [1].

Филология фәндәре кандидаты Т. F. Баишев үҙенең хеҙмәттәрендә башҡорт диалекттарын ентекләп тикшереү һөҙөмтәһендә, фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәренән сығып, уларҙы көнсығыш, көньяҡ, көнбайыш диалекттарына бүлә. Көнбайыш диалекты тураһында 40—50-се йылдарҙа үткән дискуссияларҙы иҫкә алайыҡ. Билдәле булыуынса, 40-сы йылдарҙың аҙағында Бөтөн башҡорт лингвистик конференцияһы үткәрелә. Уны Башҡортостандың тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты үткәрә. Конференцияла үҙенең эштәре, абруйы менән танылған, башҡорт теленең беренсе ғилми грамматикаһын яҙған Н. К. Дмитриев ҡатнаша. Был ғилми йыйылышта төп мәсьәлә булып башҡорт теленең диалекттары тора. Конференция башҡорт телендә өс диалект барлығын иҫбатлай (көнсығыш, көньяҡ, көнбайыш). 1953 йылда үткәрелгән семинарҙа башҡорт теленең өсөнсө төньяҡ-көнбайыш диалекты тураһында проблема яңынан ҡуйыла. Һөҙөмтәлә төньяҡ-көнбайыш диалекты башҡорт теленең өсөнсө диалекты тип танала һәм был диалект буйынса тәрән ғилми-тикшеренеү эшен башларға тәҡдим ителә. 1954 йылда ҡайһы бер райондарҙа диалектология экспедициялары үткәрелә (мәҫәлән, Асҡын, Борай, Балтас, Яңауыл райондарында) [2]. Әммә был изге эш туҡталып ҡала. Шуға ҡарамаҫ-

---

[1] Миржанова С. Ф. Этноязыковая ситуация в северо-западных районах БАССР // Этнические и этнографические группы в СССР и их роль в современных этнокультурных процессах. Өфө, 1989. 182—184-се биттәр. Северо-западный диалект башкирского языка. Формирование и современное состояние. Өфө, 1991.

[2] Ҡарағыҙ: Миржанова С. Ф. Северо-западный диалект башкирского языка (Формирование и современное состояние). Өфө, 1991. 13-сө бит (Введение); Баишев Т. Г. Научный отчет диалектологической экспедиции. 1954. Научный архив БНЦ УФОАН СССР. Ф. 3. ОП. 12. Д. 450.

тан, филология фәндәре кандидаты С. Ф. Миржанова төньяҡ-көнбайыш һөйләшен тикшереүҙе дауам итә, ауылдан-ауылға йөрөп, халыҡ менән һөйләшеп, уларҙың һөйләү телен яҙып алып, күп һанда фактик материал туплай, йәнетәне менән бирелеп, изге эшкә тотона. Һөҙөмтәлә филология фәндәре докторы дәрәжәһенә ирешә, төньяҡ-көнбайыш диалекты буйынса яҙылған монографияһы донъя күрә.

Тормоштан бик күп дәлилдәр килтереп, ғалимдар шуны иҫбатланы: беҙҙең төбәк халыҡтарының теле ул татар теле түгел, ә татар теле йоғонтоһон кисергән, татар теленә яҡын башҡорт теле диалекты. Башҡорт менән татар иң яҡын ҡәрҙәш халыҡ, ғәҙәттәре, йолалары уртаҡ, был ике тел араһында күп һүҙҙәр уртаҡланған, ҡайһы башҡорт һүҙҙәре төшөп ҡалғылаған, бер үк һүҙҙәр ҡулланыла алмай. Мәҫәлән, ҡәрҙәшлек, туғанлыҡ терминдары: *әтәй, инәй, әткәй, әни, әнкәй, апа, бабай, түтәй (Фатима түтәй, Мәрйәмтәй)* йыш ҡына ҡәрҙәшлек күрһәткән ҡушма һүҙҙәр ҡулланыла, улар төп һүҙгә *«ҙур, дәү, оло, сибәр, аҡ абыз, шәкерт»* кеүек һүҙҙәр өҫтәлеп яһала *(ҙур әнкәй, абыз бабай, абыз әбей, абызәбей, аҡ әбей (агәбей), аҡ бабай, бал әбей, шәкерт, абзый, абыҙ, түтәй (абыстаҡай, абыстәй)* һ. б.

Мин тыуған районда һөйләү телендә төньяҡ-көнбайыш диалекттың *-ай/-әй* формалары *(бармай, килмәй, ашамай, бармайым* һ. б.), шулай уҡ алмаш һүҙ төркөмө составында *«миә, сиә; ни, нәмә, нәстә, нәрсә, нәстәкәй, нәрсәкәй»* (мне, тебе, что) формалары ҡулланыла.

Мин бала саҡтан, инә һөтө менән көнбайыш башҡорттарының диалектында һөйләгәм, уҡығам, уйнап үҫкәнмен. Минең тыуған ауылым Баҡалы — башҡорт ауылы, шул уҡ ваҡытта ауылда татарҙар ҙа бар ине. Ауыл ҙур ғына өс урамға бүленеп, шуның икеһе башҡорт урамдары тип, өсөнсөһө типтәр осо тип йөрөтөлә ине. Тирә-яҡта ла башҡорт ауылдары ине (Кәшкәләү, Ҡарағош, Даутлар, Тазлар, Ҡизгән, Сәйтәк, Имән, Борай, Ҡаразирек һәм башҡалар). Был регионда йәшәгән халыҡтар үҙҙәренең милләтен башҡорт тип, шул яҡтың төп халҡы тип белә: был диалект уның ҡанына һеңгән, күңеленә яҡын, үҙенең туған теле тип ҡарай.

Беҙҙең диалекттың башҡорт теленең диалекты икәнлегенә мин тағы ла бер дәлил килтерә алам. Бөрө педагогия техникумын бөтөргәс, уҡытырға Яңауылға тәғәйенләнгәйнем. 1-се Яңауыл мәктәбендә 2 йыл (1935—1937) тарих һәм әсә теле менән әҙәбиәтен ошо үҙебеҙҙең диалектта уҡыттым. Унан һуң Ҡазан педагогия институты-

ның татар теле бүлегенә уҡырға индем. Ләкин минең һөйләү телемде татарҙар аңламай ине. «Һинең һөйләүең татар теле түгел», — тип минән көләләр ине. Бер йыл тигәндә мин татар телен ентекләп бөтә яҡтан өйрәндем, татар теленең бай һүҙлек составын үҙләштерҙем, саф татар телендә сығыш яһарға ирештем. Был факт төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының һөйләү теле башҡорт теле диалекты икәнен тағы ла иҫбатлай.

*1995*

*Нәжибә МӘҠСҮТОВА, филология фәндәре докторы*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНЕҢ КӨНБАЙЫШ ДИАЛЕКТЫ

Халыҡтың, милләттең туған телен өйрәнеү ерле һөйләштәрҙе, йәғни төбәк һөйләштәрен, өйрәнеүҙән башлана. Бынан бер быуат элек баҫылып сыҡҡан «Русса-башҡортса» һүҙлектә Бәләбәй өйәҙендәге башҡорттарҙың һөйләше Ырымбур өйәҙендәге ҡыпсаҡ ҡәбиләһе вәкилдәренең теленән айырылмауы, бермә-бер оҡшашлығы тураһында мәғлүмәт бирелә. Был һүҙлекте төҙөүсе профессор Н. Ф. Катанов ҡыпсаҡ ҡәбилә теле менән бөрйән ырыу вәкилдәренең тел айырымлығын да билдәләй. Йөҙ йыл тел яҙмышында ҙур осор, ләкин телгә, һөйләшкә әллә күпме баҫым, йоғонто яһағанда ла, ул тулыһынса икенсе телгә күсмәй, үҙенең эске ҡанундарын, үҙенсәлеген һаҡлап ҡала. Элекке Бәләбәй өйәҙендә йәшәүсе башҡорттарҙың төбәк һөйләшенең тотороҡлолоғо йөҙ йылдан һуң «Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге», III том (көнбайыш диалект) [1] (Өфө, 1987) тигән хеҙмәттә тулыһынса раҫлау тапты. Билдәле булыуынса, ерле һөйләш үҙенсәлектәренән сығып, ҡайҙа ниндәй һөйләш булыуы асыҡлана. Өндәр ҡулланылышы буйынса башҡорт һөйләштәренән бер ни тиклем айырымыраҡ торған көнбайыш диалектының һүҙ байлығы, һүҙҙәрҙең мәғәнәүи үҙенсәлеге Ырымбур өлкәһендә йәшәүсе башҡорттарҙың һөйләше менән оҡшашлығы иҫбатлана, улар картала тотош бер лингвистик ҡатлам тәшкил итә.

Башҡорт теле өс ҙур диалекттан тора: **көнсығыш** — уға Башҡортостандың төньяҡ-көнсығыш, көньяҡ-көнсығыш

---

[1] Һүҙлекте төҙөүселәр: Мәҡсүтова Н. Х., Миржанова С. Ф., Дилмөхәмәтов М. И., Нәҙерғолов У. Ф. һ. б.; яуаплы ред. филология фәндәре докторы Н. Х. Мәҡсүтова.

районларында һәм Силәбе, Ҡурған өлкәһендә йәшәүсе башҡорттарҙың һөйләү теле инә. **Көньяҡ** диалект — көньяҡ, көньяҡ-көнбайыш, Башҡортостандың урта өлөшө, Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәһендә йәшәгән башҡорттарҙың һөйләү телен берләштерә. **Көнбайыш** диалектҡа Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш, көнбайыш райондарында, Пермь өлкәһендәге боронғо гәйнә, Урта Уралдағы боронғо өпәй ырыуы, «ҡыҙыл һыйыр» тигән атама тағылған әйле, тамъян, мең һ. б. ырыу вәкилдәренән торған минзәлә башҡорттарының һөйләше инә. Өс диалект буйынса өндәр (фонетика), һүҙ төҙөлөшө (морфология), һүҙ байлығы (лексика), һөйләм төҙөлөшө (синтаксис) һ. б. тулыһынса фәнни тасуирланған монографиялар (филология фәндәре докторҙары Ж. Ҡейекбаев, Н. Ишбулатов, Н. Мәҡсүтова, С. Миржанова һ. б.), диалектологик һүҙлектәр, «Һөйләү теле үрнәктәре» тигән хрестоматия башҡорт теле ғилеменә генә түгел, бөтә төрки телләләр донъяһына билдәле хеҙмәттәр булып тора. «Башҡорт теленең диалектологик атласы» тигән (ун биш йыл буйына эшкәртелгән) ҙур күләмле етди хеҙмәт башҡарылды. Һөйләштәрҙең, диалекттарҙың үҙенсәлеге картаға төшөрөлдө, һөйләш сифаттарының, күренештәренең бер-береһенә оҡшашлығы, айырымлығы, ҡәбилә, ырыу телдәренең боронғо торошо, хәҙергеһе буйынса әһәмиәтле мәғлүмәттәр алынды, һығымталар яһалды.

30-сы йылдарҙа башҡорт теленең өндәр, ялғауҙар үҙенсәлеген, һүҙ байлығын өйрәнеү йәһәтенән бик күп экспедициялар ойоштороло. Тел өлкәһендәге ҡаҙаныштар (орфографик, башҡортса-русса һүҙлек, морфология, синтаксис буйынса хеҙмәттәр) башҡорт халҡының йәнле һөйләү телен өйрәнеү, һүҙ байлығын туплау кеүек мөһим тикшеренеүҙәр менән аңлатыла. 20—30-сы йылдарҙа төбәк һөйләштәрен өйрәнеүгә күбеһе репрессияға дусар ителгән ғалимдар: Ғ. Амантаев, Ғ. Дәүләтшин, Х. Әбдрәшитов, Н. Таһиров, М. Билалов, Т. Баишев, Ф. Ғималов, У. Хөсни, Ҡ. Әхмәров, З. Шакиров һ. б. күп көс һала.

Башҡорт теленең көнбайыш диалектына Башҡортостандың ҙур ғына өлөшө ҡарай. Ул Ҡариҙел, Туҡ, Сөн, Ҡармасан, Сәрмәсән, Ағиҙелдең түбәнге ағымы, Танып йылғалары тирәһендә йәшәгән башҡорттарҙың, шулай уҡ гәйнә, минзәлә кеүек, хәҙерге Татарстанға ҡараған байтаҡ райондарҙың һөйләшен эсенә ала. Башҡорттарҙың теге йәки был тарихи сәбәптәр арҡаһында килгән татар халҡы вәкилдәре менән аралаш йәшәүе көнбайыш диалектына тәьҫир итмәй ҡалмаған. Был яҡтарҙа революцияға тиклем үк башҡорттарҙы татар милләтенә, татар теле-

нә күсереү өҫтөндә күп эшләнелә, бигерәк тә төрки яҙма теле үрнәгендә мәҙрәсәләрҙә уҡыу, һуңынан татар телендә уҡытыу-тәрбиә эштәрен алып барыу башҡорт теленә хас *һ, ҫ, с, ҙ, ф, ҡ, ә* өндәрен ҡыҫырыҡлап сығарыуға, икенсе телгә хас өндәр менән алыштырыуға килтерә.

Көнбайыш диалекты башҡорт тел ғилемендә иң нык, төпсөрләп өйрәнелгән диалекттан һанала, сөнки был диалект тураһында башҡорт һәм татар тикшеренеүселәренең фекере нык айырыла. Ҡайһы бер татар телселәре (Д. Рамазанова) башҡорт теленең көнбайыш диалектын татар әҙәби теленең нигеҙен тәшкил иткән урта диалектҡа индерә. Бындай ҡараштың ысынбарлыҡ һәм тел фәне менән уртаҡлығы юҡ, сөнки ниндәйҙер кимәлдә ике (башҡорт, татар) тел үҙенсәлектәрен тотҡан диалект ҡайһы булһа ла телдең әҙәби формаһына нигеҙ була алмай. Тикшеренеүҙәрҙән сыҡҡан бик күп тел дәлилдәре был райондарҙа йәшәгән башҡорттар уҙ туған теленең үҙенсәлектәрен, төп сифатын һаҡлауы тураһында һөйләй. Һуңғы быуын диалектолог ғалимдар (фән докторҙары Нәжибә Мәҡсүтова, Сәриә Миржанова, фән кандидаттары Рафаэль Аҙнағолов, Миндияр Дилмөхәмәтов, Урал Нәҙерғолов һ. б.) монографик хеҙмәттәр, диалектологик һүҙлек (III том), Атлас өсөн һәр ауылда йәшәгән кешеләрҙән яҙылып алынған, махсус һораулыҡтар ярҙамында тикшерелгән мәғлүмәттәрҙән файҙаландылар. Мәҫәлән, Лингвистик атласҡа 150-гә яҡын ауыл һөйләше, һүҙлек өсөн Пермь өлкәһе Барҙы районына ҡараған Ишем, Солтанай, Танып, Түбәнге Йскилде, Үҙик, Әржен, Бичурин, Ольховка ауылдарынан, төньяҡ-көнбайыш һөйләше буйынса Асҡын районынан 11 ауыл (Баҙансаттан алып Һөйөшкә тиклем). Баҡалы районынан Иҫке Ҡорос, Туҡтағол, Яңы Дөмәй, Яңы Ҡатай), Балтастан (Иҫке Балтас, Иҫке Илекәй, Түсебай, Эштәнде), Бөрө, Бишбүләк, Благовар, Благовещен, Борай, Бүздәк, Бәләбәй, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Илеш, Краснокама, Кушнаренко, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Мишкә, Саҡмағош, Тәтешле, Туймазы, Шишмә, Шаран, Яңауыл райондарынан йөҙҙән ашыу ауылдарҙан мәғлүмәттәр (1972—1989) тупланылды. Был тикшеренеүҙәрҙә үҙҙәрен башҡорт тип һанаған ауылдар, шулай уҡ «башҡорт осо», «мишәр осо», «башҡорт осо», «татар осо» тигән ауыл һөйләштәре алынды, ә үҙҙәрен «татарҙарбыҙ», был «татар ауылы» тигәндәргә бөтөнләй туҡтанылманы, уларҙың һөйләше өйрәнелмәне. Башҡорт телсе-ғалимдары алдында Татарстанға ҡараған Бөгөлмә районы башҡорттарының тел үҙенсәлектәрен ныҡлап өйрәнеү бурысы тора.

Профессор И. Е. Андреевский редакторлығында 1891

йылда (бынан йөҙ йыл элек) сыҡҡан энциклопедик һүҙлектең VIII томында күрһәтелгәнсә, Бөгөлмә өйәҙендә башҡорттарҙың һаны 80 мең 500, татарҙарҙың 40 мең 650, һүҙлектең 1896 йылда баҫылған XXXVII томында Минзәлә өйәҙендә башҡорттар 116 мең 330, татарҙар 47 мең 980 кеше булған. Ике өйәҙҙә лә башҡорттар татарҙарға ҡарағанда икеләтә күп булған, улар күпселекте тәшкил иткән. Һуңғы йылдарҙағы иҫәпләмә буйынса Татарстанда барлығы 3000 самаһы башҡорт йәшәй.

1979 йылғы иҫәпләмә (перепись) буйынса көнбайыштағы бик күп райондарҙа башҡорттарҙың күпселекте тәшкил иткәнен күҙәтәбеҙ. Мәҫәлән, Илеш районында 33 576 башҡорт (78,9%), 5 468 татар (12,9%), Борай районында 28 624 башҡорт (73%), 6 442 татар (16,4%), Благовар районында 11 742 башҡорт (44,9%), 6 084 татар (23%), Балтас районында 23 793 башҡорт (74%), 1 942 татар (6%), Аҫҡын районында 17 489 башҡорт (61,4%), 6 000 татар (21%), Тәтешле районында 20 298 башҡорт (67,3%), 2 076 татар (6,9%), Краснокама районында 11 270 башҡорт (32,8%), 7872 татар (22,9%), ә Дүртөйлө, Ҡариҙел, Кушнаренко, Шаран райондарында башҡорттарҙың һәм татарҙарҙың һаны бер кимәлдә, тип әйтерлек. Татарҙарҙың һаны Бүздәк (башҡорт 10 291, татарҙар 19 902), Саҡмағош (башҡорттар 13 558, татарҙар 22 361), Ҡалтасы (башҡорттар 1 662, татарҙар 6 203) райондарында башҡорттарға ҡарағанда артығыраҡ. Йомғаҡлап әйткәндә, был райондарҙа бынан 15 йыл элек башҡорттар 265 435, татарҙар 185 345 кеше булған. Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә йәмғиәтте үҙгәртеп ҡороу заманында тик сәйәси маҡсатта, Башҡортостанда боронғо башҡорттар иҫәбенә татар халҡының һанын арттырыу маҡсатынан сығып, башҡорттарҙың татар милләтенә күсеүе көсәйә, хатта, бында башҡорттар булмаған, тигән яуапһыҙ сығыштар ҙа күҙәтелә.

Ғәббәс Дәүләтшиндың «Туймазы, Яңауыл, Учалы һәм Ҡоншаҡ төбәктәрендәге халыҡтың һөйләү телен өйрәнеүҙең ҡайһы бер йомғаҡтары» исемле 1931 йылда төҙөгән отчетында түбәндәге мәғлүмәттәр теркәлгән. «Хәҙерге көндә, — тип яҙа Ғ. Дәүләтшин, Яңауыл районында барлығы 71 мең 140 йән иҫәпләнеп, шуның 44 мең 081-е башҡорттар, 11 мең 019-ы татарҙар, 9 мең 632-һе урыҫтар, 4 мең 117-һе мариҙар, 6 мең 291 йән удмурттар. Эш ҡағыҙҙары яртылаш урыҫса, яртылаш ғәрәпсә һәм Яңы әлеп хәрефтәре менән татарса йөрөтөлә. Барлыҡ татар, башҡорт мәктәптәрендә уҡыуҙар татар телендә бара. Башҡорт мәктәптәренең береһендә лә башҡорт теле индерелмәгән. Яңауыл, Ямаҙы, Аҡсәйет ауылдарында башҡорт теле айырым

фән рәүешендә генә индерелгән булһа, ул да исемдә бар, һанда юҡ рәүешендә генә. Яңауылда Айыуханов тарафынан урыҫтар өсөн башҡорт теле дәреслеге итеп төҙөлгән китаптан файҙаланғандар. Уҡытыусыларҙың әйтеүенә ҡарағанда, балалар башҡорт телен һөйөнөп уҡый. Ямаҙы мәктәбендә тел уҡытыусыһы Ғирфанов Хафиз, балалар «нәстә» урынына «нәмә», «почмак» урынына «мөгөш», «тез» урынына «тубыҡ», «мич» урынына «мис», «чымылдыҡ» урынына «сымылдыҡ», «бүкән» урынына «көпсәк», «кечкенә» урынына «бәләкәй», «тустаган» урынына «сүкәтә», «сүгәтә», «жыйылыш» урынына «йыйылыш», «жигет» урынына «егет», «житәкчелек» урынына «етәкселек», һәм башҡа шуның кеүек һүҙҙәр, атамалар ҡулланғанын, башҡорт телендәге иренләшеү ҡануны буйынса яҙыуҙары, *с* өнө урынына *һ* ҡулланып, «су» урынына «һыу», «салкын» урынына «һалҡын», «китсә» урынына «китһә» тип һөйләүҙәре һәм яҙыуҙары менән, йөмлә хаталарын төҙәтеү юлында байтаҡ көрәшергә тура килгәненә зарлана (ҡарағыҙ: юғарыла аталған отчеттың 2, 4-се биттәрен). 20—40-сы йылдар араһында ғына 20-гә яҡын экспедиция эшләй һәм был тикшеренеүҙәрҙең мәғлүмәттәре Тарих, тел, әҙәбиәт институтының архивында һаҡлана. 1934 йылда Солтанбәк, Ҡарткиҫәк, Ҡобояҙ, Иҫке Бағазы, Ҡашҡа, Абдулла, Ҡаршыйылға, Упҡынкүл, Сөйөш, Билгеш, Муллаҡай ауылдарының тел үҙенсәлектәрен тикшереүселәр алдына «уҡытыу, тәрбиә-ағартыу эштәре ниндәй телдә — башҡортмо йәки татар телендәме алып барылырға тейеш?» тигән һорау ҡуйыла. Тикшеренеүсе телсе ғалимдар етәкселек тарафынан ҡуйылған был һорауға төплө яуап бирәләр, йәғни башҡорт һәм татар ауылдарын айырып ҡарау, башҡорт ауылдарында уҡыу-тәрбиә эштәрен үҙ туған башҡорт телендә алып барыу, башҡорт телендә район гәзиттәре сығарыу (башҡорт телендә гәзиттәр баҫылған, тик уларҙы ла япҡандар — *Н. М.*), ябылғандарын яңынан тергеҙеү кәрәклеген дәлилләйҙәр. Ул йылдарҙа Туймазы районы буйынса төҙөлгән отчетта «...Считают себя башкирами и ни в коем случае не хотят называться татарами. Язык населения близок к башкирскому литературному языку. Звук *«ҙ»* произносится больше, чем в башкирском языке *(аҙым, ҙары, ҡоҙа, боҙай, иҙән, Йомаҙыбаш, ҙаман, ҙур, сигеҙ, кеҙә)* бик күп башҡорт һөйләштәрендә кеҙә — *Н. М.*) (вместо кеҫә) и т. д. (бригадир и составитель отчета Кучуков)».

Башҡорт халҡын теленән яҙҙырыуҙа, татар милләтенә күсереүҙә район һәм өлкә комитеттары, шулай уҡ татар милләтенән булған тикшеренеүселәр (мәҫәлән, Сүнчәләй),

татар зыялылары һуңғы һүҙ әйтә. «...В школах башкирских деревень языком преподавания считать татарский язык» (выписка из протокола заседания бюро Туймазинского райкома ВКП(б). Тикшеренеүҙәр ҡабатлана, ВКП(б) Өлкә Комитетына, КПСС Өлкә Комитетына мөрәжәғәттәр яҙыла, тик башҡорт халҡын башҡорт телендә уҡытыу тыйыла. Филология фәндәре кандидаты Таһир Баишев 30—40-сы йылдарҙағы тикшеренеүҙәрҙә ҡатнаша, ул 1954 йылда бер төркөм йәш ғалимдарҙан башҡорт теленең көнбайыш диалектын өйрәнеү буйынса йәнә экспедиция ойоштора. 1954 йылда ла балаларҙың татар телен үҙләштерә алмауҙарына, үҙҙәренең туған башҡорт теле ерлегендә хаталы яҙыуҙарына Татарстандан килеп татар телендә уҡытҡан уҡытыусылар зарлана. Халыҡ теләге, тикшеренеүсе ғалимдарҙың фекере менән иҫәпләшмәү үҙенең һөҙөмтәһен бирә. 40-сы йылдарҙа «һыу», «һалҡын», «китһә» тип һөйләүселәр 90-сы йылда юҡ, әлбиттә. ...Ләкин һаман да халыҡ араһында ризаһыҙлыҡ, үҙ милләтен һаҡлаусылар юҡ түгел. 20—40-сы йылдарҙа, унан да алда татар буржуаз милләтселәренең «башҡорт теле татар теленең диалекты» тигән уйҙырманы әле лә ҡабатлауҙар күҙәтелә. Башҡорт иленән киткән, ни үҙ милләтен, ни телен асыҡлай, баһалай алмаған, тарих һәм тел мәғлүмәттәре менән таныш булмаған ҡайһы бер кешеләр шул уҡ фекер менән йәшәй. Башҡорт теленең көнбайыш диалекты тирәһендә барған нигеҙһеҙ **бәхәстәр тел ғилеме мәғлүмәттәре** менән таныш булмауҙан, хатта танышырға теләмәүҙән, фән күҙлегенән түгел, ә сәйәси (экстралингвистик фактор) күҙлектән сығып фекер йөрөтөүҙең һөҙөмтәһе ул. Йөҙ йылға яҡын барған бәхәстәрҙә нигеҙһеҙ, ерлекһеҙ фекерҙәр әйтелә килә, ә халыҡтың, ошо ерҙең, илдең хужаһы, башҡорт халҡының тауышына, талабына һаман да иғтибар юҡ. 1988 йылда (бынан алты йыл элек) Борай районынан: «Районда 70—75 процент башҡорттар, күпселеге башҡорттар йәшәгән ауылдарҙа татар теле уҡытыла. Был инде башҡорт була тороп, туған телем татар, шулай булғас, мин дә татар, тиеүгә килтерә. Балаларҙың яҙма эштәрен күрһәгеҙ — яртыһы башҡортса, яртыһы татарса», — тип яҙа Рәүиә Ғилфанова үҙенең мәғариф министрына бағышланған асыҡ хатында. Был фекер, башҡорт халҡының зары бынан алтмыш, етмеш йыл элек әйтелгән фекерҙән айырылмай, уның менән тап килә, тимәк, уҡыу-уҡытыу теленең көслө йоғонтоһона ҡарамаҫтан, башҡорт теле юғалтылмаған әле. Һаман да уҡыусылар туған теленең тәрән үҙенсәлектәре нигеҙендә «хата» ебәрә, һаман да татар телен тулыһынса үҙләштерә алмай аҙаплана.

Мәҡәләнең киң халыҡ даирәһенә тәғәйенләнгәнен иҫтә тотоп, ҡалын монографиялар, һүҙлектәр, Атластың, Лингвистик карталарҙың мәғлүмәттәрен килтермәйем, шулай ҙа башҡорт теленең төп ҡанундарының көнбайыш диалектта ҡулланылыуына туҡталмау мөмкин түгел. Башҡорт теле башҡа төрки телдәре араһында үҙенең өндәр төҙөлөшөнөң (үҙенсәлекле *ҙ, ғ, ҡ, ҫ, һ, ң* тартынҡылары) киңлеге, һөйләү ҡеүәһенең көслөлөгө, һүҙ байлығы, тел сафлығы менән айырылып тора. Европа телдәре менән уртаҡ *ҫ, ғ, ҡ, һ* тартынҡы өндәре башҡорт телен немец, инглиз, француз, халадж һ. б. телдәр менән яҡынайта. Башҡорт телен, йәғни үҙ туған телен, белгән кешеләр өсөн ошо сит телдәрҙе өйрәнеү әллә ни ҡыйынлыҡ килтермәй. С. Е. Малов башҡорт телен боронғо телдәрҙән һанай һәм ғалимдың фекере беҙҙең тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе менән раҫлана. Башҡорт теленең көнбайыш диалектына хас 1) *лт, рт, нт, ңк* өнойҡаштары VI—VII быуаттарҙа асылған боронғо Йәнәсәй-орхон яҙмаларында, йәғни боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларында, осрай. Башҡорт теленең был үҙенсәлеге *(килте, барты, анта, мынта)* башҡа бер төрки телендә лә күҙәтелмәй һәм был боронғо башҡорт теленең күренеше булараҡ, бер телдең дә диалект үҙенсәлеген хасил итә алмай. Был үҙенсәлек, йәғни *лт, рт, нт, ңк* башҡорт теленең башҡа (урта һ. б.) һөйләштәрендә күҙәтелә. Тимәк, көнбайыш диалектта башҡорт теленең төп эске ҡанундарының үҙенсәлеге һаҡланған. Улар башҡа төрки телдәрендә шулай уҡ күҙәтелмәй; 2) *ай, әй, ей* өндәр ойҡашы, йәғни дифтонгоидлы әйтелеш. Мәҫәлән: *эшләмәй, бирмәй, уҡымай, ҡайтмай* һ. б.; 3) киң һәм тар әйтелешле өндәрҙең сиратлашыуы: *тура, туры, умырзая, умырзыя, жәйәү, жейәү* һ. б.; 4) боронғо башҡорт теленә хас үҙенсәлек булған *у* өнөнөң киң ҡулланылыуы: *ҡумған, сурау, туҡмаҡ;* 5) *ө* өнөнөң функциональ киңлеге: *бөгөн, жөгөрөү, йөгөрөү, йөткөрөү, көзәтеү, ғөмөр;* 6) башҡорт теленең башҡа һөйләштәрендә күҙәтелгән үҙенсәлек — *д-т* тартынҡыларының ҡатар ҡулланылыуы: *дағa, тағa, дары, тары, дамға, тамға, дегәнәк, тегәнәк, туғай, дуғай, тән, дән* һ. б.); 7) *ж* өнөнөң даирә киңлеге (был үҙенсәлек әй, дим һөйләштәрендә тап көнбайыш диалекттағыса ҡулланыла): *жен, жир, жирән, жите, жийын, жәй, жәймә.*

Көнбайыш диалектында *с-т-ч* тартынҡыларының сиратлашыуы, ҡатар ҡулланылыуы был өндәр тәңгәлендә башҡорт теленең үҙенсәлеге һаҡланыуын күрһәтә. Мәҫәлән: *сөсө — төче, чөче, сирәм — чирәм, сөскөрөү — төчкеру* һ. б.

Һүҙ байлығы, һүҙ даирәһе, йәғни лексик байлыҡ — халыҡтың оҙайлы тарихы, боронғолоғо, ижади һәләте, сән-

ғәтсәнлеге тураһында һөйләй. Ҡөнбайыш диалектында, йәғни башҡорт халҡының был өлөшөндә күрһәтелгән үҙенсәлек милли хәтерҙә, милли телдә һаҡланған. Мәҫәлән: «абағай» (боронғолок күренеше) ҡыҙып китеүсән, ҡыҙыу ҡанлы мәғәнәһендә гәйнә, һаҡмар һөйләшендә ҡулланыла «абайлау» — күреп ҡалыу мәғәнәһендә көнбайыш диалектта, һаҡмар һөйләшендә ҡулланыла, «абзый» — ағай, үгәй атай, ана-инәһенән оло кеше мәғәнәһендә ҡулланылыуы менән үҙе бер лингвистик массив тәшкил итә, йәғни көнбайыш диалектында, туҡ-соран, урта Урал, һаҡмар, әй һөйләштәрендә бер үк мәғәнәлә ҡулланыла. Шулай уҡ «бызмыр», «мыжмыр» — ығыш, яй тотонған кеше мәғәнәһендә көнбайыш диалекты менән әй, һаҡмар, арғаяш һ. б. һөйләштәрҙе берләштерә.

Башҡорт теленең башҡа һөйләштәре менән көнбайыш диалектындағы лексик берҙәмлекте дәлилләгән бик күп миҫалдар килтереп була. (Ҡыҙыҡһынған кешеләр өсөн ул мәғлүмәттәр «Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге»ндә, III том (көнбайыш диалект), Өфө, 1987, тупланған.)

Башҡорт диалектолог ғалимдарының тишеренеүҙәре, дәлилдәре өҫтөндә, халыҡтан килгән мөрәжәғәттәр, тәҡдимдәр, һорауҙар өҫтөндә Башҡортостан Мәғариф министрлығы эш алып барырға тейешлеген дә һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк, сөнки ғалим ҡулында закон юҡ, ул мәсьәләнең практик яғын хәл итә алмай.

Бынан бер нисә йыл элек Тарих, тел, әҙәбиәт институтының бер төркөм ғалимдарын (Х. Усманов, Ғ. Хөсәйенов, З. Ураҡсин, Н. Зарипов, Н. Мәҡсүтова) Мәскәүгә башҡорт теленең көнбайыш диалекты тураһында татар телселәре, әҙәбиәтселәре менән осрашыуға саҡырҙылар. Мәскәү өсөн, диалектолог ғалим булараҡ, минең сығышта түбәндәге мәғлүмәттәр бирелә: татар телселәре башҡорт теленең көнбайыш диалектын татар теленең урта диалектына индереп, башҡорт теленең төп ҡанундарынан һаналған үҙенсәлектәре татар теленең «диалект айырымлығы» (диалектизмы) тип раҫлай. Мәҫәлән, эшләй — татар әҙәби теле эшли, белмәй — белми, шулай уҡ бармай — бара, тормай — тора; кәм, кәбән, кәртә, бәк — ким, кибән, киртә, бик урынына, үрәнеү, үрә — өрәнеү, өрә урынына, сәй, песән, әтәс — чәй, печән, әтәч урынына, дары, дигәнәк — тары, тигәнәк урынына ҡулланылған үҙенсәлектәр татар теленең урта диалектын татар әҙәби теленән айырып торған сифаттары итеп һүрәтләнә.

Диалектизмдарға азман «дикая пчела», арчи «сопроводители невесты», ҡағыт «пастила», ҡазнаҡ «основание нар», диңгез «фундамент», ағын «быстрина», урғыл «перекат»,

сазлыҡ, сазламыҡ «болото», бөргән «липучка» ошондай татар телендә һәм уның башҡа һөйләштәрендә осрамаған лексик берәмектәрҙе индерәләр. Килтерелгән һүҙҙәр башҡорт теле өсөн диалекталь үҙенсәлек түгел, ә ҡануни һүҙҙәр: аҙман, арси, арсый, ҡағыт, ҡаҙнаҡ, диңгеҙ (ырғыҙ, һалйот, эйек, һаҡмар, урта һөйләштәрҙә), ағын, урғыл, һаҙлыҡ, һаҙламыҡ, бөргән — күрһәтелгән мәғәнәлә бөтә һөйләштәрҙә ҡулланыла, башҡорт теленең киң ҡулланылған лексикаһын тәшкил итә.

Татар теленең морфологик «диалект үҙенсәлеге» итеп килеш — татар әҙәби телендәге килү урынына, барыш — барырға урынына, йазыша «постоянно пишет», сораша (хәлемне сораштары — «расспрашивал о моем здоровье», ҡайтыңҡыра, аврыңҡыра, жыйыңкырый, сүләңкери, барадыр — татар әҙәби телендәге бара урынына, яшидер, торгачтын — татар әҙәби телендәге торгач урынына, уҡымагачтын, юл бармалы булмады — татар әҙәби телендәге юл барырлыҡ булмады, бетермәгәле, эпекәй — татар әҙәби телендәге ипи урынына. Был формаларҙың башҡорт теле һөйләштәрендә, шулай уҡ башҡорт әҙәби тел даирәһендә ҡулланылыуын иҫбатлап тораһы юҡ, сөнки улар көндәлек телмәрҙә, аралашыу телендә, бөтә һөйләштәрҙә тиерлек актив ҡулланыла (беҙгә килеш, йаҙыша ла йаҙыша, һураша, һораша, ҡайтыңҡырай, ауырыңҡырай, жыйынҡырай, йыйыңҡырай, баралыр, йәшәйҙер, торғастан, торғастын, уҡымағастын, бармалы түгел, күрмәле түгел һ. б.).

Д. Рамазанова «К вопросу формирования белебеевского подговора минзелинского говора среднего диалекта татарского языка» (Ҡазан, 1979) тигән 19 биттән торған мәҡәләһенең 12 битен төрлө ваҡытта төрлө кешеләр, тикшеренеүселәр тарафынан тарих, этнография, археология буйынса әйтелгән фекерҙәре менән башҡорттарҙың был ерҙәрҙә йәшәүен шик өҫтөнә ала. Ул татар теленең бәләбәй һөйләшсәһенең үҙенсәлектәре итеп татар теленең *и* өнө урынына һөйләшсәлә *ә* ҡулланылыуын *(кәбән, кәштә)*, *ү* урынында *ө* килеүен *(шөрләү)*, иренләшеү ҡанундарын (оторға, татарса отарға урынына, өзөргә — өзәргә, тормош — тормыш урынына), шулай уҡ *жөн* татар телендәге *йон* урынына, йәбешеү — ябышу; ҙ өнөнөң ҡулланылыуы (ҙур, ҙаман), *х, ҡ, д-т, г-к, б-м* (борон, морон) өндәренең сиратлашыуын, тартынҡыларҙың төшөп ҡалыуын (кимәй), *м, н, ң* ассимиляцияһын (ямбаш) татар теленең орфоэпик (һөйләш) формаһы итеп күрһәтә. Күрһәтелгән тел үҙенсәлектәре татар теленең орфоэпик формаһы түгел, ә башҡорт теленең формаһы, төп ҡануни үҙенсәлектәре булып тора. Т. Хәйретдинова «Златоуст татарҙары һөйлә-

ләшенең барлыҡҡа килеүе» тигән мәҡәләһендә Әй һөйләшенә ҡараған, уның һөйләшсәһен тәшкил иткән Салауат, Мәсетле, Ҡыйғы, Дыуан, Балаҡатай райондарында йәшәүсе мишәрҙәрҙең һөйләшен һәм Ҡыҙылбай, Ҡорғат, Тәкәкеүек башҡорт ауылдарының телен татар һөйләше итеп тасуирлай, башҡорт теленең үҙенсәлектәрен татар теленең үҙенсәлеге итеп һанай. Р. Нуретдинов «Смешанный говор татарского языка северных районов Башкирской АССР» (1984) тигән мәҡәләһендә: «Татары западной и юго-западной части БАССР слабо восприняли влияние башкирского языка», — тип яҙа. А. Әфләтунов башҡорт теленең көнбайыш диалекты тураһында «...образовался так называемый коридор между татарским и башкирским языками с преобладанием татарских элементов», — ти. Был «тикшеренеүҙәрҙең» һығымталарына иғтибар итегеҙ: береһе (Д. Рамазанова) башҡорт теленең көнбайыш диалектын татар әҙәби теленең нигеҙ диалекты булған урта диалектҡа индерә, икенсеһе (Р. Нуретдинов) «татар теленең ҡатнаш (буталған) һөйләше», ти, өсөнсө (А. Әфләтунов) «татар теле менән башҡорт теле араһындағы коридор һөйләш» тип атай, дүртенсеһе (Ғ. Әхәтов) бөтә башҡорт һөйләштәрен татар теленең урта диалектына индерә (ҡарағыҙ: «Татарская диалектология — средний диалект» — учебное пособие 1979 г.), бишенсеһе (Л. Мәхмүтова): «Мишкә районынан ары башҡорт һөйләше башлана», — тип белдерә. Төрлө ҡапма-ҡаршы фекерҙәр татар телселәре тарафынан был райондарҙың тел үҙенсәлеге етди өйрәнелмәгәнен күрһәтеү менән бергә, тикшеренеүселәрҙең һөйләш үҙенсәлектәрендә объектив түгеллеген һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Башҡорт теленең көнбайыш диалектын етди, нигеҙле өйрәнеү башҡорт телсе ғалимдары тарафынан 20-се йылдарҙан алып бөгөнгө көнгә тиклем дауам итә. Татар диалектологтарының был райондарҙың һөйләше буйынса бер нисә мәҡәләһе 60-сы йылдарҙан (1959, 1961, 1962, 1979, 1984) күренә башлай. Бәләкәй күләмле мәҡәләләр йәки кандидатлыҡ диссертациялары ғына диалекттың тәрән ҡатламдарын асырға мөмкинлек бирмәй.

1940 йылда II Бөтә Союз лингвистик конференцияһында башҡорт теле буйынса беренсе грамматика яҙған Н. К. Дмитриев ҡатнашлығында башҡорт теленең диалекттары һәм уларҙың картаһы тикшерелеп, ҡабул ителә. Ул ваҡытта уҡ Таһир Ғәлләм улы Баишев тарафынан тел үҙенсәлектәренән сығып төҙөлгән диалектологик картала башҡорт теленең өс диалектының сиктәре аныҡлана, ә инде 80-се йылдарҙа төҙөлгән Атласта был тикшеренеү ҡабат

раçлана, йәғни көнбайыш диалектының башҡорт теленең һаҡмар, туҡ-соран һөйләштәре менән яҡынлығы картала изоглоссалар ярҙамында иçбат ителә. Филология фәндәре докторы С. Ф. Миржанованың ҙур күләмле монографияһы, Диалектологик Атлас, һүҙлек, был диалект буйынса күп һанлы мәҡәләләр фәнни йәһәттән инҡар итмәçлек етди ғилми хеҙмәттәр булып тора.

Донъяла, башҡа халыҡ тарихында, тел ғилемендә үҙ ерендә, үҙ илендә килген халыҡҡа ҡарағанда күпселек тәшкил итеп тә (юғарыла килтерелгән халыҡ иçәбен алыуҙың мәғлүмәттәренә иғтибар итегеҙ), милли теленән айырылыуға, милли аң юйылыуына дусар ителгән башҡорттарҙан башҡа миçал табып булмай. Үҙ милләтен таныған, милли телен, милли аңын һаҡлаған башҡорттарҙы нисәмә тиçтә йылдар буйы татар телендә уҡытыу, үҙ тыуған халҡының, ерләгән еренең тарихын белмәү, ә икенсе халыҡтың тарихын өйрәнеү, ошо ил, тыуған тупраҡ өсөн миллион ҡорбандар биргән, тыуған төйәген ҡан, тир менән һуғарған, данлы, ҙур тарихлы халҡы менән ғорурланыу урынына милләтенән кәмһенеүгә, социаль ғәҙеллек булыуына ышанмауға килтергән һәм килтерә. Ҡариҙел районында оло кешенең: «Ғүмер буйына телебеҙ мыçҡыл аçтында булды», — тиеүе кәмһетелеүгә, теленән яҙыуға барған халыҡтың зары түгелме ни?

Халыҡты тыуған теленән ниндәйҙер маҡсатта айырыу лингвистик проблема ғына түгел, социаль һәм сәйәси мәсьәлә ул. Был райондарҙағы башҡорттарға үҙ телендә белем алыуҙы тәьмин итеү, ғәҙеллек урынлаштырыу, халыҡ ихтыяры менән иçәпләшеү өсөн нигеҙле ғилми тикшеренеүҙәргә арналған хеҙмәттәр бар. Диалектолог ғалимдар, белгестәр үҙ бурыстарын үтәне һәм үтәйҙәр, башҡорт теленең көнбайыш диалектына тел үҙенсәлектәренән сығып, объектив баһа бирелде. Эштең практик яғын башҡарыусылар ошо ғилми хеҙмәттәргә, халыҡ теләгенә таяна алалар.

*1995*

*Миҙхәт ҒИЛЕМХАНОВ, отставкалағы полковник*
*Хажғәли ЯППАРОВ, иҡтисади фәндәр кандидаты*

## ДӨМӘЙҘӘР — АÇАБА БАШҠОРТТАР

Ата-бабаларыбыҙ телен, рухын аҡрынлап юғалтып килеүсе башҡорт төйәктәре иçәбенә беҙҙең Илеш районын-

дағы тыуған ауылыбыҙ Дөмәй ҙә килеп ингән. Ауылыбыҙға ҡайтҡан һайын унын был фажиғәһенең тәрәнәйә барғанын тойоп-белеп күңел әрней. Тамыры менән башҡорт ауылы Дөмәй, этник наҙанлыҡ һөрөмөнә биләндерелеп, үҙен бөгөн татар ауылы тип һанай. Билдәле, Башҡортостаныбыҙҙа, Татарстанда һәм күрше бер нисә өлкәлә нисәмә башҡорт ауылы хәҙер үҙенең башҡорт рухын юғалтҡан. Беҙҙеңсә, ошо кире күренеш барлыҡҡа килеүендә төп сәбәптәр — икәү. Беренсе — башҡорт теле һәм тарихы фәндәренең артта һөйрәлеүе, икенсеһе — Татарстандың көнсығыш өлөшөндә төп халыҡ булып йәшәүсе өс йөҙ меңдән ашыу башҡортто 1926 йылда халыҡ иҫәбен алыу ваҡытында татар тип аҡҡа ҡара менән теркәп ҡуйыуҙары.

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына «татар» этнонимын мәжбүри тағыу, уларҙы ата-бабаларының рухи мираҫынан мәхрүм итеү — афәт.

Был афәткә юл ҡуймау өсөн, бөгөн беҙгә тәү сифатта нимәләр эшләргә кәрәк һуң? Яуап бер: бөгөндән беҙгә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ауылдарының тарихын ентекләп тикшерә башларға, уның һөҙөмтәләрен халыҡҡа төшөндөрөргә, еткерә барырға кәрәк. Ошоно күҙ уңында тотоп, беҙ, был юлдар авторҙары, тыуған ауылыбыҙ Дөмәйҙең тарихын өйрәнергә тотондоҡ...

Ауылыбыҙҙың тарихи исеме Дөмәй генә түгел, ә Иҫке Дөмәй. Уның халҡы — ҡыр-ялан ырыуы башҡорттары. Беҙгә билдәле мәғлүмәттәргә таянып, шуны әйтә алабыҙ: Дөмәй кешеләренең боронғо бабаһы Байсура исемле булған. Ә уның атаһы — Туҡтамыш Байсураның улы Дезай (Девай, Дәүәй) 1666 йылды ҡырғыҙ ырыуы башҡорто Төпәй Безергиновтан уның Маты йылғаһы буйындағы аҫаба ерен бурысҡа һорап ала һәм аҙаҡ шул төйәктә Девай исемле ауыл барлыҡҡа килә. Был ауылдың исеме һуңынан Дөмәйгә әйләнә (ә Дөмәй Девайҙың улы). Ошо мәғлүмәттәр беҙгә Мәскәүҙәге Боронғо акттар һаҡланған Үҙәк архивтағы бер документтан (1173-сө фонд, 57-се документ) билдәле, ә ул материал — 1695 йылда башҡорт кешеһе Ҡәсәй Туҡтағоловтың Петр Беренсегә яҙған ялыуы: «Великому Государю Царю и Великому князю Петру Алексеевичу Всея Великая и Малая и Белыя России самодержавцу бьют челом холопы твои Уфимского уезду Казанские дороги Киргизские волости башкирцы Карабаш Токтагулов и Кисейка Тахтагулов с товарищи всею Тохтагуловой деревнею. В прошлых годах отдал отец над Тохтагул в вотчине своей по речьке Маты пахать земли тое же дороги Иланские волости башкирцу Диваю Бай-

чурину по любви без обрашно, тое распаханную землю отец мой Тохтагул взял у него Девая назад а ныне в той земле бьют челом тем Великому Государю на нас холопой твоих его Диваев сын Дюмейка да Рыска Токайка Исянгуловы что тою землею будто мы, холопы твоим пашем насильством своим, а в место той пашенные земли по договору дали на оброк земли к той же нашей волости киргизской башкирцы Сунбай Кузубаев с сыном своим Исенбаем ему Деваю а с оброку ему Сунбаю с сыном дал он Дивай полторы рубли порожную пашенную землю, что дана была по любви по договору отдать отцу нашему Токтагулу назат Мелосердный Великий государь царь и Великий князь Петр Алексеевич Всея Великая и Белая и Малая России самодержавец пожалуй нас холопей своих вели Государь Дюмея с товарищи в том допросить имали его Демеев отец Дивай у отца нашего Тохтагула по любви пахать земли у Сунбая Козубаева по договору пахать земли в прежнюю полюбовную землю отдать нашему Тохтагулу назат Великий Государь смилуйся».

Туҡтағолов ялыуын юғары инстанцияла ҡыр-ялан башҡорттары файҙаһына хәл итәләр, был хаҡта юғарыла күрһәтелгән фондтың шул уҡ 57-се документында шулар яҙылған: «И стольник и воевода Василий Федорович Леонтьев слушал их допросных речей велел Киргизские волости башкирца Топыка Безыргенева допросить и Топыйко допрашиван, а в допросе он сказал ныне де тому двадцать девять лет Иланские волости башкирцу Деваю Байчурину с товарищи вотчиною своею землею он Тупейко с товарищи по речке Маты тоя же волости башкирцы с Сунбаем да с Исенем да с Исламбетом да с Шейметком поступился а не продал а нынешним челобитчикам Карабашку Тохтагулову до той поступной земли дела нет вступаютця они той землею напрасно. Топыйка к речам своим тамгу свою приложил «Н».

Тимәк, Дивай (Дәүәй) һөрөнтө ерҙәр һатып алмаған, ул ерҙәрҙе уға договорһыҙ ғына биргәндәр.

1700 йылды Дивайҙың улдары (Дөмәй, Арыҫлан, Азамат) Дөмәй ауылына нигеҙ һала. 1707 йылда әле был ауыл Дивай тип аталып йөрөтөлгән. Ә инде 1726 һәм 1734 йылдарҙа яҙылған документтарға уның исеме «Дюмеево» тип күрһәтелгән. Дөмәй ауылы (һуңынан Иҫке һәм Яңы Дөмәй) ул саҡтарҙа Ырымбур губернаһы Бәләбәй өйәҙе Ҡыр Йылан волосына кергән.

Дөмәй халҡы башлыса игенселек, малсылыҡ менән шөғөлләнә. Ир-егеттәре казак ҡатламында батшаға хеҙмәт иткәндәр. Ауылдың үҙенең йөҙ башлыҡтары, есаул-

дары, йорт старшиналары булған. Был хаҡта Башҡортостан дәүләт архивының 2 фондындағы 3234-се материал шаҡтай ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә. Ул документты тулыһынса килтерәбеҙ:

«Его Превосходителю Господину Управляющему Штабом Оренбургского Отдельного корпуса и Исправляющему должность Оренбургского Военного генерал-майору и кавалеру Иван Ивановичу (Минтрову).

Оренбургской губернии, Белебеевского уезда, ведомства 12-го Башкирского кантона, Иланской волости команды Старшины Нуруша Дюмеева, деревень Старой Дюмеевой башкирцев Абдулмуталлапа Юзекеева, Мухаметши Мустаева, Валиши Гангаурова и Новой Дюмеевой Тахаутдина Мукминева

## ПРОШЕНИЕ

Претерпевая разные степени от сказанного юртового старшины Нуруша Дюмеева и кантонного начальника Нагайбакова, чрез внеочередные наряды на службы казаков и излишне с нас поборы, особенно разные старшины угрозы (о чем из нас от Юзекеева были подаваны и явочные прошении) мы не можем более переносить таковых угнетений, а притом по устрашиваниям старшины Дюмеева спасаемся, чтоб и в самом деле не подпасть кому либо из нас под какое нещастие и по тому во избежание дальнейших претеснений и могущего иногда случиться с нами по устрашиваниям старшины нещастия, не находя других способов, к удалению от себя таковых неприятностей, решелись утруждать особу Вашего Превосходительства и всепокорнейше просить нас с родственниками нашими оной же деревни башкирцами: Исламгулом Ишмухаметовым, Кутлуахметом Махмутовым, Касфраном Юзюкаевым, Феткуллой Абдулмуталлиповым, Хисамутдином Мунасиповым, Хайбуллой Бакалгановым, Мухамадием Мустаевым, Бахтигареем Валишиным, Абдулнафиком Абдулнасыровым, Сиразетдином Идрисовым, Мухаметгалием Аскаровым, Хисамутдином Айдаровым, Мухаметьяром, Минлияром и Кильдияром Абдулзалиповыми, Файзуллой Гибадуллиным, Гибадуллой, Хабибуллой и Хасяном Апсалямовыми, Ахмедками Хасяновыми, Рахматуллой Хайбуллиным и деревни Новой Дюмеевой Саттаром Бакировым, со всеми нашими и их семействами по прописанным причинам перевести из 12-го в 10 башкирский кантон состоящий здешний же губернии в Бирском уезде и причислить в ко-

манду юртового старшины Акия Бикташева сына Гайсарова, жительствующего того же уезда в деревне Зюнне, которая от нашей отстоит не более как в 15 верстах, а в которой жительствующие башкирцы суть наши вотчинники, в одной волости с нами состоящие, которые на принятие нас в свою команду зная доброе наше поведение всеми согласны, в чем выдали нам приписное на татарском диалекте письмо засвидетельствованное изьяснением их старшиною, которое при сем осмеливаемся представить, 1831 год, декабря — дня (подписи»).

Тағын шуныһы ҡыҙыҡ: юғарыла бирелгән документҡа ҡул ҡуйыусы казактарҙың береһе — Бәхтигәрәй Вәлишин беҙҙең замандашыбыҙ һәм ауылдашыбыҙ, отставкалағы полковник Миҙхәт Мәүләүевич Ғилемхановтың (ә ул — М. Ғилемханов — оҙаҡ ваҡыт Өфө ҡалаһы Совет районының хәрби комиссары булып хеҙмәт итте) яҡын ғына бабаһы булып сыҡты. Был туғанлыҡ Иҫке Дөмәй башҡорттарының шәжәрәһен өйрәнгәндән һуң асыҡланды. Ул шәжәрә ун һигеҙенсе быуат аҙағында Ғәли исемле бабай тарафынан яҙыла башлаған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡиммәтле был тарихи ҡомартҡы беҙҙең дәүергә бик таушалып килеп еткән, ҡайһы бер исемдәрҙең күп кенә хәрефтәре юйылған.

Бөгөнгө көндә «беҙ — татарҙар» тип яҙылғанға инанып донъя көткән Дөмәй халҡына был шәжәрә туранан-тура әйтеп тора: «Һеҙ бит башҡорттар, ә татар тип яҙылғанһығыҙ бары тик манҡортлоҡ зәхмәте ҡағылғанға».

Эйе, дөмәйҙәр — башҡорт. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының ауылдары әле һаман Ҡазан йоғонтоһона бирешмәй килә — үҙенең һөйләү телен үҙгәртмәй. Быныһы ла киң билдәле факт. Үкенескә ҡаршы, ошо хәҡиҡәтте халыҡҡа аңлата алырлыҡ һәләтле тарихсылар һәм тел белгестәре генә республикабыҙҙа хәҙергә аҙыраҡ.

*1992*

## ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ — ЙӨРӘК ЯРАҺЫ

Әгәр ҙә беҙ Нефтекама, Борай, Краснокама, Туймазы башҡорттарын онотһаҡ, улар яҙмышына һырт ҡуйһаҡ, замана экстремистарына башҡорт илен бүлгеләүгә юл ҡуйһаҡ, Ҡараһаҡал, Аҡай, Батырша, Салауаттарыбыҙҙың түгелгән ҡаны харам китәсәк, рухыбыҙ һынасаҡ, әруахтарыбыҙ беҙҙе ташлаясаҡ. Әгәр Ауырғазы, Миәкә, Шаран, Асҡын, Ҡариҙел, Тәтешле,

Илеш башҡорттарын һанға һуҡмаһаҡ, үҙебеҙ ҙә ергә сүгербеҙ, бүленербеҙ, тарҡалырбыҙ, бөтөрбөҙ. Әгәр ҙә бөтә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары менән берләшмәһәк, уларҙы беҙҙән ҡайырып, өҙөп алһалар, яраланған батыр кеүек ҡанһырарбыҙ, көс-ҡеүәтебеҙҙе юғалтырбыҙ. Беҙ, башҡорттар, битарафлыҡтан һәм бисаралыҡтан арынһаҡ, башҡорт дәүләтселеген нығытырбыҙ.

Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш районының Туймазы ҡалаһынан педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре **Ғәлимйән Ҡунакбай улы Шәйәхмәтов** менән әңгәмә ошо хаҡта.

**— Бына һеҙ әле Башҡорт халыҡ үҙәге, Ҡонгресы һәм Фирҡәһе ойошторған Бөтә донъя башҡорт ҡоролтайы алды Пленумынан ҡайтып киләһегеҙ. Шунда тыуған уй-фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашһағыҙ ине?**

— Бер-бер артлы киткән ҡоролтайҙарҙа һүҙ бутҡаһы бешереүҙәре ялҡытты инде. Һөйләйҙәр, һөйләйҙәр — эш эшләнмәй, ойоштороу саралары юҡ һәм булмаҫтыр ҙа инде. Беҙҙең Туймазы районы мәктәптәрендә башҡорт теле өйрәнелмәй. Башҡортостан тарихы ла юҡ. Етәксе органдарҙа башҡорттарҙы таныусы ла, уларҙың хоҡуҡтарын яҡлаусы ла юҡ. Дәүләкәндә уҙған меңдәр ырыуы йыйынына ла барып сығыш яһағайным, бына шундай-шундай хәл, беҙҙе, башҡорт халҡын, башҡорт балаларын үҙ телендә уҡытырға төрлө кәртәләр булып ҡына тора, яңы сыҡҡан тарих китаптарын алып таратмайҙар, тигәйнем. Әле Өфөләге Пленумда Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышындағы бик күп урындарҙан вәкилдәр бөтөнләй булманы. Мин үҙем дә, һуңғы тапҡыр килеүем, тип һүҙ бирҙем. Беҙ бер кемгә лә кәрәкмәйбеҙ икән. Хөкүмәттә, йәмғиәттә беҙҙең проблемалар менән шөғөлләнергә теләүсе, уйлаусы юҡ.

...Өфөнән Президент һәм Рәсәй Дәүләт Думаһы менән Федерация Советына һайлауҙар алдынан ғына килделәр. Рәхимов та, Ҡопсов та, министрҙар ҙа килде, башҡалар ҙа. Ә хәҙер бер кем юҡ. Әйтерһең дә, беҙ донъяла юҡ. Ғәйәт ҙур район, ниндәй ҡеүәтле иҡтисади потенциал — күпме заводтар, машиналар төҙөү промышленносы, ни тиклем нефть ятҡылыҡтары. Миллиондан ашыу халыҡ — башҡорт халҡының туранан-тура вариҫтары, уларҙың өлкән быуыны үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләй, йәштәр тулыһынса ассимиляцияға бирелгән, тулы мәғәнәһендә этноцид бара! Шуны дәүләт күрмәй һәм күрергә лә теләмәй! Бына шунан был ҡоролтайҙарға килеп, йөрәгемде яндырып йөрөргә миңә инде хәҙер бик ҡаты ғына бер нисә «инсти-

тут» булды, өсөнсөһө кәрәкмәй, тим дә, бүтән килмәйем инде. Был ҡоролтайҙар беҙгә бер файҙа ла бирмәйәсәк.

**— Бына беҙҙең «Урал» үҙәге, Конгресс, Фирҡә бар. Шулар һеҙгә барып та күренмәйҙәрме ни?**

— Юҡ. Хатта, артистар, яҙыусылар ҙа бармай. Бөтөнләй оноттолар. Дөрөҫ, район китапханаһының 60 йыллығы булды — шунда Мостай Кәрим барҙы. Ләкин был хаҡта, ул ҡайтып, 10—15 көн үткәс кенә беленде. Осрашыуға барырға башҡа кешеләр ҙә теләр ине бит — мин бармаҫ инемме?! Юҡ, бер ниндәй реклама, иғлан булманы.

**— Үкенескә ҡаршы, матбуғатта, бигерәк тә «Йәшлек» гәзитендә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының фажиғәле яҙмышы тураһында һүҙ ҡуҙғатһаҡ, ниндәйҙер татар баҫмаһында берәй экстремист, татарҙарҙы башҡортлаштыралар, тип зыҡ ҡубып, ике халыҡты бер-береһенә ҡаршы ҡуйып өлгөрә. Шул арҡала төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының мәсьәләһе әлегәсә хәл ителмәй һәм үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе асыҡлауға ваҡыт күберәк сарыф ителә.**

— Оҙаҡламай төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыштағы башҡорттарҙы шуның арҡаһында бөтөнләй юғалтып бөтәсәкбеҙ. Туймазыны үҙ иле онотһа ла, Татарстандың йоғонтоһо бында бик көслө. Рафаэль Хәкимов Ғаяз Исхакиҙың «Иҙел — Урал» китабын сығарҙы. Дим йылғаһының башланған еренән алып, Ағиҙелгә ҡойған урынына тиклем һәм көнсығышҡа табан ярты Башҡортостанды бүлеп алыр өсөн «бөйөк Татарстан» картаһы күрһәтелгәйне унда. Был хаҡта Марат Ҡолшәрипов быйыл «Башҡортостан» гәзитендә яҙып сыҡты. Ләкин беҙҙең республикала быға ҡағылышлы бер ниндәй ҙә, бер төрлө лә сара күрелмәй. Ҡыҫҡаһы, башҡорт дәүләтселеген нығытыу өсөн бер нәмә лә эшләнмәй.

**— Төньяҡ-көнбайышта татарҙар ҙа күп, беҙ уларҙы башҡортлаштырырға ла, үҙебеҙгә ҡаршы ҡуйырға ла ынтылмайбыҙ, әлбиттә. Бары тик үҙ милли проблемабыҙҙы хәл итергә тырышабыҙ. Көнбайыш башҡорттарының төп фажиғәһе — уларҙың телен, диалектын танымауыбыҙҙа. Ғәлимйән Ҡунаҡбаевич, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, диалектта уҡытыу кәрәкме, әллә милләтте тергеҙеүҙең икенсе юлдары ла бармы? Диалект, тиһәк, ныҡ ҡаршылыҡ тора бит инде?**

— Бына беҙҙең үҙебеҙҙең башҡорт ғалимдарының да ҡаршы тороуы бигерәк насар. Улар үҙҙәре ҡаршы. Башҡорт теленең сафлығын һаҡлайбыҙ тип, диалектта уҡытмайынса, төньяҡ-көнбайышта башҡортлоҡто бөтөнләй юғалтабыҙ беҙ. Хәтеремдә, 1951 йылда Туймазы районы Ҡармалка тигән ауылдың 7 йыллыҡ мәктәбенә уҡытырға

барҙым. Хәҙер унда башланғыс мәктәп тә юҡ инде, ауыл үҙе бөтөп бара. Директор минең дәрескә кереп ултыра ла, һин бында татарса һөйлә, был татар мәктәбе, ти. Ул сағында бит инде тыңларға кәрәк — Сталин әле иҫән, тыңлашмай ҡара! Мин инде ныҡлап татар телен өйрәнергә тотондом. Ҡазанда институт та бөтөргәс, татар телен былай ҙа насар белмәйем инде. Шунан теге директор икенсе мәртәбә мине иҫкәртә, һин миңә Ҡазан диалектында дәрес алып барма, беҙ бында үҙебеҙҙең диалектта уҡытабыҙ, ти. Ул, Ғәләүев Вәли Ибраһим улы, әле лә иҫән, 90 йәштән өҫтә. Шулай диалектта уҡыттыҡ беҙ. Балалар татарса-башҡортса ҡатыштырып һөйләшеп йөрөнөләр, үҙҙәрен башҡорт тип иҫәпләнеләр. Һәм ошондай хәлде һәр бер ауыл буйынса күрергә була.

**— Шул йылдарҙан алып һеҙ Туймазыла бөтәһе 43 йыл! Башҡорттарҙың фажиғәһе күҙ алдығыҙҙа барған, тимәк...**

— Ниңә, шулай инде. Бына элекке башҡорт ауылдары, ҡайһыһын ғына алма, Ҡәкребаш — сатирик Тимер Арсландың тыуған ауылы, Илсембәт, Япрыҡ — мин Ыҡ буйындағы ауылдарҙы ғына алам, мең ырыуына кергәндәрен. Шунан Заһит, Ҡуяҙы, Ҡарат, Ҡаңны ырыуына кергәндәре — Ҡандра-Ҡотой, Төмәкәй, Ҡандракүл, Ҡандра-Әмин, Үрмәкәй, Төпкилде — Муса Сиражи ауылы, Арыҫланбәк (шунда әсәйем тыуған). Барыһы ла ҡаңнылар, меңлеләр — башҡорттар, үҙҙәре шуны гел белеп йәшәгән. Аҫабалар булғандар. Электән уларҙа башҡортса уҡытыу юҡ ине. Диалекттарын танымағас, башҡорт әҙәби теле ҡабул ителмәгәс, гел татарса уҡытҡандар. Хәҙер ҙә шулай. Йәштәр бөтәһе лә, татармын, тип йөрөйҙәр. Әнүәр Әсфәндиәровтың ауылдар тарихын уҡыһалар, юҡ, был дөрөҫ түгел, тиҙәр!

**— Ғүмер буйы татарса уҡып, ғүмер буйы Ҡазан идеологияһы аҫтында йәшәгәс, башҡорт булыуҙары еңел түгелдер...**

— Бына Олжас Сөләймәнов, Сыңғыҙ Айтматов, Иосиф Бродский, Борис Пастернак — ғүмере буйы бөтәһе лә русса яҙа, ә милләтен онотмай! Улар бит үҙҙәрен рус тип йөрөмәй! Ә беҙҙең интеллигенция?! Мин үҙем бер нисә телдә һөйләшә алам, тик башҡорт булыуҙан туҡтағаным юҡ. Ләкин, ни эшләйһең, бер тамсынан күл булмай. Әгәр хакимиәт, сәйәси һәм башҡа ижтимағи көстәр, хөкүмәт, Президент власы был йәһәттән бер ниндәй конкрет сара күрмәй икән, бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ.

**— Һеҙҙең районда фекерҙәштәрегеҙ бармы?**

— Бар, ләкин бик аҙ. Сөнки тауышы килеп сыҡһа, белһәләр, шунда уҡ эштән ҡыуалар, тегеләй итәләр — бы-

лай... Мине ҡыуа алмайҙар бит инде — пенсионермын. Бына бер заводтың цех начальнигын ғына алайыҡ, алама ғына кабинетта ултыра ул — ә өҫтәлендә Татарстан флагы тора! Аңлатаһың, һөйләйһең, тарихты күрһәтәһең, юҡ, унда алдап яҙғандар, башҡорт ғалимдары дөрөҫтө яҙмай, тиҙәр. Ибн-Фаҙлан, Юлиан, Рычков, Паллас, Руденко ла алдағанмы ни?! Башҡорттар фәлән ерҙә, фәлән йылға буйында йәшәгәндәр, тип яҙғандар бит. Даль Асылыкүл буйына килеп, башҡорт телен өйрәнеп, беҙгә «Заятүләк менә Һыуһылыу» эпосын ҡайтарып бирҙе. Тарихта бына ниндәй хәлдәр булған! Ә беҙҙе танырға теләмәйҙәр! Теләмәйҙәр! Башҡортто милләт, этнос булараҡ бөтөрөү, уның рухын юғалтыу бара...

**— Туймазы, Борай, Нефтекама башҡорттары бөтөнләй юғалтылманылармы икән?**

— Юҡ, булмаҫ, Ни өсөн беҙ бөтә урындарҙа, бөтә гәзиттәрҙә, бөтә баҫмаларҙа, бар ерҙә, башҡорттар бар, йәшәй һәм йәшәйәсәк, тип һөйләргә, иҫбатларға тейеш түгелбеҙ? Этнос, уның рухы элек-электән шунда йәшәгән. Һәм шул диалектта улар һөйләшәләр. Көнкүрештә һөйләшеү бит әлегәсә шул рәүештә һаҡланып ҡалған. Мәктәптә генә бит улар саф татарса һөйләшә. Ә өйҙә үҙ диалектында аралаша. Бына теләһә ҡайһы ауылға барығыҙ, ҡыҙыҡһынығыҙ, хәҙергә тиклем *ҫ, ҙ* ҡушып һөйләшәләр, «бармайым», «ҡайтмайым», «килмәйбеҙ» тиҙәр. Был нимә, башҡорт һөйләше, диалекты түгелме? Был уларҙың, башҡорттарҙың туранан-тура вариҫтары икәнлеген иҫбатламаймы ни? Меңәр йылдар улар шунда йәшәгән һәм шул телдә аралашҡан.

**— Туймазы ҡалаһының тышҡы йөҙө ниндәй? Кешеләрҙең кәйефе ниндәй, улар үҙҙәрен, исмаһам, Башҡортостан граждандары итеп тоямы? Башҡорт баҫмалары шулай бер ҙә күренмәйме ни?**

— Башҡорт китаптарын табыуы бында бик ҡыйын, бик аҙ улар. Киоскыларҙа ла, китапханаларҙа ла юҡ. «Башҡортостан» гәзите һатылмай, «Йәшлек»те мин бөтөнләй күргәнем юҡ. Ә «Өмет», «Ҡызыл таң» тулып ята. Теләһәң, ҡосағы менән ал. Татарстан гәзиттәре тулы. Башҡорт теле мәктәптә лә, балалар баҡсаһында ла юҡ. Башҡорттоң тарихы ла, рухы ла бында юҡ. Беҙҙе бына ниндәй хәлгә еткерҙеләр.

**— Иң үкенеслеһе, һеҙҙең мәҙәни, сәйәси хоҡуҡтарығыҙҙың шулай ҡырағайҙарса ҡыҫылыуы башҡорт дәүләтселегендә бара. Башҡорт илен икегә бүлеүгә, башҡорттоң үҙ илендә хоҡуҡтарын танымауға, башҡортто бөтөрөүгә юл ҡуйыла.**

— Беҙҙең, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының аяныслы хәлен үҙгәртергә теләмәүҙәре тағы ла үкенеслерәк. Ә беҙгә, үҙенең башҡорт икәнен әле һаман, туҡып-туҡып та онотмағандарға йәшәү көндән-көн ауыр, көндән-көн ҡурҡыныс. Экстремизм ныҡ көсәйҙе хәҙер.

*Зәйтүнә ХАНОВА әңгәмәләште.*
*1994*

*Шаһийән МИҢЛЕҒӘЛИЕВ*

## АПТЫРАЙЫМ МИН...

Бына өс йыл инде ауыл тарихтары менән ҡыҙыҡһынам. Әнүәр Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкирской ССР» тигән хеҙмәтенең IV китабына минең хеҙмәттәрем дә инеп китте. Хәҙер шуны әйтергә була, ниндәй районларҙа, ауылдарҙа ниндәй милләт кешеләре йәшәгәне архивтағы ревизия материалдарында асыҡ яҙылған. Асҡын районында ике ауыл ғына — Арбаш, Көсән мишәр тип яҙылған. Ҡалғандары бөтөнөһө лә башҡорттар һәм рустар. Шул уҡ элекке ата-бабаларҙың балалары хәҙерге көндә шул уҡ ауылда йәшәй бирәләр. Нисек ул, тел үҙгәрә тип, милләтте алыштырырға, ти. Шуны әйтергә кәрәк, бигерәк тә татарлашҡан ерҙәрҙә көсләп әҙәби башҡорт телен кертергә ашығырға ярамай — үҙ яҡтары диалектында һөйләшһендәр, уҡыһындар. Шуныһы үкенес, күп башҡорттар, татарса һөйләшәм тип, үҙҙәрен татар тип яҙҙыралар. Мәҫәлән, минең әниемдең паспортына «татар» тип яҙылған — бына ул ҡайҙан килеп сыға.

Шулай булғас, китаптарҙы төрлө телдә сығарырға кәрәк. Шулай уҡ «Ағиҙел» журналын да диалектта нәшер итеп була. Уҡыһындар әйҙә, юғиһә, гел татарса белем алғас, әҙәби башҡорт телен уҡымайҙар бит.

**Һеҙ, мәҙәниәт һәм матбуғат кешеләре, төньяҡта һирәк булаһығыҙ һәм беҙҙең сығыштарға ла иғтибар бирмәйһегеҙ. Ғалимдар ҙа күренмәй төньяҡ-көнбайышта. Эштәр ошолай дауам итһә, Бөтөн донъя башҡорт ҡоролтайына ситтән илдәрҙән дә килерҙәр, әммә беҙҙең яҡтарҙан булмаҫтар.**

Бигерәк тә радио, телевидение, матбуғат кешеләренә төньяҡ халыҡты йәлеп итеү эшен алып барырға кәрәк. Беҙҙең яҡтар бит нисек ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнағанды ла күрмәй йәшәй. Әхмәт Сөләймәнов менән Юлай Ғәйнетдинов ниндәй матур тапшырыуҙар күрһәтәләр, ә Юлай төнь-

яҡ-көнбайышта ла ҡурай уйнап, кешеләрҙе бейетеп ҡайтһа, нисек яҡшы булыр ине.

...Ҡыҙыҡ хәл, «Урал» үҙәгендә бына өс йыл инде тел ғалимы Сәриә Миржанованың «Северо-западный диалект башкирского языка» тигән махсус яҙылған, төплө тикшерелгән бик яҡшы китабы әлегә ҡәҙәр таратылмайынса, шунда тулып ята, бәлки, бер машина булыр. Мин, әлбиттә, үҙемдең аҡсаға алып, уны күп ауылдарға, мәктәптәргә тараттым. Ҡемдәр уҡыны, шулар, беҙ ысынлап та башҡорттар икән, был турала нисек дөрөҫ яҙылған, ул китаптарҙы тиҙ генә Асҡын, Ҡариҙел, Балтас, Илеш, Тәтешле һәм башҡа районадарға таратырға кәрәк, тинеләр. Юғиһә хәҙер Ҡазан ғалимдары беҙ һөйләшкән телде татар теленең урта диалекты тип иҫбатларға маташалар — бына нисек килеп сыға ул! Минең ғалимдарға, мәғариф хеҙмәткәрҙәренә әйткем килә: бынан, Өфөнән, тороп ҡына яҙып ятмағыҙ, һәр бер ауылда булығыҙ! Элекке урыҫ тарихсылары Рычков, Лепехин, Юхнов һәм башҡалар ат егелгән арбаға, санаға ултырып йөрөгәндәр, яҙғандар — шул хеҙмәттәрҙе хәҙер беҙ файҙаланабыҙ. Бына беҙҙең Башҡортостан Фәндәр академияһының гаражында йөҙләп машина ултыра, төрлө маркалы — теләгән ереңә бар. Белмәйем, беҙҙең академиктар нимә уйлайҙарҙыр, етмәһә беҙҙең алфавитты латинға күсерергә эш алып баралар. Тимәк, тағы ла бындағы халыҡты наҙан ҡалдырырға теләйҙәр. Америка, Төркиә, Татарстан артынан ҡыуыр алдынан, әҙ генә туҡтап, уйларға ла кәрәк, беҙҙең халыҡҡа әлеге көндә нимә кәрәк? Латин һәм ғәрәп алфавиттары ла кәрәк, танышырға, ғилми эш менән шөғөлләнеүселәргә. Төньяҡ-көнбайыш диалектты танымайынса, ярты Башҡортостанды, төньяҡ-көнбайышты, тотошлайы менән юғалттыҡ бит инде. Тағы нимә кәрәк икән беҙҙең мәшһүр ғалимдарыбыҙға?

Әллә башҡорт ғалимдары үҙҙәре лә ышанмаймы беҙҙең башҡортлоҡҡа?

Асҡын районы Башҡортостандың иң төньяҡ-көнбайыш ерҙәрендә урынлашҡан. Күршелә — Мәсетле, Дыуан, Ҡариҙел, Балтас, Тәтешле райондары һәм Пермь өлкәһе. Беҙҙең район 1935 йылдың 31 ғинуарында барлыҡҡа килгән — уға ҡәҙәр был ерҙәр Балтас, Ҡариҙелгә ҡараған. Асҡын Өфөнән 213 саҡрым алыҫлыҡта ята. 70 йыл Совет власы осоронда асфальт юл һалдылар, уныһына рәхмәт. Райондың оҙонлоғо 100 саҡрымдан арта, киңлеге 15—20 саҡрым, 1935 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса, районда барлығы 37 065 кеше иҫәпләнә, башҡорттар 16 508 (44,6%), татарҙар 5 094 (15,6%), рустар 14 442 (39%) һәм

башҡалар. 1981 йылғы иҫәпләмә буйынса, район халҡы кәмей (26 900), күп ауылдар бөтөрөлдө, күсеп китеүселәр күп. 1992 йылғы иҫәп буйынса, бөтөн халыҡ 23,5 мең кеше, башҡорттар 14 842 (39%). Күрәһегеҙ, беҙ Асҡында күпбеҙ. Бигерәк тә Төй, Сарс, Танып йылғалары буйҙарында төрлө ырыуҙарыбыҙ йәшәй. Телдәре башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты булһа ла. Үҙемдең тыуған ауылым Солтанбәк (Сарс) йәмле Сарс йылғаһы буйында ултырған. Сарс Пермь өлкәһенән башланып, үҙенең саф, йомшаҡ һыуҙарын Төй йылғаһына ҡушып, артабан, Муллаҡай ауылында Ҡариҙелгә илтеп ҡоя, 1735 йылғы ихтилалдан һуң халҡы яндырылып бөтөрөлгән Сөйәнтус ауылы ла ошонда. Батша хөкүмәте шымсыһы Тевкелевтың был яҡ башҡорттарын нисек ҡырып бөтөрөүе тураһында Сөйәнтус эргәһендә мемориаль таҡта ҡуйыу хаҡында ла нисәмә йыл һөйләйбеҙ — эш күренмәй.

Беҙҙең Сарс ауылында ҡалмаҡ, божор, хәлит — балыҡсы ырыуы башҡорттары йәшәй. Үҙем архивтан туғыҙ быуынымды эҙләп таптым, әтей яғынан да, әней яғынан да — улар бөтәһе лә ревизия материалдарында яҙылған. Үкенескә ҡаршы, бик әҙ кешеләр генә быныӊ менән ҡыҙыҡһына. Ауылдарҙа тарих буйынса музейҙар асырға ине. Ҡайҙа инде ул...

Мин, балыҡсы ырыуы башҡорто, 26 йыл Рәсәй армияһында, Украинала, офицер булып хеҙмәт иттем. Командирҙар ҙа, һалдаттар ҙа ихтирам менән ҡарайҙар ине. Бөгөнгө көндә үҙ дәүләтебеҙҙә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына ҡарата иғтибарһыҙ, ихтирамһыҙ мөнәсәбәткә аптырайым мин.

*1994*

*Нәфис ҒАРИПОВ*

## БАШҠОРТОСТАН — БӨЙӨҠ ИСЕМ

Ҡағыҙ сыҙай. Ҡалыны ла, йоҡаһы ла сыҙай. Эйе, уйлап торһаң — күңелдәр уйыла. Үҙгәртеп ҡороуҙың тәүге саҡырыуҙары ҡолаҡ төбөндә яңғырауға ла инде ете-һигеҙ йыл үтте. Ошо ваҡыт эсендә беҙҙең ҡолаҡтар күпме хаҡ һәм бинахаҡ һүҙҙәр ишетеп өлгөрҙө. Ысынбарлыҡҡа нигеҙләнгән күп яҡты факттар ҡара буяуға мансылып, ыҫландырылыуын, ғүмер ҡара төҫтә булған факттарҙың аҡ

һәм саф итеп күрһәтелеүҙәрен дә күрергә, ишетергә насип булды был йылдарҙа. Йә, хоҙай, үҙең кисер! Донъяла бөгөнгө тормош тәүгеһе лә, һуңғыһы ла түгелдер. Тик бөгөнгө бөләңгерт көн ҡараңғы сырайлы бер буталсыҡ дәүерҙе хәтерләтә. Демократия, демонтаж тигән һүҙҙәрҙе ишетеп ҡул сабабыҙ. Суверенитет һәм декларация, дума һәм федерациялар төҙөйбөҙ. Нимә бирҙеләр һуң улар кеше тигән йән эйәләренә? Шатлыҡлы матур тормошмо, бәрәкәтле өҫтәл һыйымы, ышаныслы ҡартлыҡмы, бәхетле бала саҡ, тәүфиҡлы йәшлекме? Юҡ, береһе лә юҡ! Ысын мәғәнәһендә демонтаж осоро тип әйтеү ғәйеп булмаҫ.

Дин ҡайта, мәсет, сиркәүҙәр төҙөйбөҙ, тип һөйөнәбеҙ. Хоҙай тәғәлә изге тынын өрөп, ерҙе байлыҡҡа күмер, рәхәт-бәхетле тормошҡа сығарыр, тибеҙ. Өмөтһөҙ — шайтан. Иншалла, милли традицияларыбыҙҙы яңыртыуға иғтибар бирә башланыҡ. Әммә был хәлдең ысынлығын раҫлаусы факттар етешмәй.

Ғәҙелһеҙ күренештәр башҡорт милли рухын һаман булһа ҡыҫып килә. Быға миҫал итеп Башҡортостандың 40-тан артыҡ районында район гәзиттәренең сит республика телендә — татарса сығып килеүен күрһәтеү ҙә етә. Донъяла башҡаса быға оҡшаш хәл бармы икән?!

Нефтекама ҡала радио селтәре аша башҡорт телендә алып барылған тапшырыуҙарға ҡарата мәкерле һүҙҙәр ырғыта ла башланылар. Радио аша башҡортса һөйләмә, телевизор аша башҡортса сығыштарҙы ҡарама! Башҡортостандан башҡа ҡайһы сит республикала бындай хоҡуҡһыҙлыҡ йәшәй икән?

Беҙҙең Нефтекама ҡалаһы йәш әле. Шулай ҙа бында 25 мең самаһы башҡорт йәшәүе тураһындағы мәғлүмәт ҡыуандыра. Хәҙерге ваҡытта ҡалалағы педагогия училищеһында, гимназияла, лицейҙа, алтынсы һәм ун беренсе мәктәптәрҙә башҡорт кластары ҡулай ғына эшләп алып китте. Республика тарихы, мәҙәниәте ҡомартҡылары ла өйрәнелә башланы.

Ҡалала башҡорттар һаны артыуға бара. Йәштәрҙең Ғафури, Салауат, Мәсетле, Дыуан, Аҫҡын, Белорет, Салауат райондарынан бында юл тотоуҙары һиҙемле күренеш. Уларҙың балаларын уҡытыу өсөн айырым башҡорт мәктәбе булдырыу сараһын да бөгөндән хәстәрләргә кәрәк.

Шуларҙы уйлағанда, нисек инде башҡорт милләте кешеләрен үҙ тыуған телендә урындағы тапшырыуҙан, үҙ телендә телевизор күрһәтеүҙән тыйып була, ти? Ундай фекерҙе бер кем дә яҡламаҫ.

Республикабыҙ Башҡортостан — бөйөк исем. Унда тыуған еребеҙ, эсер һыуыбыҙ, киләсәгебеҙ, уҙғандарыбыҙ — бөтәһе бергә төйнәлгән. Был берҙәмлектә көс, уны һаҡлап ҡалыу изгеләрҙән-изге бурыс.

*1994*

## ТАНЫП БАШҠОРТО

«Башҡортостандың аҙ билдәле илдәре» повесть-эссеһын, «Узник далекого острога» тигән документаль повесть, 7—8 быуынға меңдән артыҡ шәжәрә төҙөгән кеше кем ул?

...Рауил Исламшин, Тәтешле районының Аҡсәйет урта мәктәбен тамамлағандан һуң, Дыуан ауыл хужалығы техникумының агрономия бүлеген бөтөргән. Төрлө район гәзиттәрендә журналист булып эшләгән. 1977 йылда Ҡазан дәүләт университетының журналистика бүлегендә уҡып сыға. Диплом эшенең темаһы — «Салауат Юлаевтың яҙмышы». Һуңғы йылдарҙа журналистиканан ситләшеп, профессиональ тарихсы булып киткән. Оҙаҡ йылдар буйы фән менән шөғөлләнеүсе кеше. Бер ҡайҙан да, бер ниндәй хөкүмәт ярҙамы ала алмайынса, фатир, дөйөм ятаҡ таппай, вокзалдарҙа ҡунып йәшәп, шулай китапханаларҙа эшләп, архивтарҙа ҡаҙынып, ауылдарҙа, йыраҡ өлкәләрҙә экспедицияларҙа тарихи эҙләнеү эштәре алып бара. Новосибирск өлкәһендә, Алтайҙа, Төмән, Ҡурған, Силәбе, Свердловск, Пермь өлкәләрендә, Башҡортостан һәм Мәскәү архивтарында ныҡышмалы һәм эҙмә-эҙлекле ғилми тикшеренеү эштәре алып бара. Ә хөкүмәт, дәүләт, фәнни ойошмалар уға бер тин дә ярҙам күрһәтмәй! Һорап та — бирмәйҙәр! Сөнки әҙәби башҡорт телен генә танып, тәбиғи диалекттарҙы инҡар итеүсе маңҡорт башҡорттар Исламшинды татар тип ситкә типһә, татарҙар уны, башҡорттарға һатылған, провокатор, тип битәрләй. Боронғо башҡорт халҡы компоненттарының береһе булған танып башҡорто бына шулай ғүмере буйы ике ут араһында яныуға дусар ителгән. Тик ни тиклем генә уны ике яҡтан да кәмһетергә, юҡҡа сығарырға тырышмаһындар, тарихи ысынбарлыҡҡа, хәҡиҡәткә хыянат итергә мәжбүр итә алмағандар!

Йондоҙнамә буйынса ул Арыҫлан айының ҡап уртаһында тыуған. Рауил — Ҡояш улы! Ә Ҡояш балаһы бер ниндәй инструкцияларға буйһонмай, уны бер

ниндәй редакцияла, бер ниндәй кабинетта, бер ниндәй ҡыйыҡ аҫтында ла бикләп тороп булмай, күрәһең. Рауил Ҡояш эҙенән атлай. Боронғо Эске һәм Тышҡы Башҡорт илдәрен арҡырыға-буйға гиҙгән кеше ул Исламшин.

**— Рауил, һеҙ оҙаҡ йылдар Салауат образы өҫтөндә эшләйһегеҙ, «Узник далекого острога» исемле документаль повесығыҙҙы Пермь өлкәһе гәзитендә тотош баҫтырҙығыҙ. «Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре» повесть-эссеғыҙ «Йәшлек» гәзитендә тулыһынса баҫылды тиерлек. Уларҙы китап итеп сығарыуға ҡамасаулаусылар күп булһа ла, һеҙҙең оҙаҡ йылдар йөрөп, ентекләп йыйған тарихи асыштарығыҙҙы урлауға ныҡлы кәртә шулай ҙа булдырылды. Беҙ бының өсөн бик шатбыҙ.**

— Минең ғилми асыштарым менән ҡыҙыҡһыныусылар күп булды. Китап итеп сығарабыҙ, тип, ҡулъяҙмаларымды алып китеп, ҡулдан-ҡулға йөрөтөп, таушалып, туҙып бөткәс кенә килтереп бирәләр. Тимәк, ентекләп уҡыйҙар. Кемдәргә, ниндәй тарихсыларға күрһәтеп йөрөйҙәрҙер — билдәһеҙ... Салауат образына килгәндә, минән йыш ҡына, ни өсөн Салауат тураһында йөҙ битлек кенә документаль повесть яҙҙығыҙ, ниңә, уны күберәк яҙып булмаймы, тип һорайҙар. Юҡ, булмай, сөнки уның хаҡында күп белмәйбеҙ. Күп яҙып, уйҙырмалар тыуҙырып, беҙ Салауат образын күтәрә алмайбыҙ. Тарих, иртәме-һуңмы, булмағанды инҡар итәсәк. Бына хәҙер Степан Злобин романындағы төп геройҙарҙың береһе Бохайырҙың бөтөнләй булмауы, хатта Бохайырҙың прототибы ла ул дәүерҙә отряд төҙөп яу сапмауы асыҡланды. Романда тарихи дөрөҫлөк боҙола. Салауаттың өс ҡатыны булған — беҙ бер генә ҡатын тип иҫәпләйбеҙ бит инде. Салауаттың тыуған йылын асыҡлау буйынса ла хәҙерге көндә ике версия бар. Берәүҙәр, 1754 йылда тыуған, тиһәләр, икенселәре 1752 йылды атай. Минең уйымса, был версияларҙың икеһе лә хәҡиҡәткә тура килмәй. Минең иҫәпләүемсә, Салауат Юлаевтың тыуған йылы — 1751. Ә был датаны нисек итеп асыҡлауым — үҙе бер тема, был хаҡта айырым мәҡәлә яҙырға кәрәк.

**— 1992 йылдың ноябрь-декабрь айҙарында «Йәшлек» гәзитендә баҫылған «Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре» тигән повесть-эссеғыҙҙа, боронғо Себер иле Башҡорт дәүләте булған, тип яҙҙығыҙ. Был фән өсөн бик етди һүҙ.**

— «Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре» әҫәрен 10 йыл яҙҙым. Сағыштырмаса бәләкәй күләмле был фәнни хеҙмәтте яҙыр өсөн миңә тиҫтәгә яҡын алыҫ экспедицияларға юлланырға тура килде. Себер, Урал киңлектәре буйлап әллә күпме сәйәхәттәр ҡылдым. Мин Себер дәүләтен Тышҡы

Башҡорт иле — Өбәйәс Себер иле тип һанайым. Бөгөнгө көндә фәндә Себер дәүләтен тарҡалған Алтын Урҙаның бер кисәге итеп күҙаллайҙар. Был фекер тамырынан дөрөҫ түгел. Себер иле — бик боронғо дәүләт. Монголдар бында яу менән килгәнгә ҡәҙәр Себер дәүләте булған, йәшәгән. Һәм Себер дәүләтен улар бөтөрмәй, үҙенә буйһондора ғына, хакимлыҡ итергә үҙ кешеһен һәм Себер даруғаһын ҡуя.

**— Фән шул тиклем артта ҡалған, бөгөнгө көндә Себер дәүләте, йәғни Тышҡы Башҡорт иле территорияһын күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.**

— Яҡынса әйткәндә, Башҡортостандың көнсығыш өлөшө, төньяғының бер өлөшө, Свердловск өлкәһенең көньяғы, Пермь өлкәһенең көньяҡ-көнсығышы, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре тулыһынса, Төмән өлкәһенең иң көньяғы, Көксәтау, Ҡустанай яҡтарының төньяғы, Омск яҡтары — аҡ табындар, ҡара табындар һәм башҡа ырыуҙар ерҙәре. Әйлеләрҙең дә төп ерҙәре шул яҡта. «Хоҙай беҙҙе яратҡан, илдән илгә таратҡан», — тип юҡҡа ғына һөйләмәйҙәр улар беҙҙә. Улар әле лә Әй буйында ла, Ҡурған, Силәбе өлкәләрендә лә йәшәйҙәр — әйлеләрҙең яҙмышы шундай.

Тағы шуны әйтеп үтергә тейешмен, «Башҡорттарҙың аҙ билдәле илдәре»нә оҡшаш әҫәрҙе Зәки Вәлиди — әгәр йәштән иленән китергә мәжбүр булмаһа — 1930 йылдарҙа уҡ яҙған булыр ине. Сөнки ул йыраҡ тарихи хәҡиҡәтебеҙгә бик яҡын килгән, хатта Себер иленең Башҡорт дәүләте икәнен әйтеп тә ҡуйған. 1993 йылдың башында «Ағиҙел» журналында Зәки Вәлиди әҫәре тәү тапҡыр баҫылып сыҡҡас, ошо хаҡта уҡып, хайран ҡалдым. Зәки Вәлидигә эшләргә, Себер һәм Урал киңлектәрен ныҡлап тикшерергә мөмкинлек кенә булмаған. Юғиһә, Башҡортостан тарихы буйынса ғәйәт тәрән, бик көслө әҫәрҙәр яҙыр, Себер дәүләтен ныҡлап өйрәнер ине.

**— Мин фәндән алыҫ кешемен, әммә, бөгөнгө ысынбарлыҡты күҙаллағанда, һеҙҙең башҡорт халҡы тарихына ҡағылышлы хеҙмәттәрегеҙҙе ғалимдарыбыҙ Раил Ҡузеев, Әнүәр Әсфәндиәров, Ирек Аҡманов, Нәжибә Мәҡсүтоваларҙың фәнни ҡеүәһенә тигеҙләр инем.**

— Нәжибә Мәҡсүтованың Башҡортостан тарихына ҡағылышлы ифрат көслө әйбере бар. «Йософ Ҡиссаһы» башҡорт кешеһе тарафынан боронғо башҡорт телендә яҙып ҡалдырылыуын ышаныслы итеп дәлилләп иҫбат иткән. Был беҙҙең иң көслө фәнни хеҙмәттәрҙең береһе һанала.

Әнүәр Әсфәндиәров башҡорт ауылдары тарихы буйынса фундаменталь хеҙмәт сығарып ята. Дүрт томы сыҡты бит инде. Уларҙы Өфө тирәһендә генә түгел, ә китапта нин-

дәй районлар тарихы яҙылһа, күпселеген шул яҡтарҙа таратырға ине. Беҙҙең студенттар, бөтөн йәмәғәтселек шул хеҙмәттәрҙе йорт һайын инеп таратырға тейештәр. Һәм улар беҙҙең гел өҫтәлгә ятҡан, уҡып өйрәнә торған изге китаптарыбыҙҙың береһенә әйләнһен ине. Халыҡ үҙенең тарихын белергә тейеш. Сөнки беҙҙең төньяҡтағы халыҡтар тарихын пропагандалау бер яҡлы ғына, тенденциоз рәүештә бара. Төньяҡ һәм көнбайыш ырыуҙарының тарихын күрһәтмәҫкә тырышып, ҡара көстәр әллә күпме тырышлыҡ һала. Был эш ситтән тороп та эшләнә — Ҡазан быға аҡса йәлләмәй, Өфө быны күрмәмешкә һалыша. Хатта беҙҙең Тәтешлелә район музейы юҡ. Ойошторолор ине, музейҙағы бөтә тарихи материалдар был районның төп халҡының — танып, ирәкте, гәрә ырыуы башҡорттарының — тарихын дөрөҫ итеп һөйләп бирәсәк...

Тағы ла ғалимдарға әйләнеп килһәк, башҡорт халҡының этногенезы, тарихы буйынса Раил Кузеев ғәйәт ҙур хеҙмәт эшләгән. Әммә унда фундаменталь хата киткән. Ул, башҡорт милләте яҡынса IX—X—XI быуаттарҙа ғына барлыҡҡа килә башлай, тип яҙа. Ә башҡорт милләте уға ҡәҙәр булған, бик боронғо замандарҙан килә ул. Яҙыусы Йыһат Солтанов та бик бәхәсле романдар яҙа. Ә бит башҡорт тарихын яҙыр өсөн филолог ҡына түгел, иң тәүҙә бик көслө тарихсы ла, көслө географ та булырға кәрәк! Сөнки Башҡортостан шундай ҙур территорияла барлыҡҡа килә. Боронғо башҡорттар Өбәйҙән (Обь) башлап Өбө йылғаһына (йәғни Волгаға) ҡәҙәр йәшәгән. Эйе, Волга йылғаһын да мин Өбө тип һанайым. Ике Өбө йылғаһы араһындағы гигант территорияла башҡорт халҡы барлыҡҡа килгән, формалашҡан.

**— Хәтеремдә, Пермь өлкәһендә конференцияла һеҙ ғалимдарҙан беренсе кеше булып Ыйыҡ тауҙары тураһында сығыш яһанығыҙ.**

— Эйе, мин хәҙер Уралда Ыйыҡ тауҙар системаһын астым. Был хаҡта, ғөмүмән, бер ниндәй хеҙмәт тә юҡ ине. Уралда һәм Ҡама ерендә 20-нән артыҡ Ыйыҡ тау таптым һәм тикшерҙем. Ул тауҙарҙың символикаһы беҙҙе урта быуаттарҙың тәүге өлөшөнә үк алып бара икәнлеген асыҡланым.

**— Рауил, һеҙҙең тағы бер хеҙмәтегеҙ бар — ул да булһа, Владимир Жириновский менән аҙашыуығыҙ Рауил Фәхретдиновҡа ҡағылышлы.**

— ЛДПР лидеры, киләсәктә татар һәм башҡорт халҡын Монголияға — үҙҙәренең элекке ерҙәренә — ҡыуып ҡайтарам, тип белдерҙе. Жириновский кеүектәрҙең бындай фекерҙәрен Ҡазан ғалимы, тарих фәндәре докторы

Рауил Фәхретдинов алдан һиҙемләгән, күрәһең, Жириновский асыҡтан-асыҡ әйткәнде урыҫ тарихсылары күптән аҫтыртын эшләп ята.

Фәхретдинов иһә, монгол татарҙары — беҙҙең бабаларыбыҙ һәм улар, йәғни татарҙар, XIII быуатта Монголиянан Урал — Иҙел яҡтарына яу менән килеп, Алтын Урҙа дәүләтен төҙөгән, тип ике йыл элек әллә күпме гәзиттәрҙә мәҡәләләр урынлаштырҙы. Күренеүенсә, Фәхретдиновтың был концепцияһы Мәскәүҙәге ялған тарихсылар өсөн бик ҡулайлы.

Ә бит урта быуаттарҙан бөгөнгө көнгә килеп еткән бер нисә яҙма сығанаҡтан яҡшы мәғлүм: XIII быуаттың башында Сыңғыҙ хан 70 мең көймәле (кибитка) бер этносты — татарҙарҙы — тулыһынса тиерлек ҡыра. Татарҙарҙан бер мең тирәһе генә кеше иҫән ҡала. Ә уларҙың иҫән ҡалыуы Сыңғыҙ хан ҡатындарының бер нисәһе татар булыуы менән генә аңлатыла — татар ҡатындарының ырыу-аймаҡтарын Сыңғыҙ хан үлемгә дусар итмәй. Сыңғыҙ хан ғәскәренең төп өлөшөн монголдар тәшкил иткән. Әйткәндәй, шул замандағы татарҙар ҙа монгол телендә һөйләшкән халыҡ булған. Быны иҫбат иткән тиҫтәгә яҡын дәлилем бар. Ҡыҫҡаһы, XIII быуатта хәҙерге Монголия территорияһындағы йәшәгән татарҙар айырым этнос булараҡ юҡҡа сыға, иҫән ҡалғандары аҡрынлап башҡа халыҡтарға ассимиляцияға эләгә. Бына шундай фажиғә булған ул этнос менән. Ә инде бөгөн үҙҙәрен татар тип иҫәпләп йөрөгән ҙур этностың этник тамырҙарын XIII быуатта юҡҡа сыҡҡан татар халҡына туранан-тура бәйләү — үтә ҙур мәғәнәһеҙлек ул.

**— Һеҙ бөгөн ниндәй тема өҫтөндә эшләйһегеҙ?**

— Вокзалдарҙа ҡунып йәшәү ҡыйынлыҡтарына, аслыҡҡа әүәлгесә бирешмәйенсә, башҡорт халҡының боронғо тарихы буйынса фәнни тикшеренеүҙәремде дауам итәм. Алыҫ быуаттар төпкөлөнән оҙаҡ йылдар буйына эҙләп тапҡан «өбөйәс» этнонимым «башҡорт» һүҙен барлыҡҡа килтереүгә нигеҙ булғанын тулыһынса иҫбат итер өсөн минең бөгөн әллә күпме өҫтәлмә дәлилдәрем бар. Тарихсы-ғалимдарға был асышты рәсми танырға ғына ҡалды, тип уйлайым. Һәм ышанам: өбөйәс мөхитендә бик электән үк донъя көткән өбөйәс-һундарҙың беҙгә бөгөн печенегтар, йәғни бөжәнәктәр (бәшнәктәр) тип кенә билдәле булғанын тулыһынса раҫлар өсөн дә миңә иртәгәһе көнөм, киләсәк яҙмышым, һис шикһеҙ, мәрхәмәтле булыр. Тағы шуныһын да әйтеп үтеү мотлаҡ: өбөйәс-һундар тураһында гипотеза төҙөгәндә мин Йәнәсәй еренең руник яҙмалары буйынса үҙем эшләгән яңы дешифровкаларыма ла нык

таяндым. Эйе, Ҡөнсығыш Себерҙә табылған руник ҡомартҡылар миңә печенегтарҙың тарихи географияһын Йәнәсәй ере менән дә бәйләргә кәрәклеген күрһәтте.

**— Ул дешифровкаларығыҙға ҡарата бер нисә йыл элек «Истоки», «Советская Башкирия», гәзиттәрендә күләме яғынан ҙур булмаған фәнни хеҙмәтегеҙ донъя күргәйне. Ҡыҙыҡ, беҙҙең мәшһүр тюркологтарыбыҙ һеҙҙең ул хеҙмәтегеҙгә ниндәй баһа бирҙеләр икән? Ә бит һеҙҙең дешифровкаларға ҡарата, белеүемсә, әле һаман бер генә ғалим да матбуғат аша үҙ мөнәсәбәтен белдермәне, үҙенең фекерен әйтмәне. Был нимә — беҙгә хас һүлпәнлекме, әллә башҡа берәй хәлме?**

— Уныһы шулай, матбуғатта был хаҡта бер нәмә лә күренмәне. Әйтерһең дә улар, фән әһелдәре, минең яңы дешифровкаларымды күрмәнеләр ҙә, уҡыманылар ҙа. Быныһы ла бик аяныс хәл. Ә бит минең дешифровкалар фантазия түгел — төплө нигеҙгә ҡоролған. Иҫбатлауымса, быға тиклем Йәнәсәй руник яҙмаларының бөтәһе өс хәрефе дөрөҫ уҡылмаған. Ә ул хәрефтәрҙең икеһе руник яҙмаларҙың һәр юлы һайын тиерлек осрай. Боронғо Йәнәсәй руник яҙмаларына электән яһалған дешифровкаларға ҡарата тюркология, тарих буйынса бик күп фәнни хеҙмәттәр яҙылған. Ашыҡҡандар. Ләкин ул хаталарҙы төҙәтергә әле һуң түгел. Ә төҙәтер өсөн иң мөһим тәүшарт шул: рәсми фән минең дешифровкаларымды ҡабул итергә, уларҙың фәнни асыш икәнен рәсми рәүештә танырға тейеш.

*Зәйтүнә ХАНОВА әңгәмәләште.*

*1994*

*Зәйтүнә ХАНОВА, журналист*

## БАШҠОРТ ҠАНЛЫ БАРҘЫ ТАТАРЫ БЕҘ, ТАТАР ЙӘНЛЕ ГӘЙНӘ БАШҠОРТО

Пермь өлкәһенең Барҙы ауылында «Ҡама буйы татарҙары һәм башҡорттары: тарих, милли яңырыу проблемалары һәм перспективалары» темаһына фәнни-практик конференция уҙғарылғайны. Уны Пермь өлкәһе һәм Барҙы районы хакимиәте, Бөтә донъя татар конгресы башҡарма комитеты, Пермь өлкәһенең татар-башҡорт иҗтимағи үҙәге ойошторҙо. Ғилми конференцияға Башҡортостан хөкүмәте делегацияһы ла саҡырылды. Делегация составына

Башҡортостан Республикаһы Юғары Советы һәм Министрҙар Советы вәкилдәре, тарихсы ғалимдар, тел белгестәре, археолог, антрополог, журналист-тикшеренеүселәр инде.

## Страустар һәм ысынбарлыҡ

...Барҙының мәҙәниәт йортонда конференция делегаттарын теркәгән мәлдә үк шуға иғтибар иттем: программала төптө айырым, үҙ аллы ике милләт ни өсөндөр гел һыҙыҡса аша яҙылған: «...татар-башҡорттарҙың тарихы», «...татар-башҡорттарҙың демографик проблемалары», «...татар-башҡорттарының килеп сығышы» һ. б. Ә бына программа менән бергә таратылған Ғаяз Исхаҡиҙың «Иҙел — Урал» китабында иһә башҡорттар һыҙыҡса аша ла яҙылмаған — төрки татарҙары тарафынан бөтөнләй йотолған, ә башҡорттарҙың иле Иҙел — Урал эсендә юҡҡа сыҡҡан, баш ҡалаһы Өфө төрки татарҙарының милли үҙәгенә әйләнгән. Ҡыҫҡаһы, башҡорттар тигән халыҡ исеме менән бергә донъя йөҙөнән «юҡ ителгәйне». Бына шундай китаптар һәм бына шундай идеология эгидаһы аҫтында конференция башланып китте.

Делегаттарға тәүҙә Барҙы районы тураһында ҙур булмаған кинофильм күрһәтелде. Һәм шуныһы күҙгә ташланды, бер нисә кадрҙа Барҙы районында татарҙар йәшәй һәм халыҡтың 90 процентын тәшкил итә тигән ялған информация бирелде.

Бында сығыш яһаусы Ҡазан ғалимдары ла тик Пермь татарҙары тураһында ғына һүҙ алып барырға, «башҡорт» һүҙен яңылыш та ысҡындырмаҫҡа тырышты. Хатта беҙ айырыуса ныҡ ихтирам иткән тарих фәндәре докторы, Ҡазан дәүләт университетының профессоры И. Р. Таһиров та күберәк сәйәсәткә һуғылды. Иҙел — Урал конфедерацияһы идеяһын маҡтаны. Шундай юғары абруйлы ғалимға тарихи ысынбарлыҡҡа тура бағырға Бөтә донъя татар конгресының башҡарма комитеты рәйесе булып эшләүе лә ҡамасаулағандыр инде.

Ысын ғалим булһаң, сәйәсмән булыуҙан туҡтайһың, ә сәйәсмән икәнһең — ғалим түгелһең, тигән хаҡиҡәткә яңынан инандырҙы был.

— Бөтә донъя татар конгресы башҡорт халҡының мөстәҡиллеген таный, — тине профессор.

Һәм беҙгә ошоноһо ла бик ҡәҙерле!

Икенсе бер Ҡазан ғалимы этнограф Д. М. Исхаҡов гәйнә ырыуының башҡорт булыуын инҡар итте.

— Татар һәм башҡорт этностарын айырыу тураһында һүҙ алып барыуҙың кәрәге юҡ һәм был мөмкин дә түгел, — тип шаҡ ҡатырғыс «асыш» яһаны ул.

Беҙҙең фольклорсыларыбыҙ, тарихсы һәм тикшеренеүселәребеҙҙең Пермь башҡорттарының йыр-моңдары, ғөрөф-ғәҙәттәре, мәжүсилеге саф башҡортса булыуы тураһында әллә күпме дәлилдәрен, материалдарын ошолайтып бер-ике һүҙ менән генә сыйып ташламаҡсы булды.

— Пермь өлкәһендә йәшәүсе төрки телле халыҡтарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре, мәҙәниәте Волга — Урал татарҙарыныҡына яҡын һәм Ҡазан татарҙары мәҙәниәтенең бер өлөшөн тәшкил итә, — тине ул, ләкин дәлилгә бер генә миҫал да килтермәне.

Пермь төркиҙәренең бер урында — татарҙар, икенсе ерҙә — башҡорттар, тип аталыуын Исхаҡов, Волга — Урал регионы рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, Уралда йәшәүсе аҫаба ер хужалары «башҡорттар» исемен алғандар, рус хакимиәтәнең теләге шундай булған, тип аңлатты.

Бына һеҙгә Иҙел — Урал конфедерацияһы, ассоциацияһы! Уралтау менән донъяға килгән, бөтә булмышы, тарихы шуға нигеҙләнгән, халыҡ йырҙарында, риүәйәттәрҙә, легендаларҙа ғына түгел, археологик ҡаҙылмаларҙа, топонимикала ярылып ятҡан башҡорт аҫабалығын бер ниндәй нигеҙһеҙ раҫлауҙар менән юҡҡа сығарырға тырышыу өсөн киң аҡыл кәрәкмәйҙер ул. Йә, әйтегеҙ әле, тағы ниндәй халыҡ Уралға шул тиклем дан йырлаған, Уралтауҙы бөйөкләгән, мәңгеләштергән?! Әллә инде Исхаҡов әфәндегә лә элек Ҡазандағы татар ижтимағи үҙәгенең сәйәси бүлек мөдире булып эшләүе хәҡиҡәткә генә тоғро ҡалыр ғалим булырға ҡамасаулаймы?

Ә бына шул уҡ Ҡазандан килгән ғалим-филолог Д. Б. Рамазанова гәйнә ырыуы башҡорттарының диалектын инҡар итте, татар теленең диалекты, тип атаны.

— Башҡорт теленең төп компоненттары — *h, ҫ* хәрефтәре — юҡ гәйнәләрҙә! — тип төп дәлилен килтереп ҡуйҙы ул.

Диалектты рәсмиләштереүгә ҡаршы булған ғалимдарыбыҙға бик шәп һабаҡ булды инде был. Иҫ киткес сикләнгәнлегебеҙ, *h* һәм *ҫ* хәрефтәренә генә табынып, башҡорттоң иң боронғо компоненттарының береһе булған *с* хәрефен танымаҫҡа тырышыу, «татарҙыҡы» тип ситкә тибәреү бына нимәгә килтерҙе! Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышынан ғына түгел, хатта сит өлкәләрҙәге аҫаба ырыуҙарыбыҙҙан да икенсе милләт файҙаһына ҡолаҡ ҡағабыҙ түгелме? Башҡорт халҡының бөтә диалекттарын берләштереү — башҡорт халҡын донъя

кимәлендә берләштереү икәнен ҡасан аңларбыҙ икән?

Диалектҡа ҡаршы булған татар ғалимдарын һәм ҡайһы бер башҡорт ғалимдарын бер нәмә күрмәгәнгә һалышып, башын ҡомға тыҡҡан страустарға оҡшатам. Бер күтәрелеп ҡараһағыҙсы, үҙ халҡын танымаған һәм танырға теләмәгән маңҡорттар миллиондарҙы тәшкил итә бит хәҙер!

**Барҙылағы балалар китапханасыһы Тәлиғә Ғәрифулла ҡыҙы Илкәева:**

— Эх, кисә «үлтерҙегеҙ» бит ә!.. «Ҡаруанһарай» йөрәкһендерҙе, хистәрҙе дауыл итеп өйрөлттө. Ә Розалия Солтанғәрәеваның ҡобайыр әйтеүе — үҙе бер мөғжизә! Ошоларҙы күргәс, татар араһында ла, башҡорт араһында ла бер ниндәй бәхәс кәрәкмәй, тип уйланым. Кисә ишеткән-күргәндәрҙән һуң әле уйлап ултырам: мин дә яртылаш башҡорт бит әле! Әтей гелән, беҙ Салауат тоҡомонанбыҙ, ти.

**Барҙы районының «Таң» гәзите редакторы Ғимран Зарип улы Кәримов:**

— Өфө ғалимдарының конференциялағы сығыштары бик әйбәт булды — йәм өҫтәне. «Ҡаруанһарай» егеттәре иҫте алды. Бөтә халыҡ шул турала һөйләй. Көтөлмәгән нәмә булды был. Бындай аралашыу юҡ ине бит. Башҡортостан менән рухи бәйләнеш юҡ! 30 йылдан артыҡ эшләйем ошонда, тере башҡортто күреп, өҫтәл артында һөйләшеп ултырғаным юҡ ине. Әле рәхәтләнеп тыңланым уларҙың фекерҙәрен, йөрәккә рәхәт булды.

## «Халыҡты тарихынан айырырға ярамай, юғиһә был иң фажиғәле хаталарҙың береһе буласаҡ!»

Шулай тине профессорыбыҙ Н. А. Мәжитов.

— Һуңғы ваҡытта Татарстандағы коллегаларҙың Барҙы башҡорттарын татар халҡы тип яҙыуҙары йышайҙы. Һәм Барҙы башҡорттарының тарихына, мәҙәниәтенә арналған эштәрҙә, рус һәм татар халыҡтарының көслө йоғонтоһона ҡарамаҫтан, халыҡтың инаныуы, этник үҙаңы, ғөрөф-ғәҙәттәре буйынса башҡорттар булыуы хаҡында бер тапҡыр ҙа әйтелмәй. Ошо темаға арналған фәнни хеҙмәттәрҙә «башҡорт мәҙәниәте», «башҡорт теле» терминдары ҡулланылмай. Белмәйем, ул ниндәй маҡсаттан эшләнәләр, әммә мин һәм коллегаларым быны фәндәге фальсификация тип иҫәпләй. Ә бит шул уҡ ваҡытта Барҙы башҡорттары фән даирәләрендә бәхәс тыуҙырмай — был бик яҡшы тикшерелгән мәсьәлә, шул иҫәптән халыҡ-ара фән өлкәһендә лә. Рус ғалимдарынан А. Н. Поповтың, таныл-

ған тарихсы, археолог С. И. Руденконың гәйнә башҡорттарына ҡағылышлы фәнни хеҙмәттәре тәрән нигеҙле, дәлилле. Бынан тыш, Барҙы башҡорттары билдәле башҡорт тарихсыһы, этнограф, академик Р. Г. Ҡузеевтың «Башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе» хеҙмәтендә лә яҡшы һүрәтләнгән. XVIII быуаттағы яҙма ҡомартҡылардағы мәғлүмәттәр ҙә үтә мөһим. Бөтә тарихи ҡомартҡыларҙа Барҙы башҡорттары борон-борондан ошонда йәшәгән төп халыҡ итеп күрһәтелә. Барҙы башҡорттары V—VIII—X быуаттарҙа уҡ формалашҡан. Был йәһәттән мин төплө археология дәлилдәренә таянам. Үҙәк һәм Төньяҡ Башҡортостанда, Удмуртияның көньяҡ-көнсығышында һәм Пермь өлкәһенең көньяҡ регионының бөтә территорияһында, Ҡамаға тиклем, ғәйәт ҙур үҙенсәлекле археологик культура — бахмут мәҙәниәте йәшәгән. Ул бик ҙур ырыуҙар араһында таралған. Шунан ҡалған хан ҡалалар, ҡалатауҙар — беҙҙең изге ҡомартҡыбыҙ.

— Мин ғүмерем буйы археология менән шөғөлләнәм,— тип дауам итә Нияз Абдулхаҡ улы. — Һәм тарихсыларҙың, этнографтарҙың, антропологтарҙың иң һуңғы тикшеренеүҙәре шундай һығымтаға килтерә: башҡорттарҙың төньяҡ төркөмө (Барҙы башҡорттары һәм Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш башҡорттары) үҙҙәренең физик үҙенсәлектәре, тән, баш һөйәге төҙөлөштәре буйынса беҙҙең эраға тиклемге V—VIII быуаттарҙағы бахмут мәҙәниәтенә ҡараған ырыуҙарҙыҡына бик яҡын. Йәғни беҙҙең антропологтар, шулай уҡ Мәскәү университеты профессоры М. С. Акимова ла, төньяҡ-көнбайыш һәм Барҙы башҡорттарының ошо яҡтарҙа V—VIII—X быуаттарҙа йәшәгән ырыуҙар менән генетик оҡшашлығын таныны.

**Үҙеңдең булмышыңдан ҡасыр көс юҡтыр ул тәбиғәттә**

Быуатҡа яҡын осорҙа татарса белем алған гәйнә башҡорттары эргәһенә бер генә килеүҙән тел, рух, мәҙәниәт, тарих биреп булмағаны һәр кемгә мәғлүм, әлбиттә. Бының өсөн йылдар буйы эҙмә-эҙлекле эш алып барырға кәрәк. Бына татар ҡәрҙәштәр һымаҡ. Уларҙың шундай эҙмә-эҙлекле булыуына һоҡланам мин! Ситтә әҙме-күпме генә милләттәштәре йәшәһә лә, онотмайҙар бит улар. Ә беҙ, башҡорттар, үҙебеҙҙең тотош ырыуҙарыбыҙҙы ситкә тибеп, килеп хәлдәрен дә белмәй, рухынан, тарихынан, теленән яҙҙырҙыҡ. Ул ғына ла түгел, шул ырыуҙарҙы тергеҙә башлаған кешеләргә күмәкләшеп ҡаршы көрәшәбеҙ, ҡултамғалар йыябыҙ. Хәҙер шул ағайҙар аңлаһындар ине,

әле беҙ Пермь өлкәһенә кемдәргә тип күҙ төбәп килдек — гәйнә ырыуына түгелме? Гәйнәләрҙең тарихын, ғөрөф-ғәҙәттәрен, телен тергеҙергә тип килмәнекме? Шул ырыуҙы тергеҙеү түгелме? Ырыуҙарыбыҙ йәшәһә, халҡыбыҙ ҙа йәшәр, тип инанһаҡ ине. Бөтөп барған башҡорт халҡын башҡаса ҡалайтып тергеҙмәк кәрәк?

Ырыуҙарға тел мәсьәләһе лә тығыҙ бәйле. Конференцияла ҡатнашҡан Ҡазан ғалимдары менән башҡорт ғалимдары араһында бигерәк тә ошо өлкәлә ҡыҙыу бәхәс ҡупты. Гәйнә ырыуының теле беҙҙең Башҡортостандағы төньяҡ-көнбайыш һәм төньяҡ-көнсығыш башҡорттарыныҡына тартымыраҡ. Ул татар теленә лә оҡшаған. Хәйер, татар әҙәби теле үҙе бөгөнгө көндә көслө бәхәстәр тыуҙыра. Әгәр беҙ үҙебеҙҙәге төньяҡ-көнбайыш башҡорттары диалектын танымай, татарса уҡытығыҙ әйҙә, тип Ҡазанға үҙ ҡулдарыбыҙ менән биреп ҡуйһаҡ, Пермь өлкәһендәге Башҡортостан менән бер ниндәй бәйләнеш күрмәгән гәйнә башҡорттарын татар теле үҙе килеп тапҡан.

Бөгөн өлкәлә йөҙҙән ашыу татар мәктәбе эшләп килә һәм бер генә башҡорт мәктәбе лә юҡ. Әммә беҙ татар ҡәрҙәштәргә һис тә үпкәләй алмайбыҙ. Беҙҙең вайымһыҙлыҡҡа, тарҡаулыҡҡа, маңҡортлоҡҡа, сикләнгәнлеккә тик үҙебеҙ генә ғәйеплебеҙ.

**Арсиев Сәлим Бижән улы, гәйнә башҡорто.**

**1922 йылда Барҙы районының Үҙик ауылында тыуған. Бөйөк Ватан һуғышынан ҡаты яраланып ҡайтҡан. Юғары белем алып, пенсияға тиклем уҡытыусы булып эшләгән:**

— ...Тарихи белешмәләрҙән шуны әйтәм, был тирәлә, бигерәк тә Тулва йылғаһы бассейнында башҡорттар — төньяҡ-көнбайыш башҡорттары килеп урынлашҡандар. Ҡарт бабайҙарҙың әйтеүҙәренә ҡарағанда, инде алты быуын үткән, тиҙәр. Ә улар күсенеп-күсенеберәк килгәндәр. Шуға гәйнә башҡорттарының теле лә үҙенсәлекле, башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектына тартым. Унан һуң тел үҙгәрмәй тормай, үҙгәрә, хәҙерге көндә бөтөнөһөн татарса уҡыталар. Башҡорттоң ере иркен булғанлыҡтан, Татарстандың тығыҙыраҡ районданынан бик күп кеше күсеп килгән бында. Хәҙер ҙә ундай ауылдар бар. Казанка тирәһендә, Федоровка ауылында Ҡазан халыҡтары йәшәй... Әлбиттә, башҡорт теленең аҡрынлап татарсаға күсеүе көслө булған инде. Әле лә бара ул. Башҡортостан менән бер ниндәй бәйләнеш юҡ шул, ни эшләтәһең... Бына кисә Розалиә ханым йырлаған ҡобайыр ниндәй көслө тәьҫир итте. Рәхмәт уға. Бына шундай сығыштар йышыраҡ булһа, бик яҡшы булыр ине киләсәктә...

**М. С. Әхмәтов, география фәндәре кандидаты, Пермь өлкәһенең татар-башҡорт ижтимағи үҙәге рәйесе:**

— Мин үҙем татар, Татарстандан килдем. Ә башҡорттар күп бында, тик телен белеүселәр аҙ. Өйрәнергә мөмкинлектәре юҡ — ярҙам итеү теләге менән Башҡортостандан килеүселәр юҡ. Мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен онотмай һаҡлаусылар бар. Татарстан менән традицион бәйләнеш ныҡлы, ә Башҡортостан менән күберәк эшләргә кәрәк. Пермь өлкәһе менән Башҡортостан Республикаһы араһында дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлһә, мәҙәниәт, мәғариф, социаль-иҡтисади өлкәләге бик күп мәсьәләләрҙе хәл итеп булыр ине. Ике яҡлы килешеү буласаҡ был — Башҡортостан милләттәштәренә милли проблемаларын хәл итеүҙә ярҙам ҡулы һуҙһа, Пермь үҙ яғынан ҡағыҙ менән тәьмин итәсәк.

## Ә шулай ҙа беҙ кем?

Пермь өлкәһе кешеһе И. Әшировтың һөйләгән шиғыры тетрәткес ине:

Типтәрҙәр беҙ — тибәрелгән
халыҡ,
Гәйнәләр беҙ — Гәйнә
илендә.
Таныҡлыҡта башҡорт...

Һөйләшәбеҙ,
Аңлашабыҙ татар телендә.
Тамырҙары башҡорт
ырыуынан, —
Тип һөйләйҙәр беҙҙең
халыҡтың.

Башҡорт, тиһәң, күҙ алдына килә
Башҡорт зыяраты
Таныптың.
Ҡиблабыҙ һәм рухи
мәркәзебеҙ
Татарстан элек-электән.

Ғөрөф-ғәҙәтебеҙ,
шәжәрәбеҙ
Туҡай нәҫеле менән
береккән.
Ә шулай ҙа кем беҙ?

Телебеҙ татар,
Башҡорт, тиҙәр, асып паспортты,
Башҡорт ҡанлы Барҙы
татары беҙ,
Татар йәнле гәйнә
башҡорто.

Был бит ҡот осҡос фажиғә! Эйе, әгәр һин үҙеңә үҙең хужа булмаһаң, һинең өҫтән хужа булыусылар табыла. Был кире ҡаҡмаҫлыҡ хәҡиҡәт. Һәм ошо шиғыр юлдары гәйнә башҡорттары эргәһенә бер нисә көнгә генә (70 йылда!) ҡунаҡҡа ғына килгән Башҡортостан Республикаһы делегацияһына иҫ киткес әрнеүле үпкәләү булып яңғыраны.

## Гәйнәләр маңҡортлоҡ юлына баҫтырылған

Ҡонференцияның «Ҡама буйында йәшәүсе татар һәм башҡорттарҙың тарихы, этногенез проблемалары»на арналған секция эшендә айырыуса күп кеше ҡатнашты. Тәүҙә Уса өйәҙе башҡорттарының XVII—XVIII быуаттарҙа башҡорт ихтилалдарында ҡатнашыуҙары тураһында тарих фәндәре кандидаты Н. М. Ҡолбахтин сығыш яһаны.

— Гәйнә, уран, ирәкте башҡорттары йәшәгән Уса даруғаһында, — тине ул. — Шуларҙың иң ҙурыһы, иң көслөһө — гәйнә ырыуы. Ғөмүмән, иҡтисади, социаль-мәҙәни һәм сәйәси үҫеш буйынса башҡорттар төньяҡта иң көслөһө булған.

Нәзир Мырҙабай улы гәйнә башҡорттарының иң уҡымышлы, иң абруйлы улдарын — руда промышленнигы, Рәсәйҙәге беренсе тау училищеһына нигеҙ һалыусы Исмәғил Тасимов, Уса даруғаһы Гәйнә өйәҙе старшинаһы Туҡтамыш Ишбулатов, ҙур шәхес һәм иң бөйөк юлбашсыларҙың береһе Батырҡай Иккинин һәм башҡа бик күптәрҙе телгә алды, уларҙың тарихын һөйләне. Уса даруғаһынан иң күп башҡорт юлбашсылары, поход старшиналары, полковниктар сығыуын әйтте. Быларҙың бөтәһен дә кире ҡаҡҡыһыҙ тарихи мәғлүмәттәр менән дәлилләне.

— XVIII быуат гәйнә башҡорттары менән ғорурлана алаһығыҙ, — тип тамамланы ул һүҙен. — Һеҙҙең менән беҙҙең бурысыбыҙ — шул тарихты өйрәнеү. Өфө ғалимдарының етешһеҙлеге — гел көньяҡты өйрәнәбеҙ.

Ә бына Башҡортостандан килгән тарихсы, журналист-тикшереүсе Рауил Исламшин гәйнә башҡорттарын танымаусы Ҡазан ғалимдарының танауына сиртте тиһәк тә, һис тә хата булмаҫ. Ошо гәйнә башҡорттарының һәр ауылы буй-

лап йөрөгән, һәр өйгә инеп, һәр кеше менән күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшкән, тарихты китаптан түгел, ә тормошта тотоп ҡарап өйрәнгән кешене ниндәй абруйлы ғалимдар бүлмәй тыңланы һәм кире ҡаҡманы. Иң мөһиме, Рауил башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектында сығыш яһаны һәм танылған Ҡазан ғалимдарының береһе лә урынынан тороп «юҡ, был башҡорт теле түгел, ә татар теле» тигән дәғүә белдермәне. Тарихсы башта фәндәге төрлө фальсификацияларға, «башҡорт» этнонимын яңылыш аңлатыусыларға ҡағылып үтте.

— «Башҡорт» этнонимына иң мәкерле, иң дөрөҫ булмаған аңлатма биреүсенең Нурихан Фәттәх булыуы үкенесле, — тип һүҙ башланы ул. — Ул үҙе Башҡортостандың Яңауыл районында тыуған. Ә ул ҡараған Мәсәғүт ауыл советында 1935 йылдағы архив документтары буйынса бер генә татар ҙа, мишәр ҙә, сирмеш тә, бер генә удмурт та булмаған. Бары тик башҡорттар йәшәгән. Тимәк, Н. Фәттәх төбө-тамыры менән башҡорт кешеһе. Урал башҡорто. Һәм ул «Мөдир Сәжиҙә»не яҙып сыҡҡас, Ҡазанда әҙәбиәт әһелдәре уны татар телен боҙған, әллә ниндәй һүҙҙәр, әллә нәмәләр яҙған, тип тәнҡитләне. Шунан беҙҙең әҙибебеҙ ул телде онотто, хәҙерге ваҡытта иһә башҡорт тарихын, боҙоп, тикшермәй-нитмәй генә, Башҡортостан тарихының архив ишектәрен асмайынса ғына, хеҙмәттәр яҙа башланы. Башҡорттар булғар иленең ҡара ялсылары булған, тип раҫлауға барып етте. Ғөмүмән, күптәр ошолай псевдофәнгә, ялған идеяға ҡоролған, өҫтән-мөҫтән генә яҙылған әйберҙәр менән сығыш яһай башланы. Был ҡурҡыныс хәл. Унан һуң тағы бер хөрмәтле ҙур шағирыбыҙ бар — Әнғәм Атнабаев. Мин сей татармын, сей башҡорт илендә йәшәһәм дә, тип яҙыуына ҡарамаҫтан, ул ирәкте башҡорто — мин уның яҡташы булам. Зыялылар үҙенең төп тамырҙарын белмәгәс, халыҡ та ҡыҙыҡһынмай. Әле мин гәйнәләрҙең күп кенә ауылдарында йөрөйөм. Архивтарҙа эшләп, һәр бер кешегә тиерлек етешәр быуынлыҡ шәжәрә таратам. Әнә шунан да баш тарта халыҡ — шундай итеп килтереп ҡуйғанбыҙ маңҡортлоҡ юлына! Ниндәй түбәнлеккә төшкән беҙҙең халҡыбыҙ — уларҙың өйҙәренә, өҫтәлдәренә килтереп кертәм ете быуынлыҡ тарихты... Башҡортостандың көньяғы, көнсығышы, Ҡурған өлкәһе һәм гәйнәләрҙең ошо Барҙы райондарына ҡарата меңгә яҡын шәжәрәм бар.

— Архивтарҙа эҙләнегеҙ, боронғо карталарҙы ҡарағыҙ. Пермь ҡалаһы башҡорт ерендә ултыра, — тип мөрәжәғәт итте ул хөрмәтле ғалимдарға. — Был инҡар итмәҫлек хәҡиҡәт. 1992 йылдың 16 декабрендә «Башҡортостан»

тәзитендә XIX быуаттағы башҡорт ерҙәре төшөрөлгән уникаль документ — 1862 йылда башҡорт ғәскәрҙәренең Үҙәк идараһы эргәһендәге һыҙмалар комиссияһында төҙөлгән карта баҫылып сыҡты... Шунда ҡарағыҙ, Ирен йылғаһы тигәс, беҙ Ирен татарҙары тибеҙ, эйе бит? Әммә Мәскәүҙә, боронғо акттарҙа шундай архив материалдарына юлыҡтым: 1170-се фондта Өфө приказдарының 207-се номерында башҡорттарҙың Ирен волосы тураһында һәм уларға 40 татар, сирмеш, удмурт ауылдары килеп кергәне әйтелгән. Һәм уларҙы ҡыуырға кәрәк, тип һүҙ ҡуҙғатҡан башҡорттар. Шулай итеп, беҙҙең Ирен буйы эстәктәре элек үк, XVI быуаттарҙа уҡ, башҡорт этносын күтәреүсе халыҡ булып сыға. Ғөмүмән, «башҡорт» һүҙе бик борондан килеп кергән был яҡтарға. Юғиһә бөгөн, урыҫтар бында килеп киткәндәр ҙә башҡорт тип яҙып киткәндәр, тинеләр. Ә ғәрәп сәйәхәтселәре, көньяҡтан килеүселәр урыҫ булмаған бит! Шуға ҡарамаҫтан был яҡтарҙа «тышҡы башҡорт иле», «эске башҡорт иле» тип яҙып киткәндәр. Беҙ киләсәктә шул илдәрҙең сиктәрен асыҡларға тейешбеҙ — ни өсөн бер халыҡты икегә бүлгәндәр? Был өлкәлә, ғөмүмән, бер нәмә лә эшләнмәгән әле.

Ҡазан ғалимы Д. Исхаҡовтың гәйнәләрҙе эстәктәр тип атап, уғыр төркөмдәренә генә ҡайтарып ҡалдырыуын Р. Исламшин төрлө дәлилдәр менән кире ҡаҡты:

— Үҫәргәндәр, күбәләктәр, гигант ҙур ареал алып торған дыуан ырыуы, Әй буйында ҙур-ҙур ҡәлғә-ҡалалар тотҡан һәм Алтын Урҙа замандарынан билдәле тырнаҡлылар ырыуы, мөғжизәле һәм мифология тулы балыҡсы ырыуы (Аҫҡын яҡтарында), Ирен буйы башҡорттары, гәйнәләр — бөтәһе лә архив документтарында эстәктәр, иштәктәр тип йөрөтөлә. Иштәк компоненты был яҡтарҙа төньяҡ халҡың барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан икән, бер ҙә ғәжәп түгел, ул беҙҙең бик борондан килә торған этноним. Уның өҫтөндә тәрәндән эшләргә кәрәк. Бәлки, эстәк тамырҙары менән Хазар иленә барып тоташалыр. Бәлки, шул Хазар тигән гигант илде өйрәнергә кәрәктер беҙгә.

## Уса Башҡортостаны булған

— Минең башым буталып бөттө инде, — тип һүҙ алды Уса ҡалаһының Тыуған яҡты өйрәнеү музейы хеҙмәткәре Г. И. Клетикова. — Башҡорттар менән татарҙар араһында айырма бармы, юҡмы, әллә бында бөтәһе лә татарҙармы? Нисек кенә булмаһын, мин статистика идаралығынан мәғлүмәттәр алып килдем әле. Пермь өлкәһендә 1959 йылда

халыҡтың 2,3 проценты татар һәм 0,8 проценты — башҡорттар булһа, 1989 йылда хәл үҙгәргән: татарҙар — 2,1 процент һәм башҡорттар 3,9 процент тәшкил иткән. Шулай булғас, башҡорттар бында йәшәмәй, тип раҫлай алабыҙмы ни? Ғөмүмән, беҙҙең өйрәнеүсе ғалимдар шундай фекерҙә тора, бында борондан Уса Башҡортостаны булған.

Галина Ивановна Усалағы тыуған яҡты өйрәнеү музейында гәйнә башҡорттарының тарихына арналған ғилми сығанаҡтар һаҡланыуы, 1773—1775 йылғы Крәҫтиәндәр һуғышы, Пугачев ғәскәрҙәренең Уса ҡәлғәһен ҡамауы, Салауат Юлаев тураһында экспонаттар барлығы, картиналар төшөрөлөүе һәм музейға килгән халыҡҡа башҡорттар тураһында тарихи хәҡиҡәт тәҡдим ителеүе тураһында һөйләп үтте.

— Ҡонференцияла татар мәнфәғәттәре өҫтөнлөк итә. Ләкин мин үҙем был мәсьәләгә бөтөнләй икенсе ҡараштамын, — тип белдерҙе Пермь университетының тарих кафедраһы аспиранты, гәйнә башҡорттарының топонимикаһы буйынса бер нисә фәнни хеҙмәт авторы Е. Н. Шумилов. — Архив материалдарына таянып, шундай фекергә килдем: рустар килгәнгә тиклем, төньяҡ башҡорттары Урта Ҡама тирәһендә ғәйәт ҙур территорияны биләгән. Башҡорттарҙың көнбайыш территориялары Ҡаманың һул яғынан үткән һәм ҡайһы саҡта уң ярға ла сыҡҡан. Төньяҡта уларҙың ерҙәре бөгөнгө Пермгә яҡынлашҡан, көнсығышта Пермь татарҙары менән сикләнгән. Уран, танып, гәйнәләр — төньяҡ башҡорттары...

Шулай итеп, Е. Шумиловтың һөйләгәндәре профессор Н. Мәжитовтың фекерҙәренә лә тура килде. Артабан Евгений Николаевич башҡорттарҙың был ерҙәргә нисек килеүҙәренә лә ҡағылды:

— Мәғлүм булыуынса, IX быуатҡа тиклем Пермдән төньяҡтараҡ фин-уғыр һәм төрки ҡәбиләләре — ломоват мәҙәниәте вәкилдәре йәшәгән. IX быуатта, көньяҡтан сит халыҡтар килеүе һөҙөмтәһендә, ломоват мәҙәниәте етди тетрәнеү кисерә. Ломоватсыларҙың бер өлөшө көнбайышҡа, төньяҡҡа, хатта көнсығышҡа ла, Урал артына йүнәлә. Булғар телле ломоватсылар Ҡаманың аҫҡы ағымына табан юл тота һәм Волга булғарҙарының этногенезында ҡатнаша. Көньяҡтан килеүселәр кемдәр һуң? Булғарҙар тигән фекер бар. Әммә ул осорҙа булғарҙар этнос булып формалашып ҡына килгән һәм, археология мәғлүмәттәре буйынса, Пермь өлкәһендә X быуатта ғына күренгәндәр. Ломоват мәҙәниәтен емереүселәр башҡорттар булғандар тип әйтергә тулы нигеҙебеҙ бар. Башҡортостандың төнь-

яғында, археологтар асыҡлауынса, боронғо башҡорттар VIII быуатта уҡ йәшәгән. IX быуатта улар Урта Ҡамаға һәм Үрге Ҡамаға үтеп инә алған. Дөрөҫ, этнографтар араһында башҡорттар һуңғараҡ, XIII быуаттар тирәһендә килгән тигән фекер ҙә йөрөй. Әммә XII быуатта бында етди тетрәнеүҙәр булмаған. Бынан тыш, ошо осорҙа Пермь финдары, булғар янауынан арынып, ҡалаларҙан ауылға күсә. Башҡорттар, яулап алыусыларға үҙ теләге менән берелеп, был яҡтарҙы монгол талауҙарынан ҡотҡарып алып ҡала, тиергә мөмкин. Алтын Урҙа ойошҡас, Пермь өлкәһе тулыһынса тиерлек уға инә. Һәм йәнә башҡорттар арҡаһында — улар бөтә Көнбайыш Уралды биләгән. Үкенескә ҡаршы, археологтар әлегә башҡорттарҙың Үрге Ҡамала йәшәүен асыҡлай алмай. Был ҡыйынлыҡ башҡорттарҙың элек гел күсеп йөрөүҙәренә бәйле, улар йыл әйләнәһенә урын алмаштырғандар. Шуға археологтар уларҙы «тота алмай». Был осраҡта Пермь өлкәһенең төньяғында башҡорттар ҡалдырған географик исемдәр, топонимика мәғлүмәттәре уларҙың бында йәшәүен иҫбатлап тора. Ҡаманың юғарғы ағымында һәм хатта Екатеринбург өлкәһенең төньяғында йәшәүсе башҡорттарҙың ул саҡта уртаҡ теле булмаған һәм ҡыпсаҡ диалектында һөйләшкәндәр, күрәһең. Шуға күрә Үрге Ҡаманың ҡайһы бер атамалары башҡорт теленә ҡарағанда татар теленә яҡыныраҡ.

Шунда Өфө ғалимдары башҡорт теленең төньяҡ диалекты татар теленә оҡшаш, үрҙәге уртаҡлыҡ шунан киләләр, тигән фекер өҫтәне.

Тарих фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университеты доценты **Р. F. Буканова** башҡорттарҙың ере, теле һәм тарихи үҙаңы тураһындағы тарихи хеҙмәттәр менән таныштырҙы. Уның сығышы хөрмәтле ғалим Д. F. Исхаҡовтың рус ғалимдары татарҙарҙы башҡорттар тип атаған тигән хата фекеренә лә яуап булып яңғыраны:

— Бөгөнгө манҡортлыҡ фонында XIX быуаттағы рус тикшеренеүселәренең башҡорттар тураһындағы хеҙмәттәре хәҡиҡәткә тура килеүе менән өлгө булырлыҡ. 1867 йылда Санкт-Петербургта баҫылып сыҡҡан бер билдәһеҙ авторҙың «Боронғо Башҡортостандың үҙәге булған Өфө провинцияһы тураһында тарихи белешмә» — шундай тикшеренеүҙәрҙең береһе. Китаптың исеменән күренеүенсә, ул 1861 йылда ер реформаһы үткәреүҙә файҙаланыу өсөн төҙөлгән, ә һуңынан цензура рөхсәтенән брошюра итеп баҫылған. Авторҙы башҡорттарға айырыуса ҙур симпатия менән ҡарауҙа ғәйепләп булмай, ләкин дәүләт ҡаҙнаһын Башҡортостандың тәбиғи байлыҡтары иҫәбенә тултырыу-

ҙа бик ныҡ ҡыҙыҡһынғанлыҡтан, ул башҡорттар тарихына ҡағылышлы документтарҙы, шулай уҡ крайҙа ергә хужа булыу һәм ерҙән файҙаланыу буйынса закон акттарын бик яҡшы өйрәнгән.

Автор Өфө провинцияһы башҡорттарының ергә хоҡуғын, бигерәк тә Уса даруғаһы Гәйнә өйәҙе башҡорттарының хоҡуғын ентекле тикшергән. Тап ошо гәйнә ерҙәрен «Тарихи белешмә» авторы Боронғо Башҡортостандың үҙәге тип иҫәпләй һәм урынын билдәләй. «Ул... бөгөнгө өс губерна — Өфө, Пермь һәм Вятка — сиктәрендә урынлашҡан».

Билдәһеҙ автор хеҙмәтенең «Боронғо башҡорттарҙың Урал ерҙәренә хоҡуғы» бүлегендә бөтә Волга аръяғын, Ҡама буйлап юғарыға һәм артабан көнсығышҡа табан Урал тип аталған ерҙе — Башҡортостан, ә унда йәшәүсе халыҡты башҡорт, йәғни Урал башлығы, тип атай. Йәғни, ерҙең **төп хужаһы. Ошоларҙ**ан сығып, сәскә атыусы Булғар дәүләтенең дә, Алтын Урҙаның рәхимһеҙ хандарының да башҡорт халҡының Урал ерҙәренә хоҡуҡтарын таныуы кеүек феноменды аңлауы еңел. Хатта Иван Грозныйҙың ғәскәрҙәре Ҡаманы кисеп сыҡмаған бит...

### «...Һеҙ беҙҙең менән түгел!»

«Ҡаруанһарай» фольклор-эстрада төркөмөнөң солисы, бас гитарала уйнаусыһы һәм көйҙәр яҙыусыһы Мәхмүт Нәҙершаның яңы ижад иткән йырында шундай үҙәк өҙгөс һүҙҙәр бар. Әммә башҡорт егеттәренең өс сәғәтлек сығышын тын да алмай баҫып тыңлаған Барҙы кешеләрен күргәс, юҡ, хәҙер улар беҙҙең менән, тип уйланым мин. Һөлөк кеүек егеттәребеҙ Рәсүл Ҡарабулат, Артур Туҡтағол, Әмир Тойғон, Вилдан Ярулла, Мәхмүт Нәҙершаның йөрәкте елкетеп йырлауы, ҡурай тартыуы, өҙҙөрөп бейеүе, үҙәкте өҙөп моңланыуы шығырым тулы залды сихырланы. Ысынын әйтәм, әгәр донъяға башҡорт булып тыумаһам, шунда, ниңә башҡорт булып тыуманым икән, тип үкенер инем.

Халҡымдың быуаттарҙан килгән ғөрөф-ғәҙәттәрен, ауыҙ-тел ижадын, йыр-көйҙәрен тергеҙеп, «Ҡаруанһарай» хәҙер үҙе тере ҡомартҡыға, милли ҡомартҡыға әйләнде, халыҡ ижадын халыҡҡа ҡайтарып, ысын мәғәнәһендә халыҡ ансамбле булып китте.

...Өфө делегацияһының иң ҙур уңыштарының береһе — ғалимдарыбыҙҙың конференциялағы төплө, дәлилле, нигеҙле сығыштары. Тел ғилеме белгесе, филология фәндәре

докторы Нәжибә Мәҡсүтова, археолог, профессор Нияз Мәжитов, антрополог Ринат Йосопов, фольклор «батшаһы» Әхмәт Сөләймәнов, тарихсылар Нәзир Ҡолбахтин, Роза Буканова, ғалимә, сәсән-ҡобайырсы Розәлиә Солтангәрәева конференцияла үҙҙәрен донъя кимәленә сығырлыҡ ғалимдар итеп күрһәтте.

Барлыҡ башҡорт зыялылары ла ошо ғилем эйәләребеҙ һәм сәнғәт оҫталарыбыҙ кеүек, халҡыбыҙға, юғалтылған ырыуҙаштарыбыҙға тарихын, телен, мәҙәниәтен, рухын ҡайтарып биреүгә ең һыҙғанып тотонһа икән...

*1993*

*Зәйтүнә ХАНОВА.*

## ТАРИХ АЯҠ АҪТЫНДА

...Асҡын районында иң күп халыҡ — төп халыҡ — башҡорттар. Урыҫтар ҙа күп. Ҡасандыр бер-ике генә мишәр ауылы булған. Әммә төньяҡ башҡорттарының диалектын танымау, уларҙы татар тип иғлан итеү үҙенең ҡара эшен башҡарған — иң уникаль ырыуҙарҙың береһе — һун менән бергә меңәрләгән башҡорттар татарлаштырылған. Уйлап ҡына ҡарағыҙ, халҡымдың генофондын тәшкил иткән ерҙә ғүмер буйы рус һәм татар телендә генә гәзиттәр сыға. Балалар мәктәптә үк Ҡазан дәреслектәре аша үҙ милләтенән мәхрүм ителә. Үҙ теленән, хатта иленән биҙҙерелгән милләттәштәребеҙ күберәк Татарстан матбуғатын алдыра.

Почтала ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу йомғаҡтары менән таныштырҙылар. «Ҡызыл таң»ға бүтән баҫмаларға ҡарағанда айырыуса күп яҙылғандар. «Өмет»те яратып уҡыйҙар, «Йәшлек»кә ҡарағанда өс тапҡырға күберәк алдыралар. «Йәншишмә», «Ваҡыт», «Истоки», «Известия Башкортостана» баҫмаларын эҙләп уҡыйҙар. «Экономика и мы» гәзитен айырыуса яраталар.

Асҡынды сыҡҡас та, юлға түшәлгән кеше ҙурлыҡ таштарҙы ауырлыҡ менән урай-урай, мәсет манараларындағы ялтырауыҡлы айҙары менән маһайып ултырған Үтәш, Ҡобояҙ, Урмияҙды үтәһең.

Ошо ерҙә әҙ генә сигенеү яһап, бер аҙ тарихты байҡау мотлаҡ... XIX быуатта, башҡорт ерҙәрен уңлы-һуллы һатыу айырыуса киң йәйелдерелгәндә, рус сауҙагәре А. П. Уткин Өфө-Танып волосы башҡорттарынан 100 000 дисәтинә ер алған. Н. В. Ремезов был хаҡта, шаҡ ҡатып: «Был

бит 100 квадрат саҡрым, Бельгия һымаҡ тотош Көнбайыш Европа дәүләтенә тигеҙ территория! Һәм шул тиклем ер 8 мең һумға, йәки дисәтинәһе 8-әр тиндән генә, һатып алынған! Сит илдә, Өфө губернаһында тотош провинцияларҙы кеҫәләренә һалғандар, тигән әйтем юҡтан ғына сыҡмаған икән. Эйе, һәм, оят булһа ла, мин дә раҫлайым, бик оятһыҙ, әшәке рәүештә һалғандар»,— тип яҙа («Очерки из жизни дикой Башкирии. Быль в сказочной стране». М., 1989).

Шулай итеп, Өфө губернаһының нисек барлыҡҡа килеүен бөйөк рус ғалимдары әллә ҡасан уҡ ташҡа баҫтырған. Өфө губернаһы тураһында татлы хыялға бирелеүселәр Ремезовты, Лепехинды, Руденконы уҡыймы икән? Тарихты яңынан яҙып булмай бит ул. Был юлдар шулай уҡ төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанды бүлеү буйынса татар йәштәре берлеге менән ҡушарлап социологик тикшеренеүҙәр үткәреүсе Йәштәр эштәре буйынса дәүләт комитетына ла ҡағыла.

...Ҡашҡа ауылы — төпкөлгә, урман эсенә алып кергән юлда һуңғы цивилизация нөктәһе. Участка больницаһы, «Төй» совхозының үҙәк усадьбаһы бында. Тарихтан Ҡашҡаның 1819—1930 йылдарҙа Бөрө кантоны Балыҡсы волосының үҙәге булыуы билдәле. 1816 йылда ауылда ҙур яңы мәсет булған. XIX быуат аҙағында, 1895 йылда, «башҡорт мәктәбе» эшләгән (А. З. Асфандияров. «История сел и деревень Башкортостана»).

Тәрән бураҙналар менән бүлгеләнеп бөткән соҡорло юлдар, урман аша Солтанбәк төйәкләнгән. Был иң ҡыҙыҡлы тарих кисергән ауылдарҙың береһе. Тау битләүендә, Сарай ҡарт болононда баҫып торабыҙ — аҫта ауылды урап Сарс йылғаһы аға. Йәнәшәбеҙҙә генә Сарай ҡарт ҡәбере. Ул эре-эре таштар менән уратып алынған. Әйткәндәй, Асҡында йәшәүсе Әнүәр ағай Әсрәров Сарай ҡарт нәҫеленән. Шәжәрәһендә шулай яҙылған. Ә йөҙәрләгән Солтанбәк кешеләренең шәжәрәләрен запастағы офицер, Солтанбәк ауылы илһөйәре тарихсы Шаһийән ағай Миңлеғәлиев төҙөгән. Ул үҙенең тыуған ауылына шәжәрәһен генә түгел, тотош тарихын ҡайтарып биргән.

Бына Сарай ҡарт фажиғәһен аңлау өсөн дә беҙгә тарихҡа мөрәжәғәт итергә тура килә. Бының өсөн алыҫ йөрөргә лә кәрәкмәй — абруйлы ғалим Әнүәр ағай Әсфәндиәровтың «История сел и деревень Башкортостана» тигән рус телендә нәшер ителгән китабын ҡулға алыу ҙа етә: «Балыҡсылар һәм уларҙың ерҙәре башҡорт халҡының батша хөкүмәтенең хәрби-феодаль һәм колониаль иҙеүенә ҡаршы милли-азатлыҡ көрәше тарихында киң билдәле...

Балыҡсы, Һун, Ҡыр-Танып башҡорттары 1735—1740 йылдарҙағы ихтилалда иң актив ҡатнаша. 1735 йылдың декабрендә А. И. Тевкелев[1] Өфөнән язалау отряды менән сыға һәм Бөрө аша Әй йылғаһына йүнәлә. Баш күтәреүселәр Тевкелевты Балыҡсы һәм Мырҙалар волостары сигендәге тауҙар араһында тар-мар итергә ниәтләй. Бында Балыҡсы волосы старшинаһының 700 кешелек ҡораллы отряды хәрәкәт итә. 19 ғинуарҙа Тевкелев балыҡсыларҙың Сөйәнтус ауылына килә һәм баш күтәреүселәрҙең ниәттәре, ауыл кешеләренең билдәләнгән операцияла ҡатнашлығын белә. Ул Сөйәнтус халҡын рәхимһеҙ ҡыра. Ваҡиғалар шаһиты П. И. Рычковтың яҙып ҡалдырыуынса, «близ 1000 человек с женами и с детьми их в этой деревне перестрелено и от драгун штыками, от верных башкир и мещеряков копьями переколото; сверх того, 105 человек собраны были в один амбар и тут огнем сожжены». Сөйәнтусты көлгә әйләндереп, Тевкелев Себер юлының Балыҡсы, Һуннар, Ҡыр-Танып волостары башҡорттарын ҡырыуҙы дауам итә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ул 51 ауылды талай һәм яндыра, ике меңдән ашыу кешене үлтерә һәм балаларын, ҡатындарын хәрби чиндарға таратып бирә. Яуыз Тевкелевтың исемен халыҡ мәңгелек ҡәһәргә күмә. Был башҡорт халҡының «Тәфтиләү» йырында асыҡ күренә, ә уны ижад итеүгә балыҡсыларҙың да туранан-тура мөнәсәбәте бар».

Бына ошо Сөйәнтустан алыҫ түгел Дөлбәж ауылында йәшәгән Сарай ҡарт, ҡурҡыныс яу килерен һиҙемләп, үлер алдынан яҡындарын саҡырып ала ла: «Был ерҙәргә урыҫтар киләсәк, бөтә халыҡты ҡанға батырып ҡырасаҡтар, минең һөйәктәрем бында ятмаһын, Сарсҡа (Солтанбәккә) алып барып ерләгеҙ», — тип үтенгән. Уның васыятын үтәп, Сарс ярҙарынан өҫкә, ошо болонға килтереп ерләгәндәр ҙә инде. Ул дөрөҫ һиҙенгән, һуңынан бында, ысынлап та, урыҫтар йәшәгән. Аҙаҡ күсеп киткәндәр.

Тарихи йырҙарҙа ҡәһәрләнгән Тәфтиләү яндырған 51 ауылдың береһе Сарс, йәғни бөгөнгө Солтанбәк... Халыҡты быуаттар буйы үҙ тарихынан төңөлдөрөргә тырышып ҡараһалар ҙа, килеп сыҡмаған. Асҡын районының иң төпкөлөндә йәшәүсе Балыҡсы башҡорттары әруахтары рухына әле лә тоғро. Үҙ тарихын күҙ ҡараһылай һаҡлап, бө-

---

[1] Ҡотләхмәт Тевкелев, суҡындырылғаны буйынса Алексей Иванович, нуғай мырҙаларынан сыҡҡан, 1737 й. — полковник, 1750 й. — бригадир, 1755 й. — генерал-майор булған. 1766 йылда үлгән. Ҡазан ханлығына, Башҡорт иленә, артабан — Бөтөн Урта Азияға үтеп инеүҙә айырыуса мәкерлек күрһәткән батша хөкүмәте шымсыһы.

гөнгө көнгә еткергәндәр — Яу зыяраты, хәстәрлекле кәртәләнеп алынып, ауылдың ҡап уртаһында тәрән тынлыҡ һаҡлап боронғо һәм ҡәһәрле тарихты хәтерләтеп ултыра.

...Ләкин бында ла халыҡтың иң яратып уҡығаны — Татарстан матбуғаты: «Сөйөмбикә», «Юлдаш», «Ҡызыл таң»-ды ла күп алдыралар.

Ни өсөн беҙ үҙ илебеҙҙә үҙебеҙ баш була алмайбыҙ икән? Насар гәзит-журналдар сығарабыҙмы? Аҫҡын башҡорттарының татар теленә, матбуғатына ылыҡтырылыуға ла башҡа милләт йәки татар туғандар ғәйепле түгел бит! Беҙ үҙебеҙ, беҙҙең вайымһыҙлыҡ, ялҡаулыҡ, битарафлыҡ ғәйепле. Мәғариф, Матбуғат һәм Мәҙәниәт министрлыҡтарын ошолар борсомаймы икән? Төньяҡ-көнбайышта бөгөн бер генә башҡорт гәзите лә сыҡмай, китапханаларҙа башҡорт әҙәбиәте юҡ кимәлендә, тыуған яҡты өйрәнеү музейҙары юҡ. Ә шул төбәктәге башҡорт милләтенән булған балаларҙың татар телендә уҡытылыуына ышаныу өсөн түбәндәге таблицаны ҡарағыҙ.

| № | Мәктәп исемдәре | Балалар һаны | | Мәктәп тибы | Мәктәптәргә балаларҙы йәлеп итеү | | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | | мәктәпкәсә | мәктәптәге | | Башл. | V—IV | X—XI | |
| 1. | Баҙансат | | 123 | ум[1] | тат. | тат. | рус. | Балаларҙың туған теле — башҡорт теле |
| 2. | Иҫке Ҡаҙансы | | 294 | ум | тат. | тат. | тат. | |
| 3. | Ҡышлауйылға | | 112 | ум | тат. | рус. | рус. | |
| 4. | Яңы Ҡаҙансы | | 63 | тбум[2] | тат. | тат. | — | |
| 5. | Яңы Ҡарыш | | 51 | тбум | тат. | тат. | — | |
| 6. | Ҡыйғаҙы | | 105 | тбум | тат. | тат. | — | |
| | | | | | | баш. | (9-сы класта ғына башҡортса уҡыйҙар) | |
| 7. | Мутайылға | | 90 | тбум | тат. | тат. | — | |
| 8. | Иҫке Мутабаш | | 49 | тбум | тат. | тат. | — | |
| 9. | Сураш | | 37 | тбум | тат. | тат. | — | |
| 10. | Тулғыҙбаш | | 58 | тбум | тат. | тат. | — | |
| 11. | Әлйәгеш | | 9 | тбум | тат. | — | — | |
| 12. | Башҡортостан | | 5 | тбум | тат. | — | — | |
| 13. | Таллышишмә | | 2 | тбум | тат. | — | — | |
| 14. | Олойылға | | 15 | тбум | тат. | — | — | |
| 15. | Йәнкиҫәк | | — | тбум | тат. | — | — | |

[1] ум — урта мәктәп.
[2] тбум — тулы булмаған урта мәктәп.

Башҡорттарҙың аҫаба ерҙәре — Ҡыр-Танып, Һыу-Танып, Һуннар һәм Балыҡсы волостары биләмәләрендәге тарихи башҡорт ауылдары ни өсөн бөгөн шундай хәлгә килтерелеп ҡуйылған? Ниңә аҫаба башҡорт балалары туған теленән ваз кисерелеп, татар телендә уҡырға мәжбүр? Башҡорт теленең иң боронғо компоненттарының береһе булған *с* хәрефе менән генә һөйләшкәндәре өсөн ярты башҡортто ситкә типһәреп, сит милләткә көсләп индергән башҡорт хөкүмәтен киләсәк быуындар ғәфү итерме?

**ФИРҮЗӘ АПАЙ ХИКМӘТОВА:**

— Беҙ тыумыштан үҙебеҙҙең ошо тел, татар теле менән барабыҙ инде. Татар телендә, Ҡазан китабы менән уҡыныҡ. Мин башҡортбоҙ тип түгел, татарҙар тип уйлайым инде үҙебеҙҙе.

**— Ә бына әле Шаһийән ағай Миңлеғәлиевтән ырыуығыҙҙы, шәжәрәгеҙҙе һорашып ултырҙығыҙ. Нәҫелегеҙ кем?**

— Татар түгел инде, башҡорт былай, башҡорт...

**— Тарихи ерлегегеҙ, булмышығыҙ башҡортмо?**

— Эйе.

**— Әммә, татарса уҡығас, үҙегеҙҙе татар тип тоя башланығыҙ инде?**

— Эйе, мәктәптә татар китаптарынан уҡып белем алғас, татар тип беләм инде мин. Башҡортто ла яратам, татар телен дә яратам. Беҙҙе бит башҡорт тип тә танымайҙар һәм уҡыуыбыҙ, һөйләшеүебеҙ буйынса башҡорт теле менән дә бара алмайбыҙ. Әнә шул уртала торабыҙ инде. Хәҙер беҙҙең балалар башҡортса уҡый. Минең улым 10-сы класта башҡорт телен бик яратып уҡып йөрөй.

**ӘНҮӘР АҒАЙ ӘСРӘРОВ — Сарай ҡарт вариҫы, Аҫҡын район гәзитенең элекке мөхәррире, һуғыш ветераны:**

— Гел татарса, Ҡазан китаптары буйынса уҡыныҡ. Татар яҙыусыларын өйрәндек. Башҡорттоҡон белмәнек.

**— Үҙегеҙ кем һуң?**

— Беҙ — башҡорттар. Тик, халыҡ бала саҡтан татарсаға өйрәнгәс, башҡортҡа бик әйләнеп бармай...

**РӘЙФӘ АПАЙ ҠӘЮМОВА:**

— Мин гәзит уҡырға яратам. «Ҡызыл таң»ды бына бер хәрефен дә ҡалдырмай уҡыйым. «Азат хатын», «Ышаныс» баҫмаларын яратабыҙ.

**— Матбуғатта төньяҡ-көнбайышта, йәғни Өфө губернаһында, башҡорттар йәшәмәй, уны бүлеп алып, Мәскәүгә йә Ҡазанға бирергә кәрәк тигән бәхәстәр ҡыҙған саҡтар булды. Һеҙ шул фекерҙе яҡлайһығыҙмы:**

— Мин үҙем татар. Балтас яҡтарынан килен булып төшкәнмен. Беҙҙең ауылда күбеһе башҡорттар. Нишләп йәшәмәһендәр, ти. Башҡорттар бында юҡ, тип дөрөҫ яҙмайҙар. Ҡилешмәйем улар менән.

*1994*

*Саимә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА, С. И. Руденко исемендәге тарихи-мәғрифәтселек клубы рәйесе*

## «ТӘФТИЛӘҮҘЕҢ ҠЫЛҒАН, АЙ, ҠӘҺӘРЕН ҮҘЕ БЕЛМӘҺӘ ЛӘ ИЛ БЕЛӘ...»

Төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының башҡорт икәнлеген иҫбатлауым, ул этник төркөмгә милли үҙаңын ҡайтарыу маҡсатында уларға үҙ диалекттарында дәреслектәр булдырыу тураһындағы идеям күптәргә билдәле. Әммә ул идеяны яҡлаусылар араһында ғалимдар хәҙергә аҙ әле.

Күп кенә ғалимдарыбыҙ ошолай тип аңлатырға тырыша: йәнәһе, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының телен Ҡазан яғынан килгән татарҙар боҙған. Был копцепцияны тамырынан хата тип иҫәпләйем, халҡыбыҙҙың һәр ырыуы борондан ул тел үҙенсәлектәре менән бер-береһенән шаҡтай айырылған. Уның нәҡ шулай булғанына ышаныр өсөн әллә ни кәрәкмәй, 400—500 йылдар элек яҙыла башлаған башҡорт шәжәрәләренең текстарына күҙ ташлау ҙа етә.

«Ике өн — *һ* һәм *ҫ* өндәре башҡорт теленең ынйыһы», — ти филология фәндәре докторы Н. Мәҡсүтова. Әлбиттә, улар икеһе лә ынйы. Ләкин башҡорт этносы ареалының ҡайһы бер төбәктәре өсөн генә. Ә бит, уйлаһаң, башҡорт теле диалекттарында, ғөмүмән, фонетика буйынса ынйылар бик күп.

Орхон-йәнәсәй ташъяҙмаларында табылған *лт, нт, нк* өнойҡаш формалары беҙҙең урта диалектта яҡшы һаҡланған: *анта, мынта, еңкә* һ. б. Ошо фонетик үҙенсәлек Асҡын һәм Ҡариҙел районларында компактлы йәшәүсе ике ырыу халҡының (балыҡсы һәм һун) һөйләшенә лә хас. Тағы ла шул иғтибарға лайыҡ: һун һәм балыҡсы ырыуҙары телендә *с* өнө лә һаҡланып килә. *С* өнөнә татар теле күренеше тип ҡарау дөрөҫ тә, ғәҙел дә түгел. Ул боронғо нигеҙ, һун һәм балыҡсы ырыуҙары һөйләше билдәле. Һорау тыуа: һун, балыҡсы ырыуҙары телендә һаҡланған боронғолоҡ ниңә ынйы түгел? Бөгөнгә хәтле орхон-йәнәсәй ташъяҙмаларындағы телде һаҡлап ҡала алған халыҡ үҙе бер тере тарих бит, ниңә уның ҡәҙерен белмәйбеҙ? Ниңә уның һөйләшенә ынйы тип ҡарамайбыҙ? Һундарҙың башҡорт халҡын формалаштырыуҙа роле ҙур булғаны билдәле. Быны бик күп тарихи мәғлүмәттәр һәм Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев шәжәрәһе лә иҫбатлай.

Мин бала ваҡытта инәйемдең (инәйем — һун, ә атайым — дыуан ырыуы вәкиле) туғандарына килһәк, бабайҙарым мине: ««Безнең башҡорт ҡызыбыз килгән», — тип

ҡаршы алыр ине. «Ҡилдем шул татар бабайҙарыма», — тиһәм: «Юҡ, балам, без татар түгел, без төп башҡортлар, ә сезнең анда нейәҙер сакаулашҡан башҡортлар», — тиҙәр ине. Был — 50-се йылдарҙа минең 60—70 йәшлек бабайҙарымдан ишеткәнем. Улар Ҡазан дәреслектәрен, йәғни Ҡазан төркиҙәре теленең грамматикаһын өйрәнмәгән, телдәре нисек асылһа, шулай һаҡланған.

*Ч* өн-фонемаһы улар телендә юҡ ине.

Ә көнбайыштараҡ — танып, гәйнә, йәлдәк, уран, ялан, гәрә, бүләр һ. б. күп башҡорт ырыуҙарының телендә *ч* өн-фонемаһы булғанмы? Бөгөнгө Тәтешле районы Иҫке Соҡор ауылы сығышлы, беҙ үҙ яйыбыҙға һалып әйткәнсә, яҙғанса, Ғәли Соҡорой тигән күренекле мәғрифәтсе (XIX быуат кешеһе) үҙен Гәли Чокори тип йөрөтә. Уның улы Ғарифулла Ҡейеков «Шура» журналының «Тел ярышы» йыйынтығында 1910 йылда: «...Мин дә аларның (башҡорт бабаларымның) тарихын шәкерт чағымда уҡ яҙа башлаған идем. ...Тач башҡортча ғына булғас Ҡазанлар мысҡыл итәрләр тип бастырырға күрсәтә алмаған идем», — тип яҙа. Бынан, беренсенән, *ч* өн-фонемаһы ирәкте ырыуы телендә электән үк булған икәнлеге күренә, икенсенән, башҡорт теленә хас ирен гармонияһы ярылып ята.

Дүртөйлө, Илеш райондары территорияһында табылған боронғо шәжәрәләрҙә (ул шәжәрәләр бынан 3—4 йөҙ йыл һәм элегерәк тә яҙыла башланған) *ч* өнө бар. Ҡайҙан ул? Иҫке төрки теле йоғонтоһомо әллә яҙыу теле шулай ҡабул ителгән булғанмы? Әллә һөйләү телендә лә булғанмы? Бөгөнгө Баҡалы, Илеш, Бәләбәй, Яңауыл, хатта Татарстанда ҡалған Бөгөлмә, Аҙнаҡай башҡорттары телендә *ҙ* өнө бар. Шул уҡ ваҡытта *ч* өнө лә йәнәш ҡулланыла. Тик улар телендәге *ч* өнө мишәр телендәге чыҡылдап торған ҡаты өндән айырыла. Ҡешеләрҙең мишәр ғаиләһендәме, башҡорт ғаиләһендәме үҫкәнен, һуңғыһы башҡорт теленең бөтә үҙенсәлектәрен үҙгәрткән булһа ла, *ч* өнөнөң яңғырашы буйынса айырып була.

Мин әңгәмәләшкән 60—80 йәшлек әбейҙәр шул ике өндө лә ҡушып һөйләшә, улар ата-әсәләренең дә шулай һөйләшкәндәрен бәләкәй саҡтарынан уҡ хәтерләп ҡалған. Ә бөгөнгө 50 йәштәгеләренең һәм унан йәшерәктәренең теле, әлбиттә, боҙолған, уларҙы, үҙ телендә һөйләшһә, яҙһа, «2»ле ҡуйып, Ҡазан биргән дәреслектән уҡытып, туған телдәренең үҙенсәлектәренән һәм милли үҙаңдан мәжбүри яҙҙырғандар инде.

Ә ни өсөн, кем фарманы менән улар Ҡазан дәреслектәрен уҡый? Ни эшләп ул яҡ башҡорттарын үҙ телендә уҡытыу саралары үҙ ваҡытында күрелмәгән? Был һорауға

яуапты үрҙә әйтелеп киткән сәбәптәрҙең дә сәбәбе булған тарихи бөгөлөштәрҙән эҙләйек.

1924 йылда әҙәби тел нормаларын төҙөү һәм ҡабул итеүҙе иҫкә төшөрәйек. «Башҡортостан» гәзитенең 1924 йылдың февраль һанында Шәһит Хоҙайбирҙин «Нисек яҙырға?» тигән мәҡәләһендә әҙәби тел нормаларын төҙөү өҫтөндә эшләүсе ғилми ойошманың ағзаларын уларҙың үҙҙәренә генә яҡын, таныш ҡаҙаҡтар менән сиктәш булған тау башҡорттарының телен генә әҙәби тел нормалары итеп алыуҙан ҡурсаларға тырыша. Тарихи күҙлектән ҡарағанда, ҡайһы һөйләштең боронғораҡ икәнлеге өйрәнелмәгәнлеген дә иҫкәртә. «Тормошҡа иң яҡыны, минеңсә, ҡыпсаҡ, юрматы, ялан, үҫәргән, һаҡмар, пермь башҡорттары һөйләшкән тел», — ти ул.

Ә 1924 йылдың 20 февралендә булып үткән Башҡорт АССР-ы Наркомпросы коллегияһы ҡарарының 1—3-сө пункттарында башҡорт әҙәби теле нигеҙе итеп юрматы һөйләшен алып, башҡорт теле грамматикаһын төҙөргә, бөтә хөкүмәт ойошмаларының баҫмаларын шул телдә сығарырға тип әйтелә.

Артабанғы 4—5-се пункттарҙа: «Ваҡытлы матбуғатты мөмкин тиклем башҡорттарҙың бөтә һөйләштәренә лә аңлайышлы итеп сығарырға», «Башҡорт мәктәптәрендә уҡыу-уҡытыуҙы районорҙың үҙ телендә алып барырға»,— тип әйтелә.

Шәһит Хоҙайбирҙин иҫкәрткәнсә, ҡайһы һөйләштең ысынбарлыҡҡа яҡыныраҡ, тарихираҡ та икәне өйрәнелмәгәнлеге һәм юғарыла әйтелгән ҡарарҙың үтәлмәүе бөгөнгө көндә 300 мең кешенең ҡамғаҡҡа әйләнеүенә килтерҙе. «300 мең» тип әйтеүебеҙ ҙә бер һүҙбәйләнеш кенә, ә бөгөн Ҡазан дәреслектәре буйынса уҡып йөрөгән башҡорттарҙың бөтәһен дә ҡушып иҫәпләһәк?!

М. З. Шакиров етәкселегендә был төбәктә әҙәби башҡорт телен уҡытыуҙы индереү дөрөҫ һымаҡ. Ләкин, үҙ ваҡытында үрҙә күрһәтелгән ҡарарҙың 4—5-се пункттары күбеһенсә мишәрҙәрҙән торған чиновниктар тарафынан үтәлмәгән кеүек үк, был юлы ла халыҡ мәғарифы системаһының урындағы чиновниктары татарлашып бөтә яҙған башҡорттар әҙәби башҡорт телен ҡабул итмәһен өсөн бөтә көстәрен һалды. Башҡорт телен уҡытыу әҙерлекһеҙ башланды. Дәреслектәрҙе башҡорт теленең бөтә үҙенсәлектәрен белмәгән татар теле уҡытыусылары алып барыуҙы дауам итте. Фекер тәрәнлеге менән бөтә донъяла тиңе булмаған «Урал батыр» эпосын ғына ла матур итеп аңлата алманы, әлбиттә, улар. Улар «башҡорт халҡы»

тигән төшөнсәгә хөрмәт тәрбиәләй белмәне лә, теләмәне лә.

Бынан 4—5—6... тиҫтә йылдар элек төньяҡ һәм көнбайыш райондарҙан башҡортлоҡ милли үҙаңы, ғорурлығы булған ҡыҙҙар һәм егеттәр башҡорт әҙәбиәтенә, филологияһына, сәнғәтенә килә ине. Ул быуын вәкилдәре индергән тос өлөштө дауам итергә бөгөн ул яҡтарҙан кемдәр бар? Шәйехзада Бабич, Афзал Таһиров, Али Ҡарнай, Әбүбәкер Усманов, Ҡирәй Мәргән, Әхнәф Харис, Мөсәлиә Хәйруллина һәм башҡа бик күптәргә алмаш булып кемдәр килер һәм уларҙың эшен кем дауам итер?

Ә ул яҡтарҙан билдәле шағир Н. Нәжми, Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен алғанда, үҙенең рәхмәт һүҙен:

Мин үҙемә һәйкәл ҡуя алманым,
Ҡемдәр атар минең исемде
Тыуған ерҙә, тыуған телемдә,
Әгәр ҙә ул өйҙәш булып ҡалһа,
Үҙ өйөндә, тыуған өйөндә?
Туған телһеҙ мин юҡ! Ә юҡтарға
Ҡайҙа ниндәй һәйкәл ҡуйылған? —

тип тамамлауын нисек аңларға?

«Йәшлек» гәзитендә (1992 йыл, 6 февраль) Н. Аҡмалова былай тип яҙған: «Салауат яуы ваҡытынан ҡалғандыр инде, Ҡан дауылы тип аталған яланға яҡын урынлашҡан ауыл Минеште тип атала. Халыҡ һөйләүе буйынса, был ауыл кешеләре ҙур алыш ваҡытында мөйөштә генә тороп ҡалған. Исеме шунан сыҡҡан. Һуңынан, уны боҙоп, Минеште тип йөрөтә башлағандар. Беҙ төп башҡорттар тип иҫәпләйбеҙ үҙебеҙҙе. Татарса уҡытҡанға беҙҙең ғәйебебеҙ юҡ».

Халыҡ иҫәбен алыу материалдарын ҡарайыҡ. Н. Нәжмиҙең тыуған ауылы Минештелә — 1834 йылда 20 ир, 45 ҡатын-ҡыҙ һәм улар башҡорттар, үҙ ерҙәрендә йәшәй, тигән. Килгәндәр берәү ҙә булмаған. Минеште тураһында ошо хәҡиҡәтте Н. Нәжми белмәйме икән ни? Тағы бына ошо шиғыр юлдарына ла иғтибар итәйек:

Ҡол булһаҡ та, тел бит йәшәгән,
Быуат төпкөлөндә Салауаттар
Ә ниндәй һуң телдә йәшнәгән?

Эйе, ниндәй телдә? Быуаттар төпкөлөндә түгел, ә был быуаттың тәүге 1—2 ун йыллыҡтарында, бынан 70—80

йыл элек кенә, Шәйехзада Бабич һуң ниндәй телдә йәшәгән? «Башҡорт, башҡортом», — тип ниндәй телдә янып-көйгән? Минеште менән Әсән араһы нисә саҡрым?

Улар, йәғни ул төбәк башҡорттары, беҙҙең ғалимдарыбыҙҙың ирке менән Ҡазан дәреслектәрен уҡып үҫкән һәм бөгөнгө көндә өсөнсө-дүртенсе быуын шул дәреслектәрҙе генә белә. Башҡортлоҡ ғорурлығын, башҡорт милли үҙаңын юғалтып, ул яҡтарҙың бөгөнгө йәш таланттары ҙур аҡыл тулҡыны булып Ыҡ йылғаһы аръяғына аға.

1834 йылғы батша иҫәпләмәһе (ревизские сказки) материалдарын алып ҡарайыҡ: кеше иҫәбен алыу материалдары бухгалтерия документы булып иҫәпләнгән. Ер хужаһы башҡорт икенсе берәү булып яҙылырға теләмәй, ә керген мишәрҙәр теләһә лә башҡорт булып яҙыла алмай. Кеше иҫәбен алыуҙы, бөтә тәртибен еренә еткереп, урыҫ чиновниктары башҡарған. Был материалдарҙан күренеүенсә, Башҡортостан территорияһында 300-ләп башҡорт ауылдары осонда «по припуску башкирцев», «на покупной у башкирцев» тигән аңлатма менән мишәрҙәр ултыраҡланған, ә «на казенных землях», «на жалованных великими государями», «на отписанных от башкирцев за бунт в таком-то году» тип аңлатылған ерҙәрҙә 400—1000 кешелек 30-лап ҙур мишәр ауылы булған һәм бөгөнгө көндә лә шул уҡ хәл.

Батша хөкүмәтенең 1736 йылғы указына ярашлы, әгәр бер ауылдан 1—2 генә кеше батшаға ҡаршы яуҙа ҡатнашһа, башҡорттар бөтә ауылы менән ерһеҙ ҡалған. Бына шул указды иҫкә алып, бөгөнгө һәм тарихи Башҡортостандағы «татар» ауылдарына ла асыҡлыҡ индерәйек: әйтәйек, Салауат районында Нәсибаш, Миәшәгәр, Шәрип ауылдары документтарҙа ла, милли үҙаң һаҡланышы буйынса ла — мишәрҙәр. Ә Лаҡлы, Таймый ауылдары мишәрҙәр түгел. Шул бер ихтилалда ҡатнашҡан өсөн ерһеҙ ҡалған *с, ч* өнлө башҡорттар *ç, һ*-лы башҡорттар араһына килеп һыйынған түгелме икән? Һыйынғандар һәм һыйындырғандар быуыны үлеп бөткәс, яңы быуындар, тел айырымлығы арҡаһында үҙҙәрен-үҙҙәре үҙаң айырымлығына, татар тип аталыуға дусар иткән башҡорттар. Ә күпме шундай «татар» ауылдары Башҡортостанда!

Тағы бер документҡа туҡталып китәйек: 1736—1738 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын аяуһыҙ ҡыйратҡандан һуң, В. Н. Татищев Петербургҡа былай тип яҙған: «...Башкирцы согласились на передачу части земель мишарям и чувашам, которые участвовали в подавлении восстания». Шулай булғас, «ер һатыуҙарҙың», «договор төҙөүҙәрҙең» ниндәй шарттарҙа булғаны күҙ алдына килә, аңлашыла.

Батшаларҙың урыҫтар, христиан динен ҡабул иткәндәр, урыҫлашҡандар йәшәгән ареалды киңәйтеү сәйәсәте Иван Грозныйға Ҡазанды алып биргән мишәр халҡын да тыуған ерҙәренән, илдәренән ҡыуа, ер хаҡына уларҙан башҡорт ихтилалдарын баҫтырып, ерле итеп, башҡорттар араһында батшалыҡ ышаныслы терәген эшләп ҡуя.

Мишәр ауылдарында бөгөн дә халыҡ үҙен мишәр тип атай, мишәр милли үҙаңдары һаҡланған. Ә мишәр сығышлы ғалимдарҙың боронғо европеид төрки халыҡ булған мишәр этносының юҡҡа сығыуына юл ҡуйыуҙарын, мишәрҙәрҙе «татар» тигән ҡыйыҡ аҫтына тығып, уға ниндәй тарих уйлап сығарырға белмәй интегеүҙәре аптырата. Мишәрҙәр урта быуаттарҙа Мәскәү янында ғәйәт ҙур ерһыу хужаһы булған. Ошо ҙур этнос күп ырыуҙарҙан торғандыр тип тә фараз итеп була һәм, әлбиттә, ул этник төркөмдәр үҙҙәренең тел үҙенсәлектәре менән дә бер-береһенән айырылып торған. Мишәр сығышлы ғалимдар, бына ошо серҙәрҙе өйрәнергә тырышмайынса, «татар» исеме ҡайҙан килеп сыҡҡан, тип бәхәсләшә, беҙ татар түгел — боронғо булғарҙар тип, республикаларының исемен дә алмаштырырға аҙапландылар, хәҙер килеп Рауил Фәхретдинов исемле Ҡазан тарихсыһы Ҡазан төркиҙәрен татар-монголдар менән дә бәйләргә уйлай. Тик был «фәнни» сәбәләнеүҙең мишәр халҡына ниндәй ҡағылышы бар? Мишәрҙәрҙең тарихи тыуған иле бар. Бөгөн унда батша хөкүмәте урынынан ҡуҙғатып өлгөрмәгән мишәрҙәр йәшәй. Бер ыңғайҙан әйтеп китәйем: мишәрҙәрҙең тыуған илдәренән ҡуптарылғандары менән бөгөн дә үҙ ерҙәрендә йәшәгәндәре араһында ниндәйҙер бер психологик айырма бар.

Эйе, башҡорт халҡының яҙмышы татлы алма түгел. Уның үткәне бөйөк, ҡаһарман һәм фажиғәле булһа, хәҙергеһе иһә тотош бер фажиғә генә, бөгөнгөһөндә бер ҡаһарманлыҡ та юҡ.

1736 йылдың 2 октябрь төнөндә Тевкелевтың карателдәр отряды Балыҡсы волосының Сөйәнтус ауылын килеп баҫа. «...Близ 1000 человек с женами и детьми их в этой деревне перестреляно... сверх того, 105 человек собраны в один амбар и тут огнем сожжены», — тип яҙа шул фажиғәлә ҡатнашҡан, һуңынан тарихсы булып киткән, әммә колонизатор рухында ҡалған П. И. Рычков үҙенең «История Оренбургская» тигән китабында.

Халҡыбыҙ быуындан быуынға үҙ диалектынан ситкә тайпыла бара. 1990 йылдың июнендә үткән фәнни-практик конференцияла төньяҡ-көнбайышта балаларҙы диалектта уҡытыу маҡсатҡа ярашлы тип сығыш яһаныҡ. Бы-

ны ишетеп, Халыҡ мәғарифы министры Р. Гарданов миңә: «Әгәр был эште юлға һалып ебәрә алһаҡ, башҡорттарҙың бөгөнгө 21 процентына тағы 15 процент өҫтәләсәк», — тине. Беҙҙең тәҡдим конференция резолюцияһына инде, ләкин тейешле органдар эшкә тотонманы.

1991 йылдың 25—27 июнендә Бөрйәндә үткәрелгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының республика фәнни-практик конференцияһы резолюцияһына: «Республиканың төньяҡ һәм көнбайыш районларында үҙ туған телен, тарихын һәм мәҙәниәтен өйрәнеү өсөн шарттар булдырыу маҡсатында ошо төбәктә йәшәүсе башҡорттарҙы үҙ диалекты нигеҙендә уҡытыуҙы ойошторорға һәм дәреслектәр сығарыу өҫтөндә эште тиҙләтергә», — тигән тәҡдим инде.

Министр урынбаҫары М. Б. Юлмөхәмәтов ошо конференция тәҡдимдәре тураһында радионанмы, телевидениенанмы сығыш яһаны, дәреслектәр вәғәҙә итте һәм... онотто.

«Йәшлек» гәзитенә килгән хаттарға яуап бирер өсөн Башҡортостан Халыҡ мәғарифы министрлығы 1992 йылдың 9 октябрендә ошо мәсьәлә буйынса йыйылыш үткәрҙе. Ул йыйылышта ла диалектта уҡытыу кәрәк тип табылды.

Министр Р. Т. Гарданов менән ошо хаҡта һөйләшкәндә, ул: «Ғалимдар ҡаршы бит», — тине. Эйе, 15 октябрҙә (1992 йыл) «Йәшлек» гәзитендә йыйылыш ҡарары баҫылып сығыуы булды, 5—6 көндән һуң С. Сафуановтың «Афәтне булдырмыйк» тигән мәҡәләһе «Қызыл таң»да килеп тә сыҡты. Бында ул атаҡлы ғалим, тюрколог, башҡорт телен, тарихын өйрәнеүгә күп ғүмерен, көсөн һалған СССР Фәндәр академияһының член-корреспонденты, профессор Н. К. Дмитриевтың түбәндәге һүҙҙәре дөп-дөрөҫ икәнен генә иҫбатланы: «...Татаризация башкир в культурном и экономическом отношении входила в программу татарских националистов. Башкирам внушалось, что никакой башкирской культуры нет, что башкирский язык не язык, а испорченный диалект татарского языка, что на нем говорит только отсталая часть населения, а писать уж никак нельзя, писать можно только на татарском» (Грамматическая терминология в учебниках башкирского языка. М., 1955, 58-се бит). С. Сафуанов фекеренсә, әгәр халыҡ үҙ теленең ҡәҙерен белһә, афәт була.

Диалектта уҡытыуҙы индереү тураһында һүҙ сыҡҡанда, күбеһен иң ныҡ ҡурҡытҡаны — дәреслектәр. Ә кем ундай дәреслектәрҙе эшләр?

«Ата-бабалар яуға күтәрелгәндә бер-береһенең диалек-

тын тикшереп тормаған» тип аталған мәҡәләм 1991 йыл аҙағында «Йәшлек»тә донъя күргәс, бер иптәш мине ошо һүҙҙәре менән ғәжәпләндерҙе: «Һин был мәҡәләңдә татарҙарҙы башҡорт итеп күрһәткәнһең. Әгәр улар башҡорт булһа, үҙҙәренең башҡортлоҡтарын иҫбатларға мөмкинлек биргәндә, ниңә әҙәби башҡорт телендә уҡырға теләмәне?» — тине.

1585 йылда Минзәлә башҡорттары ихтилалға күтәрелгәндә кемгәлер башҡортлоҡтарын иҫбатларға түгел, ә башҡортлоҡ намыҫын яҡлап, Рәсәй менән төҙөлгән килешеүҙең батшалар тарафынан боҙолоуына ярһып яу сапҡан. Башҡортостан, урыҫтар дәүләтенә ҡушылғандан һуң, үҙ ҡандары менән башҡорт героикаһын яҙа, уларҙы етәкләрлек лидерҙары ла була.

1735—1737 йылғы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе Аҡай батырҙы ғына алайыҡ. Был яуға ул үҙенең улы Абдулла менән бергә күтәрелә. Ә үҙе 1704—1711 йылдар ихтилалы етәксеһе Күсемдең улы. Ә Күсемдең атаһы 1681—1684 йылдарҙағы ихтилалды етәкләгән өсөн язаланған Түлекәй... Күреүебеҙсә, Минзәлә башҡорттарының ҡаһармандар династияһы. Беҙ бына ошо ҡаһармандарҙың вариҫтарын башҡортлоҡтарын иҫбатлаһындар, тип серәшкәндә, бүтәндәр бер ҙә иҫбатлатып тормай, башҡорт халҡы тарихының биттәрен үҙенеке яһай ҙа ҡуя.

Беҙҙең бөгөнгө тормошобоҙ бер бәләкәй баланы иҫемә төшөрҙө: 2—3 йәшлек кенә Оля ата-әсәһенең унан 4 йәшкә оло ағаһына бер нәмә булһа: «Һин бит ҙур инде», — тип әйткәндәренән, ҙур булһаң, яуаплылыҡ та ҙурыраҡ икәнен үҙләштереп алып, шуҡлыҡтары өсөн әләгергә тейеш урында: «Оля — маленькая», — тип тора ине. Мин үҙебеҙҙе лә яуаплылыҡтан, халыҡтың киләсәге өсөн яуаплылыҡтан ҡасырға тырышып: «Оля — маленькая», — тип торғанға оҡшатам. Халыҡтың яртыһын үҙ аяғың менән ситкә «тибеп осор» ҙа: «Беҙ көсһөҙбөҙ, беҙ бәләкәйбеҙ», — тип тор, имеш. Был, бәлки, беҙҙең бер ваҡыт Урал арьяғында ҡаласағыбыҙға аҡланыу эҙләүҙер? Бәлки, быға ла күп ҡалмағандыр? Ҡемдеңдер һауалылығы, кемдеңдер аңралығы, кемдеңдер мәкере аша бәләкәйләнәбеҙ һәм, эш бөгөнгө быуын интеллигенцияһының халыҡ, тарих, халыҡтың киләсәге алдында үҙ ғәйебенән ҡурҡып ҡуш күреүендә генә түгел, ә бына ошо «Оля — маленькая» һымаҡ, бәләкәйлектең рәхәтен тойоп алып, бер ҙә үҙен көсәндермәй тыныс йәшәргә тырышыуында, тормош диалектикаһы — күплектә көс, күплектә сифат икәнен аңларға теләмәүҙә.

Тел уҡытыуҙың үҙ ваҡытында дөрөҫ юлын тапҡан, бөтәһе 300 мең генә булған мариҙар, тел айырымлығын иҫкә

алып, бер яҡ икенсе яҡты: «Телегеҙ һынмаҫ, уҡығыҙ беҙҙең телдә», — тип мәжбүриләмәй, тау мариҙары — үҙ телендә, ялан мариҙары үҙ телендә уҡып, үҙҙәрен бик һәйбәт һаҡланы. Беҙгә уларҙың был тарихи яҡтан отошло юлын ныҡлап өйрәнергә кәрәк.

Был төбәк башҡорттарына үҙ телдәрен, тарихтарын ҡайтарыу, үҙ ата-бабалары рухын рәнйетеү гонаһынан ҡотҡарыу өсөн бөгөндән ниндәй аныҡ эшкә тотонорға мөмкин? Быйыл гәйнә тарихына һәм теленә арналған фәнни-практик конференцияла Уса педучилищеһының татар теле уҡытыусыһы сығышын тыңланым. Ул педучилищеға уҡыусыларҙың Пермь өлкәһенең Барҙы районынан, Башҡортостандың Асҡын, Балтас, Тәтешле районадарынан йыйылыуын әйтте, һәм, уларҙың телен татар теле грамматикаһына яраҡлаштырғансы, сәстәр ағара инде, тине. Ә ниңә беҙ «татар теле» уҡытыусыларының сәсен ағартыр өсөн үҙебеҙҙең халыҡтың (башлыса гәйнә, балыҡсы, һун, таныпп ырыуы) балаларын үҙ әсәләренең телен өйрәнеү урынына Ҡазан төркиҙәренең әҙәби тел нормаларын ҡабул итергә ебәрәбеҙ? Бөтә Тәтешле районына бер мишәр ауылы ла юҡ, ә Асҡында — 2 генә, Ҡариҙелдә — 4—5 кенә. Бына шул райондарға яҡын урынлашҡан Благовещен, Нефтекама педучилищеларын ниңә алдағы уҡыу йылынан уҡ диалектта уҡытыуға күсермәҫкә? Дәреслектәр юҡмы? Бар! Бына улар:

**Баишев Т. Г.** Башкирские диалекты в их отношении к литературному языку. Изд. Московского университета, 1955.

**Аҙнабаев Ә. М., Псәнчин В. Ш.** Башҡорт теленең тарихи морфологияһы. Өфө, 1976.

**Миржанова С. Ф.** Северо-западный диалект башкирского языка. Уфа, 1991.

**Максютова Н. Х.** Восточный диалект башкирского языка в сравнительно-историческом освещении. Наука: Москва, 1976.

**Южноуральский археографический сборник.** Выпуск 2. Уфа, 1976.

Бына шулар. Әлбиттә, әгәр С. И. Руденконың «Башкиры» тигән китабын сығарғанда, барыбыҙға ла оло бүләк, байрам булыр ине. Шул китаптар нигеҙендә дәреслек төҙөргә кәрәк, тип әйтеүселәр булыр. Дәреслек төҙөүҙе көткәндә, беренсенән, ваҡыт уҙа, икенсенән, бындай фәнни хеҙмәттәрҙе дәреслек төҙөүселәрҙең ҡалыбына тыҡмай, студенттарҙы, уҡыусыларҙы ғилми хеҙмәттәрҙе үҙ аллы файҙаланырға өйрәтеү ҙә мөһим.

Был китаптар — ғилми хеҙмәттәр кәштәләрҙә осраҡлы

уҡыусыларын көтөп ятырға түгел, ә дәреслек урынына эшкә егелергә тейеш.

Киләсәктә диалектта уҡытасаҡ уҡытыусылар, 2—3 йыл уҡып, педучилищены тамамлағансы, иншалла, мәктәп балалары өсөн дәреслектәрҙең дә иң ҡулайлы варианты табылыр, тик конкурс ҡына иғлан ителһен.

Диалектта уҡытыуға әҙерлек һәм уҡытыу бер төптән көйләнгән тарихи-мәғрифәтселек эше менән бергә алып барылырға тейеш. Бары тик шул юл менән генә Башҡортостаныбыҙҙың яҡты киләсәгенә өмөт итә алабыҙ.

*1993*

*Марат ҠОЛШӘРИПОВ, тарих фәндәре кандидаты, БДУ доценты*

# ҠАЙЫРЫЛҒАН ҠАНАТ

## (ТӨНЬЯҠ-КӨНБАЙЫШ БАШҠОРТТАРЫНЫҢ МИЛЛИ ҮҘАҢ МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ ТУРАҺЫНДА)

Башҡорттарҙың этник үҙаңы формалашыуы уларҙың этник берләшеүе, берҙәм башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүе менән йәнәш бара. Был һығымта бөтә башҡорттарға ла — көнбайышта йәшәһендәрме, көньяҡтамы — ҡағыла. Ә бит ҡайһы берәүҙәр, имеш, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының электән милли үҙаңы түбән булған, улай ғына ла түгел, хатта уларҙа башҡорт милли хистәре булмаған, тип иҫбатларға тырыша. Әйҙәгеҙ, тарихи факттарға иғтибар итәйек. Иң башта шуны иҫтән сығарырға ярамай: төньяҡ-көнбайыш Башҡортостан, айырыуса Ағиҙел йылғаһының Ҡамаға яҡынлашҡан ерҙәре, этнограф Р. Ғ. Кузеевтың фекеренсә, башҡорт халҡының килеп сығышын тәьмин итеүсе этник процестарҙың төп һәм айырата боронғо районы булған. Башҡорт этносының тәүтөҙөлөш өлөштәренә юрмый, йәнәй, бүләр, танып, ирәкте, гәйнә, уран һ. б. ҡәбиләләр ҡараған, һәм улар боронғо башҡорт ерҙәренең көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәгән. Был ҡәбиләләр дөйөм башҡорт этносының айырылғыһыҙ өлөштәре тип иҫәпләнгән. Мәҫәлән, гәйнә башҡорттары (Яңауыл, Тәтешле райондары, Пермь өлкәһе) үҙҙәрен һәр ваҡытта ла «иң тәүге һәм боронғо башҡорттар» тип иҫәпләгән [1]. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттар борон-

---

[1] Башкирские предания и легенды. Өфө, 1985. 79-сы бит.

ғо дәүерҙән үк үҙҙәренең башҡорт этносына ҡарауҙарын таныған һәм был уларҙың риүәйәттәрендә, шәжәрәләрендә сағылыш тапҡан. Был мәғлүмәттәр ҡайһы бер татар әҙиптәренең (мәҫәлән, проф. Яхъя Абдуллиндың «Сиселмәгәп төйөндәр» мәҡәләһендә, «Ҡазан утлары», 1991, № 6) күрһәтелгән регион башҡорттарының татар булыуын, «тик ҙурыраҡ күләмдә ер алып ҡалыу маҡсаты менән ул саҡта өҫтөн хоҡуҡтарға эйә булған «башҡорт ҡатламына яҙылғандар», тип һығымта яһауын ҡәтғи кире ҡаға. Яхъя Абдуллин һәм ошо ҡараш тороусы башҡа татар эшмәкәрҙәре (Дамир Исхаков һ. б.) төрлө архив, статистик документтарҙы инҡар итәләр. XVIII быуатта үткәрелгән ревизия материалдарына ҡарағанда, Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында урынлашҡан ауылдарҙың этник составы анығ күрһәтелгән. Улар араһында башҡорт, татар, мишәрҙәр аралашып йәшәгән ауылдар, хатта йорт һандары асыҡ яҙып ҡалдырылған.

Төньяҡ-көнбайыш райондар башҡорттарының башҡортлоғон инҡар итеүселәргә яуаплап, тарихсы Әнүәр Әсфәндиәров, тарихи сығанаҡтарға ишара итеп, былай тип яҙғайны: «Был документтарҙа республиканың көнбайыш территорияһындағы һәр ауылдың этник составы асыҡ һәм теүәл күрһәтелгән. Уларҙа башҡорт аҫабаларының һәм уларҙың припущенниктарының (килмешәктәр, этәмбейҙәр) — яһаҡ түләүсе татарҙар, мишәрҙәр, типтәрҙәр, сыуаштар, мариҙар, удмурттар — һәр береһе айырып теркәлгән. Бер һүҙ менән әйткәндә, башҡорттар — башҡорт, татарҙар — татар, типтәрҙәр типтәр тип яҙылған. Башҡортостандың көнбайышында XVII быуаттың аҙағынан алып башҡорттар менән бергә татарҙар, мишәрҙәр һ. б. йәшәгән. Бөгөнгө көндә лә унда һәр бер ауылда башҡорттар һәм татарҙар йәшәй» [1].

Күреүебеҙсә, барлыҡ төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын, йәнәһе, сығышы менән татар булған тип һығымта яһау бер ниндәй ҙә тәнҡитте күтәрмәй. Был фекерҙең нигеҙендә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли үҙаңын емергә ынтылыу, уларҙы башҡа башҡорттарға ҡаршы ҡуйыу ғына ята. Башҡорттарҙың берләшеүенә, милли үҙаңы үҫеүенә уларҙың монгол-татар иҙеүенә ҡаршы көрәше, тыуған ере — Уралға булған һөйөүе ярҙам иткән. Барлыҡ башҡорттар ҙа үҙ ваҡытында Алтын Урҙаның иҙеүенә ҡаршы дәррәү сығыш яһаған.

Артабан башҡорттарҙың үҙ этник берлеген таныуы

---

[1] Әсфәндиәров Ә. Көнбайыш башҡорттары. 1795, 1834 йылдарҙағы V һәм VIII ревизия материалдары. Ағиҙел, 1988. № 11. 76-сы бит.

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы процесында нығынған. Мәçәлән, 1554 һәм 1558 йылдарҙа көнбайыш башҡорттары рус подданныйлығын ҡабул иткән. Яңауыл районы башҡорттары риүәйәттәрендә гәйнә ҡәбиләһе башлығы Айсыуаҡтың, Ҡазанға барып, батша наместнигынан грамота алыуы хаҡында бәйән ителә.

Башҡортостан үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң, башҡорт халҡының Ҡазан, Себер һәм Нуғай ханлыҡтары тарафынан төрлө өлөштәргә бүленеүенә сик ҡуйыла. Ә был башҡорттарҙың берҙәм территорияла артабан этник берләшеүе өсөн ҡулай шарттар тыуҙыра.

Милли үҙаң, берҙәм башҡорт халҡы идеяһы батшалыҡтың милли-колониаль иҙеүенә ҡаршы көрәштә XVII—XVIII быуаттарҙағы ҡеүәтле башҡорт ихтилалдарында ныға. Бындай халыҡ хәрәкәттәрендә барлыҡ башҡорттар ҙа — көньяҡ-көнсығыш һәм төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш һәм көньяҡ башҡорттары ла ҡатнаша. Мәçәлән, 1681—1683 йылдарҙа Сәйет Садиир етәкселегендә Ҡазан юлы, хәҙерге Татарстандың Минзәлә районы башҡорттары баш күтәрә. Был ихтилал барлыҡ башҡорттар тарафынан да күтәреп алына. Ошондай уҡ хәл 1704—1711 һәм 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдары барышында ҡабатлана. 1755 йылда иһә милли иҙеүгә ҡаршы бөрйән башҡорттарының күтәрелеүенә теләктәшлек белдереп, Башҡортостандың төньяҡ райондарында йәшәүсе гәйнә башҡорттары берҙәм баш күтәрә. Ошоға бәйле рәүештә шуны айырып әйтеү кәрәк: ҡайһы бер Ҡазан тарихсыларының һәм этнографтарының (мәçәлән, Д. Исхаҡов һ. б.) йәнәһе, Көнсығыш Кама арьяғы башҡорттарының ырыу-ҡәбилә булып ойошоуы күп тигәндә XVI—XVIII быуаттарға ҡарай, улар хатта XIX быуат аҙағында ла үҙаңға эйә булмаған һәм шуға күрә лә уларҙы, татар этносына ҡарай тип иçәпләп була, тиеүҙәре бер ниндәй ҙә һыҙыҡҡа һыймай.

Бындай ҡараштың бер төрлө лә нигеҙе юҡ. Тарихи факттар быны киреһен һөйләй. Көнбайыш башҡорттары революцияға тиклемге дәүерҙә үк һәр ваҡыт үҙаңдарын тотороҡло рәүештә һаҡлаған, йәғни үҙҙәренең тап башҡорт этносына ҡарауын асыҡ аңлаған, был турала уларҙың әбей батша Екатерина II-нең Яңы Уложение проекты төҙөү буйынса Комиссияһына биргән наказдары яҡшы һөйләй. Был наказдар Гәйнә волосының Уса юлы старшинаһы, Екатерина комиссияһы депутаты Туҡтамыш Ишбулатовҡа тапшырылған. Ул, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының дөйөм фекерен белдереп, 1767 йылда Комиссия ултырышында «башҡорт ерҙәренә ҡасып килеүсе татарҙар»ға,

аҫаба башҡорттарҙың ерһеҙ ҡалыуына килтереүсе дәррәү күскенселеккә сик ҡуйыу кәрәклеге тураһында һөйләй. Ишбулатовтың башҡорт старшиналары эргәһендәге татар яҙмасыларын башҡорттар менән алмаштырыу тураһында талабы ла ҡыҙыҡлы. Үҙенең был дәғүәһен ул «башҡорт халҡы араһында хәҙер белемле кешеләр ярайһы күп» тигән һүҙҙәр менән дәлилләй [1].

Әммә XIX быуатта күпселеге татар сығышлы муллаларҙан торған Мосолман диниә назаратының эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Башҡортостанда аҡрынлап ассимиляция процестары башлана. Батша хөкүмәте аңлы рәүештә мөфти вазифаһына кешене башҡорт муллаларына ҡарағанда күпкә ышаныслыраҡ тип һаналған татар феодалдары араһынан билдәләй. Һөҙөмтәлә башҡорт ауылдарында, айырыуса көнбайыш райондарҙа, татар муллалары уҡытҡан мәҙрәсәләр асыла, татар телендәге дини һәм ярым дини китаптар таратыла. Был шарттарҙа төньяҡ-көнбайыш башҡорттары аҡрынлап башҡортсанан татар һөйләше теленә күсә. Әммә XIX быуатта һәм хатта XX быуатта ла төньяҡ-көнбайыш башҡорттары үҙ туған телендә лә бынамын итеп һөйләшә белә.

Быны хәҙерге Тәтешле районында тыуған күренекле башҡорт шағиры мәғрифәтсе Ғәли Соҡорой (1826—1889) һәм уның улы тарихсы һәм публицист Ғарифулла Ҡейеков (1861—1918) ижадтарында асыҡ күрергә була. Ғәли Соҡорой үҙенең «Манзумати Ғәлиә» («Ғәлиҙең шиғри йыйынтығы») исемле ҡулъяҙма китабына яҙған баш һүҙендә үҙенең сығышы тураһында «беҙ урман башҡорто булабыз» тип күрһәтеп үтә. Башҡа әҫәрҙәрендә лә, үҙе төҙөгән шәжәрәһендә лә Ғ. Соҡорой үҙенең ҡаратабын башҡорт ырыуынан сығыуын һәр саҡ һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Ә уның улы Ғарифулла Ҡейеков татар руханиҙарының башҡорт теленә, милли мәҙәниәтенә булған кире ҡараштарын тәнҡитләп, былай тип яҙа:

Бер аҙ әйбәт (бәйет) уҡыр булсам,
Теле башҡорт, нәдар (ярлы), дирләр;
Басынҡы, сабыр идәр булсам,
Тәкәбберлек идәр, дирләр.

1909 йылда «Шура» журналы уҡыусыларҙы әҙәби тел тураһында фекер алышырға саҡырғас, Ғ. Ҡейеков, баш-

---

[1] ЦГИА. Ф. Комиссия по составлению проекта Нового уложения. д. 109. Пол. 214.

ҡорт әҙиптәренән беренселәрҙән булып, туған теленең үҙаллылығын ҡурсалап сығыш яһай. «Һәр халыҡтың үҙ туған теле бар. Беҙгә бүтән тел менән оҫтарып һөйләшергә ниңә көсәнергә?» — тип һорау ҡуя ул үҙенең «Тел сабыштырыу» исемле мәҡәләһендә [1].

Ошо факттарҙан сығып, Яхъя Абдуллиндың Ғ. Соҡоройҙы һәм башҡа башҡорт зыялыларын иҫкә алып, башҡорт ғалимдарын башҡорт милли әҙәбиәтен улар иҫәбенә киңәйтергә маташыуҙа ғәйепләүе һис тә нигеҙле тип әйтеп булмай.

Милли үҙаңдың сағылышын беҙ шулай уҡ мәшһүр башҡорт шағиры Шәйехзада Бабич (хәҙерге Дүртөйлө районы Әсән ауылында тыуған) ижадында ла асыҡ күрәбеҙ. Ул әле Октябргә тиклем үк башҡорт телендә шиғырҙар яҙған, ә уның шиғриәтендә башҡорттарҙың милли өмөттәре, азатлыҡҡа ынтылышы, ирек яратыуы, тыуған еренә булған һөйөүе бик көслө сағылдырылған. Ш. Бабичтың Башҡортостан йөмһүриәтенең татар дошмандарына арнап яҙылған шиғырҙар циклы иғтибарға лайыҡ. Уларҙа шағир башҡорт халҡының үҙбилдәләнешенә ҡаршы сығыш яһаусы татар милләтселәрен ҡаты фашлай. «Башҡортостан мөхтәриәтенә ҡаршы татарға» шиғырында татар милләтселәренең берҙәм Татар-Башҡорт республикаһы өсөн агитация алып барыуын фашлап, былай тип яҙғайны:

Ҡушыл беҙгә башҡорт, тигән менән,
Айырылһынмы башҡорт милкенән?
Йәшел сапан, сәллә кейһәгеҙ ҙә,
Төлкөлөгөң мәғлүм һыртыңдан!!!

Шул уҡ татар шовинистарын, башҡорттарҙы бөтөрөү сәйәсәтен үткәргәндәре, уның үҙаллылығын, үҙбилдәләнешкә хоҡуғын инҡар иткәндәре өсөн, Ш. Бабич: «Әле булһа күңелегеҙ ҡалды ҡәберҙәй тар булып», — тип ҡәһәрләй.

Үҙ халҡы өсөн сикһеҙ ғорурланып, ул: «Беҙ үҙебеҙ — башҡорттар, күп ырыуға баш йорттар», — тип яҙҙы. Уның башҡорт халҡына булған оло мөхәббәте, үҙ халҡы менән ғорурланыуы уның тойғолары «Башҡортостан» шиғырында бигерәк тә асыҡ күренә:

Арыҫландар өсөн ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Тапайым, тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ:

---

[1] Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Өфө, 1990. II том, 294, 296-сы биттәр.

Ил өҫтөндә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ.
Бысраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ!!!
Башҡортостан — гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан;
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!

Башҡорт халҡының киләсәгенә ныҡ ышанып, уның ассимиляцияға бирешмәйәсәген күрһәтеп, башҡорт милли хәрәкәтенә мөрәжәғәт итеп, Ш. Бабич «Мин башҡорт!» — тип һөрәнләгәс, барлыҡ халыҡ ҡалды хайранға. Уйлай әле улар башҡорт халҡын, үлем иҫереклеге тотҡан тип, йәмле ерен уның урыҫ баҫҡан, башҡортлоғон татар йотҡан тип» белдерҙе. «Башҡортостан иҫән ҡала, тиһәң, бер йәнемә миллион үлем бир!» тигән юлдарҙы шағирҙың үҙаңы, сығышы тураһында бәхәсләшергә һис тә урын ҡалдырмай.

Өҫтәп шуны әйтке килә. Бәғзе бер татар әҙиптәре Ш. Бабичты татар шағиры итеп күрһәтмәксе. Үрҙә әйтеп кителгән Яхъя Абдуллин да Бабичты татар шағиры итмәксе[1].

Р. Ғ. Ҡузеев яҙыуынса, «Башҡортостандың көнбайыш районДарында татар телендә әүҙем эшләүсе мәктәп, матбуғат һәм әҙәбиәт» көнбайыш башҡорттарын «татар этник йоғонтоһона дусар итә»[2]. Яҙыусы Вил Ғүмәров «Совет Башҡортостаны» гәзитендә билдәләүенсә, «Уралда башҡорт булыу маҡтаулы һаналған, сөнки башҡорттар аҫаба булған, йәғни ер биләү мәсьәләләрендә өҫтөнлөктәр менән файҙаланған. Шуға күрә лә революцияға тиклемге дәүерҙә башҡорттар тотороҡло рәүештә үҙҙәренең милли үҙаңын һаҡлаған, ассимиляцияға аҙ бирелгән».

Үкенескә ҡаршы, Октябрҙән һуң башҡорттарҙың милли үҙаңы етди һынауҙарға дусар булған. Был уларҙың автономия өсөн көрәше менән туранан-тура бәйле. Зәки Вәлиди етәкселегендәге башҡорт хөкүмәте, аҡ башҡорт корпусы йөҙөндә башҡорттарҙың байтаҡ өлөшөнөң аҡтар лагерында булып сығыуы һөҙөмтәһендә 1919 йылда башҡорттар контрреволюцион халыҡ итеп иғлан ителә. Ә 1917 йылда Советтарҙың II съезы тарафынан ҡабул ителгән ер тураһындағы декрет башҡорттарҙың аҫабалыҡ (вотчин-

---

[1] Абдуллин Я. «Сиселмәгән төйөндәр». Ҡазан утлары, 1991. № 6. 164-се бит.

[2] Кузеев Р. Г. Историческая этнография башкирского народа. Өфө, 1979. 244-се бит.

ное) хоҡуғын юҡҡа сығара. Шуға күрә лә үҙеңде башҡорт һанау ҡулайлы ғына түгел, хатта ифрат хәүефле лә була башлай.

«Башҡорт милләтселәре»нә ҡарата үткәрелгән Сталин репрессиялары иһә башҡорттарҙың хәлен тағы ла ҡатмарлаштырып ебәрә. Милли үҙандың һәр төрлө кәүҙәләнеше милләтселек күрһәткесе тип иҫәпләнә башлай. Өҫтәүенә, Башҡортостандың пропаганда аппаратының барса ҡеүәте башҡорттарҙың үҙ-үҙен кәмһетеп ҡарауын тыуҙырыуға ҡорола. Революцияға тиклем башҡорттарҙың ғәҙәттән тыш артта ҡалыуы, үҙ яҙмаһы, әҙәби теле булмауы, хатта үлемгә дусар булыуы тураһында ныҡышмалы рәүештә һүҙ ҡуйыртыла, халыҡ аңына һеңдерелә.

Өҫтәүенә, 30-сы йылдарҙа башҡорттар йәшәгән ауылдарҙа мәктәптә татар telендә уҡытыу индерелә башлай. Был иһә дөйөм алғанда төньяҡ-көнбайыш райондарҙа йәшәгән башҡорттарҙың ассимиляцияһын көсәйтә. Улар телен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәтен онота башлай. Көнбайыш башҡорттарына бөгөн дә «һеҙҙең сығышығыҙ татар» тигән фекер һеңдерелә.

Был эштә Ҡазан ғалимдары — тарихсылары, телселәре, этнографтары, шағирҙары ҙур тырышлыҡ күрһәтә. Һуңғы ваҡытта был эшкә «Ҡазан утлары» журналы, «Шәһри Ҡазан», «Татарстан яшьләре», беҙҙең Башҡортостанда сыҡҡан «Ҡызыл таң» гәзиттәре ныҡлап тотондо. Күрһәтелгән баҫмаларҙа даими рәүештә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының башҡорт булыуын шик аҫтына ҡуйған мәҡәләләр донъя күреп тора. Әлбиттә, был иҫ китмәле ҡаты баҫым һөҙөмтәһеҙ ҡалмай. Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарында, һуңғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, башҡорттарҙың һаны ныҡ ҡына кәмегән. Был процесс башҡорт халҡының киләсәгенә ярайһы уҡ шом һала. Беҙ «игеҙәктәр», аҙым һайын «беҙ ҡан ҡәрҙәштәр» тип, башҡорттоң башҡорт булыуын шик аҫтына ҡуйыусылар ошо процесты тағы ла тиҙләтергә теләй. Әйтәйек, 1979 йылғы халыҡ иҫәбен алыу материалдарын ҡарағанда, Борай һәм Балтас райондарында башҡорттар — 73, Благовар һәм Яңауыл райондарында — 45, Дүртөйлө һәм Кушнаренкола — 38, Саҡмағош районында — 34% тәшкил иткәндәр. Ә һуңғы мәғлүмәттәр буйынса хәл икенсе яҡҡа үҙгәргән: Балтас районында башҡорттар ни бары — 22, Борайҙа — 34,5, Благоварҙа — 7,8, Яңауылда — 36,3, Дүртөйлө районында — 24,2, Кушнаренкола — 5,5, Саҡмағош районында — 18,7% ҡалған. Был һандар үрҙә күрһәткән райондарҙа башҡорттарҙы ассимиляциялау процесының ныҡ көсәйеүен күрһәтә.

Октябрь революцияһына тиклем, 1897 йылғы халык иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, һаналған районлар ингән Бөрө өйәҙендә башҡорттар 53,1, татарҙар — 0,5, мишәрҙәр — 0,4, типтәрҙәр — 0,09% тәшкил иткән. Ә Бәләбәй өйәҙендә башҡорттар, дөйөм алғанда, — 53,8%, татарҙар — 11,3, мишәрҙәр — 0,6, типтәрҙәр — 1,6% булған. Хәҙерге көндә башҡорт һәм татарҙар араһындағы һан нисбәте һуңғылар файҙаһына үҙгәрә. Шуға күрә Башҡортостанда татарҙарҙы башҡортлаштырыу бара, тип саң һуғыу күрәләтә алдашыуға ҡоролған. Һүҙ ҙә юҡ, барса көнбайыш башҡорттары ла милли үҙаңын аҙаҡкаса юғалтмаған. Миҫалға Асҡын районы Ҡашҡа ауылынан Венера Ғәлиәхмәтованың хатын килтерәм:

«Ҡолшәрипов иптәш! «Башҡортостан ҡыҙы» журналының июль һанында һеҙҙең гр. Ҡ. Нуритдиновтың хатына яҙған яуабығыҙҙы уҡыным да (ҡарағыҙ: Башҡортостан ҡыҙы, 1989, № 7, 6—7-се биттәр) ирекһеҙҙән һеҙгә яҙырға булдым, сөнки был хатта беҙҙең турала йәки Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш райондарында йәшәүсе башҡорттар тураһында әйтелә. Хатты бик ауыр кисерҙем, сөнки мин Башҡортостандың бер төпкөл райондарының береһе Асҡында Ҡашҡа ауылында тыуып үҫтем. Беҙҙең мәктәптә туған тел сифатында татар теле уҡытылды. Башҡортостанда йәшәнек, ә татар халҡының тарихын, мәҙәниәтен өйрәндек, кластарҙа татар яҙыусыларының, шағирҙарының портреттары элеүле торҙо. Беҙ, аптырап, күп тапҡырҙар «туған тел» уҡытыусыларынан һорай инек: ни эшләп беҙ татар телен өйрәнәбеҙ, беҙ бит башҡорттар? Тик һорауға яуап ала алманыҡ. Миңә 28 йәш, уның 18-ен Башҡортостанда йәшәнем, тик йүнләп башҡорт яҙыусылары, шағирҙарын белмәйем, шул уҡ ваҡытта татар әҙәбиәтенең классиктарын яттан беләм.

Ғ. Әбсәләмовты ғына алайыҡ. Уның «Аҡ сәскәләр», «Мәңгелек кеше», «Бөркөттәр» романдары. Уларҙы һәр ваҡыт ҡул аҫтында тотам. Әгәр ҙә үҙ ваҡытында беҙҙең мәктәп китапханаһында башҡорт китаптары ла булһа, башҡорт яҙыусыһы З. Биишеваның романдары менең мөхәббәтемде яуламаҫтар инеме ни?!

Яҙыуы ла оят, Башҡорт академия драма театрының ижады менән 1988 йылда театр беҙҙә, Силәбелә, гастролдә йөрөгәндә генә таныштым. 15 көн буйына театрҙың бөтә спектаклдәрен дә тын да алмай ҡараным, бына ошонда мин беренсе тапҡыр башҡорт мәҙәниәте менән осраштым. Артистарҙың ҙур булмаған труппаһы менән әңгәмәмдән шуны аңланым: минең һөйләшеү телем башҡорт теленә лә, татар теленә лә инмәй икән. Актерҙар юмор менән: «Урта-

са, гибрид тел», — тип һығымта яһанылар. Үҙҙәрен паспорт буйынса ғына түгел, рухтары менән башҡорт тип һанаусы минең ауылдаштарым, шулай уҡ яҡын-тирәләге башҡа ауылдарҙа йәшәүселәр ошо телдә һөйләшә.

Ҡемдәр һуң беҙ — «төньяҡ-көнбайыш башҡорттары»?

Ни эшләп беҙгә татар телен уҡыттылар, ни эшләп татар телмәрен, мәҙәниәтен пропагандаланылар, ә аҙаҡҡы сиктә беҙҙе мәҙәниәтһеҙ наҙан ҡалдырҙылар, туған башҡорт телендә һөйләшеүҙән мәхрүм иттеләр? Бына ошо «ни эшләп» миңә нисә йылдар инде тынғы бирмәй. Ҡем ғәйепле: элекке Башҡортостандың Мәғариф министрлығымы, әллә Мәҙәниәт министрлығымы? Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: Сирия, ғәрәп республикаларында булған Башҡорт драма театры үҙенең 70 йыл йәшәү дәүерендә беҙҙең Асҡын районына гастроль менән килергә үткән йылдың июль айында ғына форсат тапты. Үҙебеҙҙең телде, мәҙәниәтте белмәүебеҙ ошонан түгелме ни? Ә бит күрше Татарстандан, Пермь, Свердловск (Екатеринбург) өлкәләренән һәр йәй һайын үҙешмәкәр театр коллективтары концерт менән килә.

Бәлки, юғарыла ла гр. Нуритдинов яҙған кеүек уйлайҙарҙыр: элек был ерҙәр Ҡазан ханлығына буйһонған, шулай булғас, уларҙы Татарстан ҡараһын? Ҡайҙан килеп сыҡҡан бындай битарафлыҡ? Былар ҙа сталинизмдың мираҫымы?

Бәлки, Һеҙ, хөрмәтле тарихсы, яуап бирерһегеҙ?

Сәләм менән Венера Ғәлиәхмәтова.
Тимер юл училищеһы директорының кадрҙар буйынса ярҙамсыһы. Силәбе ҡалаһы».

...Был һорауҙарға беҙ яуаптарҙы халҡыбыҙ һәм хөкүмәтебеҙ менән бергәләп эҙләргә, милли проблемаларыбыҙҙы үҙ дәүләтселегебеҙҙә уртаға һалып хәл итергә тейешбеҙ, тип уйлайым мин.

*1994*

*Рәшит ШӘКҮР, яҙыусы, филология фәндәре кандидаты*

## АССИМИЛЯЦИЯНАН НИСЕК ҠОТОЛОРҒА?

Көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын, шулай уҡ Пермь һәм Свердловск өлкәләрендә йәшәүсе милләттәштәребеҙҙе, этнос булараҡ, артабан да ниндәй яҙмыш көтөүе үҙ автономиябыҙ ерендә генә булһа ла, берләшергә те-

ләүсе башҡорттарҙы ла, шулай уҡ Татарстанда ла, Башҡортостанда ла тамыр йәйгән татар хәрәкәте ағзаларын да борсой. Беҙҙең республика, иң тәүге нәүбәттә уның етәкселек итеүсе органдары, көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының көслөрәк һәм йылғырыраҡ халыҡ араһында ассимиляцияға бирелеүенә юл ҡуя килеп, бик оҙаҡ ваҡыт инде төп халыҡ өсөн мөһим был мәсьәлә хәл ителмәй.

Башҡорт халҡының был ҙур ғына өлөшөнөң фажиғәле яҙмышына бәйле шундай сағыштырыу килтерәм. Бик оҙаҡ ваҡыт үткәрелгән ассимиляция сәйәсәтенән һуң да был өлөш бер нисә йөҙ мең кеше тәшкил итә, был һанды үҙҙәренең автономияһын төҙөгән тотош халыҡтарҙың — бүрәттәрҙең, ҡалмыҡтарҙың, ҡарағалпаҡтарҙың һаны менән сағыштырып була, туғандаш алтай һәм тува халыҡтары һанынан ул әллә нисә тапҡырға күберәк. Был ҙур региондағы башҡорттарҙың милли тел йәһәтенән күргән афәтен күҙ алдына килтереүе бынан һуң ҡыйын түгел. Бөйөк рус шағиры А. С. Пушкин «Ҡапитан ҡыҙы» повесында теле һәм ҡолаҡтары ҡырҡылған, элекке ихтилалдарҙа ҡатнашҡан өсөн ғәрипләндерелгән ҡарт боласы башҡорт образын һынландырған. Емельян Пугачев һәм Салауат Юлаев етәкселегендә халыҡ яңынан күтәрелгәс, ҡәлғәне боласылар яулап алғас, ҡанәскес комендантты дарға аҫыу өсөн ҡарт башҡорт йәштәрсә етеҙлек менән барып баҫа. Символик күренеш. Башҡорттоң телен ҡырҡҡандар, әммә көрәшкә ихтыярын һындыра алмағандар. Егерменсе быуатта иһә тотош халыҡтарҙың үҙаңын бөтөрөү, телен йолҡоу башҡа төрлө ҡатмарлыраҡ ысулдар менән, дуҫлыҡ һәм интернационализм тураһындағы саҡырыуҙарға ышыҡланып, башҡарыла. Уйлап ҡараһаң, иҫ китерлек: 50—60 йыл эсендә 70-ләп, 90-лап халыҡ юҡҡа сыҡҡан, һуңғы йылдарҙа ғына рухи яңырыу кисергән Ҡырым татарҙары, дөрөҫөрәге, Ҡырым төрөктәре, бөтөү алдында тора. Себер һәм барабин татарҙары үҙҙәрен үҙ аллы халыҡ тип тоя башланы, телеуттарҙың телеут булғыһы килә, эргәбеҙҙә элек-электән мишәрҙәр йәшәй, иҫәпләмә ваҡытында Ҡазан татарҙарынан боронғораҡ был халыҡҡа үҙ милләте исеме менән теркәлергә рөхсәт итмәнеләр. Татарстандың Минзәлә, Сәрмән, Бөгөлмә ерҙәренән алып Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш райондарына хәтлемге урындарҙа борон-борондан йәшәүсе башҡорттарҙың да яҙмышы шундай уҡ. Бер өлөшө күрше республикала ҡалған тотош бер өлкә был. Башҡортостандың көнбайышындағы башҡорттар менән булған бөгөнгө хәл — был халыҡты ассимиляциялаштырыуҙың икенсе этабы. Тәүге

этап 1920 йылда Минзәлә һәм Бөгөлмә өйәҙҙәрен Татар АССР-ына ҡушыу ваҡытында башлана. Минзәлә башҡорттары ғына ла ул саҡта 200 мең кеше булған, ә тотош Татарстанда 355 772 башҡорт йәшәгән [1]. Ошоно иҫәптә тотоп, баҡтиһәң, Татар милли республикаһына Татар-Башҡорт тигән исем бирелгән булған икән. Һәм быны «Совет Башҡортостаны территорияһынан ситтә ҡалып, Татар республикаһына ингән башҡорттар республиканың бары тик татар милләте исеме менән генә аталыуына ҡаршы сығыр» [2], тигән уйҙан сығып эшләгәндәр. Мәсьәләне хәл итеү буйынса Башҡорт республикаһы вәкилдәре ярҙамға килә. 1920 йылдың 17 ғинуарындағы ғаризаларында улар, «Совет Башҡортостанын Татар-Башҡорт республикаһы составына индерергә, башҡорттарҙы ассимиляциялаштырыуға теләүҙә татарҙарҙы ғәйепләүгә урын ҡалмаһын өсөн» [3], Татар республикаһы тигән исем менән сикләнергә үтенә.

Киң күңеллелектәре һәм ышаныусанлыҡтары башҡорттарға ҡиммәткә төшә. 1926 йылдағы иҫәпләмәлә үк, ни бары 6 йыл үтеүгә, Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттары Татар АССР-ы картаһынан тулыһынса юҡҡа сыға. Башҡорттар башҡа халыҡтар араһында һан яғынан өҫтөнлөк алып торған, халҡы һәм территорияһы буйынса ҙур урынды биләгән регион башҡорт халҡының милли үҫешенән бөтөнләй ситтә ҡалған. Әле болғарҙар заманында уҡ донъяға боронғо бөйөк башҡорт шағиры Ҡол Ғәлиҙе биргән көнбайыш башҡорт ҡәбиләләре һәм ырыуҙары төйәгендә Риза Фәхретдинов, Мансур Солтанов, Фазыл Туйкин, Афзал Таһиров һуңғы могикандарҙан булды.

1897 йылдағы иҫәпләмә буйынса башҡорттарҙың һаны 1 млн 409 мең кеше иҫәпләнә һәм уларҙың күпселеге, шулай уҡ бөтә көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттары ла, туған теле итеп башҡорт телен һанай. XX быуаттың 20-се йылдарында нимә булған һуң улар менән? Беренсенән, башта әйткәнемсә, 20-се йылдар уртаһында Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттарын бер киҙәнеүҙә юҡ иткәндәр. Йәнәһе, ундай боронғо һәм үҙенсәлекле халыҡ булмаған да. Икенсе яҡтан, улар үҙҙәренең башҡорт икәнен һаман да онотмаған. Беҙҙең фән һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, шул иҫәптән мин дә, ул районларҙа күп тапҡыр булғаныбыҙ һәм был турала күп ишеткәнебеҙ бар.

---

[1] Образование Башкирской АССР // Сб. документов. Уфа, 1959. 521-се бит.

[2] Шунда уҡ. 521-се бит.

[3] Шунда уҡ.

Әммә нисек кенә булмаһын, Минзәлә һәм Бөгөлмә башҡорттарын статистика бер нисек тә сағылдырмай, күрәһең, татар дуҫтар был процесты тамамланған тип уйлай.

Икенсенән, Сталин репрессиялары йылдарында башҡорттарҙы ассимиляциялаштырыуҙың яңы этабы башлана, хәҙер инде Башҡортостандың көнбайышында һәм төньяҡ-көнбайышында. Минзәлә — Бөгөлмә өлгөһө лә бында хеҙмәт итә. Бөтә драматик буталыштары, ҡайһы саҡта уңышҡа ла өлгәшеүҙәре менән был тарих әлеге көндә лә дауам итә.

Был процестың айырым деталдәрен, башҡорттарҙың үҙҙәрен һаҡлап ҡалырға тырышыуҙарын ентекләп һөйләп тормайым. Мәсьәләне махсус рәүештә өйрәнергә кәрәк. Әммә уға бер аҙ асыҡлыҡ индереүсе бер бик мөһим документҡа туҡтап китмәй булдыра алмайым. Мин Татар автономиялы республикаһын ойоштороусыларҙың береһе, татар революционеры С. Сәйет-Ғәлиевтың «Ленин һәм Башҡортостан», «Ленин һәм Татарстан» тигән документтар һәм материалдар йыйынтығында баҫылған иҫтәлектәрен күҙ уңында тотам.

С. Сәйет-Ғәлиев, 1920 йылда татар коммунистарының В. И. Ленин менән осрашыуын хәтеренә төшөрөп, былай тип яҙа: «Бәләкәй Башҡортостандан ситтә ҡалған һәм, беҙҙең уйыбыҙса, Татар республикаһына инергә тейешле булған башҡорттар мәсьәләһенә ҡағылышлы рәүештә, беҙ Ильичты, татарҙар һәм башҡорттар араһында айырма юҡ тиерлек, тип ышандырырға тырыштыҡ. Быға ҡаршы Ильич яҡынса ошондай мәғәнәләге бер нисә һорау бирҙе:

— Татарҙар һәм башҡорттарҙың телендә йә иһә һөйләштәрендә айырма бармы?

— Бар, әммә бик аҙ ғына һәм крәҫтиәндәр араһында ғына, — тип яуапланыҡ беҙ...

Шул саҡ Ильич ошондайыраҡ һорау бирҙе:

— Ә кем һуң яңыраҡ ҡына башҡорт ауылдарынан татар мөғәллимдәрен һәм муллаларын, колонизатор элементтары тип, туҡмап, ҡыуып сығарҙы, башҡорт интеллигенцияһымы әллә крәҫтиәндәр үҙҙәреме?

Хәҙер беҙ татарҙарға ҡарата дошманлыҡ шовинистарса фекер йөрөтөүсе башҡорт интеллигенцияһының тар даирәһендә генә бар тип күрһәтергә тотондоҡ.

— Әлбиттә, — тинек беҙ, — быны крәҫтиәндәр эшләгән, әммә башҡорт интеллигенцияһының өгөт-нәсихәте арҡаһында.

— Ә кем башҡорт крәҫтиәндәренән полктар һәм бригадалар ойошторҙо һәм теләһә кемгә ҡаршы яуға алып бара алды?

— Шул уҡ башҡорт интеллигенцияһы, — тинек беҙ төшөнкө тауыш менән.

Бер нисә секундҡа әңгәмә өҙөлдө. Беҙ тынып ҡалдыҡ, сөнки артабан барыр урын юҡ ине. Ильич беҙҙе «мөйөшкә ҡаратып» ҡуйҙы. Ошо өс һорау менән Ильич беҙгә әле генә азатлыҡ алған сағыштырмаса көслөрәк бер милләттең икенсе бер көсһөҙөрәк халыҡҡа ҡарата изгелек ҡылыусы ролен уйнарға, бигерәк тә уның теләгенә ҡаршы ниндәйҙер эш башҡарырға тейеш түгеллеге тураһында шәп һабаҡ бирҙе».

Ни әйтәһең, ысынлап та, һабаҡ алырлыҡ әңгәмә. Унда Лениндың башҡорт ауылдарында крәҫтиәндәр татар мөғәллимдәре һәм муллаларын, колонизатор элементтары, тип ҡыуып сығарыуы тураһындағы һүҙҙәре иғтибарҙы йәлеп итә. Тимәк, уға бындай факттар билдәле булған.

Артабан башҡорттар ассимиляцияны үткәреүсе төп көстәрҙән — татар хәлфәләренән ҡотолорға кәм тигәндә ике тапҡыр тырышып ҡараған: 30-сы, һуңынан 70-се йылдарҙа БАССР-ҙың көнбайышында һәм төньяҡ-көнбайышында урынлашҡан тарихи башҡорт ауылдарында башҡорт әҙәби телен өйрәнеү, ҡайһы бер саҡта ошо телдә уҡытыу индерелә. Әммә ике тапҡырында ла хәл башҡорттарҙың үҙҙәренә ҡаршы борола. Һуңғыһында М. З. Шакировтың «башҡорт шовинизмы, Башҡортостанда татарҙарҙы башҡортлаштырыу алып барыуы» тураһында миф, әкиәт үҙенекен итте. Ошондай дезинформацияны КПСС Үҙәк Комитеты секретары Е. К. Лигачев эләктереп алды, үҙәк гәзиттәр һәм журналдар, шул иҫәптән «Дружба народов», «Правда», «Московские новости» һәм башҡалар донъяға таратты. Шулай итеп башҡорттарҙың милли-тел берлеге мәсьәләһендә яңы ҡыйынлыҡтар килеп тыуҙы.

Көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш регион тураһында һөйләгәндә, башҡорттарҙың милли үҫеше өсөн ҙур эш алып барған ошо яҡ вәкилдәрен айырым билдәләп үтергә кәрәк. Гәйнә башҡорттары, мәҫәлән, Туҡтамыш Ишбулатов һәм Исмәғил Тасимов исемдәре менән ғорурланырға хаҡлы. Улар икеһе лә XVIII быуатта йәшәгән, тәүгеһе Екатеринаның Уложенный комиссияһы депутаты, үҙен ирек һөйөүсән халыҡты яҡлаусы итеп танытты, икенсеһе Рәсәйҙә тау эшенә нигеҙ һалыусы булараҡ дан ҡаҙанды. Башҡорт поэзияһы классигы («Совет Татарстаны яҙыусылары» белешмәһен төҙөүселәр күрергә теләгәнсә, татар-башҡорт түгел, ә бөйөк башҡорт шағиры) Шәйехзада Бабич, шағирҙар һәм яҙыусыларҙан Али Карнай, Мәлих Харис, профессорҙар Әхнәф Харисов, Кирәй Мәргән, Ҡасим Әхмәров, Әхнәф Юлдашев һәм башҡаларҙың исемдәрен

беҙ ҙур ихтирам менән телгә алабыҙ. Көнбайыш башҡорттарының вәкиле, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәев үҙ милләте менән һәр ваҡыт ғорурланып йәшәне. Фән, мәҙәниәт өлкәһендә әлеге көндә ошо региондан сыҡҡан тиҫтәләгән башҡорт хеҙмәт итә. Шул уҡ ваҡытта һуңғы йылдарҙа башҡорт мәҙәниәтенә көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш районларҙан һәләтле йәштәрҙең килеүе әҙәйгәндән-әҙәйә, һәм был хәл борсолоу тыуҙырмай ҡалмай.

Туған тел һәм мәҙәниәт ниндәйҙер ят тәьҫиргә аҙыраҡ бирелгән башҡа регионларға ҡарағанда көнбайыш башҡорттарының милли үҙаңы түбәнерәк түгел. Әммә Сталин терроры, законһыҙлыҡ йылдарында бөтә регионда индерелгән татарса уҡытыу арҡаһында төп халыҡ быуындан быуынға үҙ милли тамырҙарын онота бара. Тәбиғи, көнбайыш башҡорттарының һөйләшеү теле лә үҙгәргән, икенсе яҡтан, ул боронғо башҡорт теле сифаттарын да күп һаҡлаған ғәжәп тотороҡло тел. Был турала көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш ҡына түгел, Минзәлә башҡорттарының да һөйләштәрендәге күп факттар һөйләй.

Шулай ҙа көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының милли, тарихи үҙаңын һәм телен юҡҡа сығарыу яңы әйләнеш алды. Һәм иң яуаплы мәленә етте. Халыҡтың тарихын, легендаларын, риүәйәттәрен иҫендә һаҡлап килеүсе оло быуын донъянан китте. Төп халыҡ тарихи хәтерҙе, туған телде ҡурсалаған берҙән-бер тере епһеҙ ҡалды. Бай мәҙәниәте, тарих буйынса классик хеҙмәттәре булған халыҡ нисәмә-нисә быуаттар буйына боронғо биләмәләренең көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш өлөшөндә лә үҫешкән тамырҙарын төрлө сәбәптәр буйынса, ниндәйҙер фажиғәле хәлдәр арҡаһында, һаҡлап ҡала алманы. Ә тарихи хәтерен юғалтҡан милләт йәки милләттең бер өлөшө, билдәле булыуынса, һәр ялғанға алданыусан йәш балаға оҡшап ҡала. Әлеге көндә көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын ғүмергә булмаған алдау күҙәтелә. Дәлилдәр етерлек: 1989 йылғы иҫәпләмә ваҡытында ғына ла ошо регионлың 100 мең башҡорто татар тип яҙылған

Икенсе бер мөһим мәсьәлә — көнбайыш һәм төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының теленә фәнни баһа. Рәсми фекер буйынса, ул — татар теле. Әммә был тамырынан дөрөҫ түгел. Революцияға тиклемге татар шовинистарының башҡорт телен үҙ аллы тел итеп күрергә теләмәүе, уны татар теленең диалекты тип ышандырырға маташыу инерцияһы дауам итә. Бер халыҡтың телен һанға һуҡмау менән уның диалектын иҫәпкә алмау араһында — бер генә аҙым. Беҙҙең көндәрҙә көнбайыш, төньяк-көнбайыш һәм Пермь баш-

ҡорттарының телен һаҡлауға етәксе аппараттарҙың лингвистик наҙанлығы кире йоғонто яһай. Икенсе сәбәп — башҡорт телсе ғалимдарҙың өнһөҙлөгө.

Шул уҡ ваҡытта башҡорт лингвистик фәнендә ошо регион башҡорттарының теле татар теле менән үҙ-ара йоғонтоға бирелгән (һыҙыҡ өҫтөнә алам, үҙ-ара йоғонтоға) башҡорт теленең көнбайыш диалекты тигән концепция ныҡынды.

Башҡортостанда башҡорттарҙың бер өлөшөн ассимиляциялаштырыуҙың икенсе этабы булырмы, юҡмы? Үҙенең милли бөтөнлөгөн һаҡлап ҡала алырмы был халыҡ, этнос булараҡ берләшеү шарттарында яңырыуға өлгәшә алырмы? Мәсьәлә бик етди тора, ҡаршы тороусы көстәр үҙенең емергес эшен һаман да дауам итә. Уларҙың ҡайһы берҙәре көнбайыш башҡорттарының башҡорт тип аталырға хаҡлы булыуын да инҡар итә.

Башҡорт халҡының бер өлөшөнөң тарихи яҙмышында һынылыш мәле етте. Ҡөрсөктән сығыу юлдарын күмәкләп эҙләйек, был мәсьәләне тәрәндән өйрәнәйек. Хаҡ эшебеҙ республикала ғына түгел, ил һәм донъя йәмәғәтселегендә яҡлау табасаҡ.

*1990*

*Азат ҠАМАЛОВ, филология фәндәре кандидаты, доцент*

## ТУҒАН ТЕЛ — МИЛЛӘТ ЯҘМЫШЫ

Билдәле булыуынса, элекке СССР-ҙа 1 млн 500 меңгә яҡын башҡорт бар. Улар Ҡөньяҡ һәм Урта Урал, Волга буйында, шулай уҡ Көнбайыш Себерҙә урынлашҡан республикаларҙа, өлкәләрҙә йәшәй. Башҡорттарҙың төп өлөшө Башҡортостанда һәм башҡорттарға ҡағылған бөтә мәсьәләләр иң тәүҙә үҙ дәүләтселегендә хәл ителергә тейеш. Бынан тыш, Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорттар тураһында ҡайғыртыу ҙа беҙҙең дәүләтебеҙ өҫтөнә төшә. Шулай итеп, Башҡортостан Республикаһы илдәге башҡорттарға бәйле мәсьәләләрҙе хәл итеүсе үҙәк булып тора. Шуға ҡарамаҫтан, йылдар буйына тейешенсә иғтибар булмау сәбәпле, Башҡортостан дәүләтенең үҙендә йәшәгән төп халыҡ — башҡорт проблемаһы барлыҡҡа килде.

Хәҙерге заманда республикабыҙҙағы башҡорттарҙы икегә бүлергә мөмкин. Береһе — хәҙерге башҡорт әҙәби те-

лендә уҡыған һәм үҙ телен туған теле тип иҫәпләгән башҡорттар, икенсеһе — хәҙерге татар әҙәби телендә уҡыу сәбәпле татар телен туған тел тип һанаған, әммә ҡатнаш телдә һөйләшеүсе башҡорттар.

Ни өсөн борон-борондан йәшәгән милләт икегә бүлендә? Минеңсә, былдай хәл өс сәбәп арҡаһында барлыҡҡа килде. Шуларҙың береһе — Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ райондарында хәҙерге көндә этнодемографик хәлдең татарҙар файҙаһына үҙгәреүендә, икенсе төрлө әйткәндә, башҡорттарҙың аҙсылыҡты тәшкил итеүендә.

Әлбиттә, был бөгөн генә барлыҡҡа килгән хәл түгел. Уның үҙенә күрә тарихы бар.

Башҡорттарҙың ата-бабалары, ғәрәп сәйәхәтсеһе Сәләм Тәржемәндең яҙмаларын ҡарағанда, Көньяҡ Уралда IX быуатта уҡ (яҡынса 844—845 йылдарҙа) йәшәгән.

Башҡортостан тарихында ҡеүәтле тарихи тетрәнештәр менән үткән бер нисә быуатҡа һикереп, уны рустар колониялаштыра башлаған XVI быуат урталарынан һүҙҙе дауам итәйек.

Ул Башҡортостанда ҡалалар төҙөүҙән башлана. В. Н. Татищевтың раҫлауынса, Бөрө ҡалаһы Өфөнән алдараҡ, йәғни 1555 йылда, төҙөлгән. Өфөгә 19 йылдан һуң ғына, 1574 йылға нигеҙ һалына. Ошо ҡалалар тирәһендә тәүге рус ауылдары барлыҡҡа килә.

Күрше генә йәшәһәләр ҙә, Иван Грозный тарафынан ҡыйратылған Ҡазан ханлығының халҡы башҡорттар араһына рустарҙан һуң, уларға эйәреп тигәндәй килә. Тәүге рус ауылдарының һәм ҡалаларының XVI быуатта, тәүге татар ауылдарының тик XVII быуатта ғына нигеҙләнеүе быны раҫлай.

Рустар менән татар халҡының Башҡортостанда урынлашыуында ла айырма бар. Рустар баштан уҡ айырым ауыл һалып ултырған булһа, татарҙар иһә күпселектә башҡорттар менән бергә бер ауылда йәшәй. Уларға башҡорт ауылдарының бер осонан урын бирелгән. Хәҙерге көнбайыш һәм төньяҡ райондарҙағы ауылдарҙа ҡайһы бер урамды «башҡорт осо», «татар осо», унда йәшәгән айырым төркөмдәрҙе «ғасабалар», «ҡазанлылар», «ҡазан кешесе» тип йөрөтөү быуа шунан ҡалған да.

Ошо ваҡыттарҙан, йәғни XVII быуат аҙағынан, алып башҡорт ауылының этнодемографик йөҙө үҙгәрә башлай. Күп кенә төп башҡорт ауылдары милли яҡтан ҡатнаш ауылға әйләнә. Ҡайһы бер ауылдарҙа башҡорттар һан яғынан да әҙ булып ҡала. Мәҫәлән, Баҡалы районында Иҫке Ҡуян, Иҫке Ҡорос, Мостафа, Наратйылға, Иҫке Әжмәй ауылдарында, Илеш районының Бишҡурай, Буралы,

Иләкшиҙе, Этәй, Сеңрән ауылдарында һәм Кушнаренко районының бүләр, дыуанай, ҡаңлы, ҡаршын, мең, юрмый ҡәбиләләренә ҡараған байтаҡ ҡына төп башҡорт ауылдарында йәшәгән татарҙар шул саҡта уҡ башҡорттарҙан күп була. Шулай ҙа, дөйөм алғанда, был осорҙа башҡорт ауылдарында төп милләт, йәғни башҡорттар, күпселекте тәшкил итә.

Көнбайыш Башҡортостанда төп башҡорт ауылдары менән йәнәш татарҙар нигеҙ һалған ауылдар ҙа күп, әлбиттә. Улар, нигеҙҙә, күпләп XVIII, XIX быуаттарҙа төҙөлә. Баҡалы, Илеш, Кушнаренко райондарында 70 татар ауылы бар. Әлбиттә, был ауылдар башҡорттар биргән ергә һалынған. Мәҫәлән, Илеш районындағы Абдулла, Базы-Ҡуян, Базытамаҡ, Татар Мәнәүезе, Ташкисеү, Шиҙәле ауылдары йылан, йәлдәк ҡәбиләләренә ҡараған ерҙә барлыҡҡа килгән.

Һанап кителгән был өс районда әлеге көндә 112 төп башҡорт ауылы бар, һан яғынан башҡорт ауылдары татар ауылдарынан күп. Әммә башҡорт ауылында йәшәгән татарҙарҙы иҫәпкә алғанда, һандар нисбәте тигеҙләшә. Ҡайһы осраҡта татарҙар башҡорттарҙан артып китә.

Был осорҙа Башҡортостанда милли мөнәсәбәттәрҙең күп яҡлы булыуын онотмайыҡ. Мәҫәлән, башҡорттар менән рустар араһындағы, башҡорт — мари, башҡорт — удмурт, башҡорт — сыуаш мөнәсәбәттәре булған. Тик башҡорт — татар мөнәсәбәте генә башҡорттарҙың этник йөҙөн үҙгәртеүгә килтергән, сөнки башҡорттарға төп, аҫаба ерҙәрендәге ауылдарҙа йәшәгән татарҙар ҙа, бүлеп бирелгән ерҙәрҙә һалынған татар ауылдарында донъя көткән татарҙар ҙа (йәғни эстән дә, тыштан да) йоғонто яһаған, һәм был хәл эҙһеҙ ҡалмаған.

Хәҙерге ваҡытта көнбайыш һәм төньяҡ райондарҙа этнодемографик хәл ныҡ үҙгәрҙе. Башҡорттар һаны ҡырҡа кәмене. Башҡорттар татар булып яҙыла башланы. Бер нисә миҫал:

Баҡалы районындағы Ҡамай, Иҫке Ҡатай, Саҡат. Үстем ауылдарындағы ҡырғыҙ ҡәбиләһенең ғасаба башҡорттары, Илеш районындағы Бәләкәй Бишҡурайҙағы йәлдәк башҡорттары татар булып яҙылған. Кушнаренко районындағы ҡаршын, дыуанай ҡәбиләләренә ҡараған Аҡбаш, Мәүлет, Юлыш ауылдарында ла шул уҡ хәл.

Ҡайҙан килеп сыҡты әле был проблема? Эш, минеңсә, туғандаш татарҙар менән бергә йәшәүҙә генә түгел. Башҡорт борон-борондан үҙ илендә бер үҙе генә йәшәмәгән... Күп халыҡтар менән бергә ҡатнашып көн күргән. Шул саҡта ла башҡорт башҡортлоғон үҙгәртмәгән. Башҡорт-

тарҙың татар булып китеүҙәренең төп сәбәбе — төньяҡ-көнбайыш башҡорттарына башҡортса уҡырға, яҙырға шарттар булдырмауҙа.

Бына 60 йылға яҡын көнбайыш башҡорттарын беҙ татарса уҡытып киләбеҙ. Илеш районынан сыҡҡан ғалимә Фәһимә апай Исламова үҙенең тәүҙә Ҡарабаш ауылында башҡортса уҡыуын, аҙаҡ татарсаға күсерелеүен әйтә. Ярты быуаттан артыҡ ваҡыт татарса уҡыған башҡорт ни эшләп татарса һөйләшмәһен? Шулай булһа ла улар үҙҙәрен һаман башҡорт тип иҫәпләп йөрөнөләр. Хатта хәҙер ҙә күптәре башҡортлоҡтарын таныйҙар. 60 йылға яҡын татарса уҡыған хәлдә лә үҙенең милли рухын юғалтмаған көнбайыш башҡортона һоҡланырға ғына ҡала. Ә ниндәй күренекле, данлыҡлы кешеләре бар был яҡ башҡорттарының. Улар араһынан мин 6 кешене: ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы Муса Гәрәевте, филология фәндәре докторҙары, профессорҙар Әхнәф Кирәев (Кирәй Мәргән), Мөсәлиә Хәйруллина, филология фәндәре докторҙары Әхнәф Харисов, Әхнәф Юлдашев һәм Ҡасим Әхмәровтарҙы ғына күрһәтер инем. Улар үҙҙәрен башҡорт тип танығандар. Ә ни өсөн татарса уҡытҡандар был яҡ башҡорттарын?

Бының ике сәбәбе бар. Уның береһе 30-сы йылдарҙа ҡайһы телдә уҡытыу мәсьәләһен юғарынан (Мәғариф министрлығынан) тороп хәл итеүҙә. 30-сы йылдар — шәхес культының сәскә атҡан осоро. Хужа нимә тиһә, урында шуны өнһөҙ-тынһыҙ үтәп йөрөгәндәр. Министрлыҡтан татар телендә уҡытырға ҡушылғас, был яҡта 30-сы йылдарҙа татарса уҡытыу индерелә.

Икенсе сәбәп. Был яҡ башҡорттарының теле үҙенең ҡайһы бер һыҙаттары менән, башҡа башҡорт һөйләштәренә ҡарағанда, татар әҙәби теленә яҡын тора. Шулай ҙа быны ентекләп өйрәнгән ғалимдар уны татар теленең диалекты тип түгел, ә башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты тип иҫәпләй. Бында мин, күренекле телселәр Н. Ф. Катанов, Н. К. Дмитриев, Ә. Ә. Юлдашевтың һәм башҡорт диалектологтары Т. Ғ. Баишев, Н. Х. Мәксүтова, С. Ф. Миржановаларҙың хеҙмәттәрен күҙ уңында тотам.

Телселәр генә түгел, был яҡтың ябай халҡы үҙенең телен башҡорт теле тип иҫәпләй. Төньяҡ райондарҙа экспедицияла йөрөп ҡайтҡас, мәрхүм шағир һәм ғалим Вафа Әхмәҙиев үҙенең тәүге тәьҫораттары менән уртаҡлашҡайны: «Әлеге ваҡытта башҡорт теленең көнсығыш һәм көньяҡ диалектында һөйләшкән башҡорттарҙы, йәғни беҙҙе, улар «ботоҡ башҡорттар» тип йөрөтәләр икән». Беҙ уларҙы башҡорт тип танымаһаҡ, улар, киреһенсә, беҙҙе «бо-

ҙоҡ башҡорттар» тип иҫәпләйҙәр икән. («Ботоҡ» тигәне «боҙоҡ» «испорченный» тигәнде аңлата). Бер ҙә улар эргәһендә йәшәгән татарҙарға «ботоҡ татарҙар» тип әйтмәгәндәр.

Тимәк, көнбайыш башҡорто хәҙерге башҡорт әҙәби теле итеп ҡабул ителгән тел нормаларын борон-борондан (иҫке төрки берлеге ваҡытынан) килгән тел үҙенсәлектәренең «яңы, боҙолған» формаһы тип ҡарай, үҙ телен «дөрөҫ» башҡорт теле тип иҫәпләй...

Әҙәби телдәге *һ* өнө урынына *с* өнөн ҡулланыу көнбайыш башҡорт теленең бер үҙенсәлеге генә. Уның башҡа үҙенсәлектәрен диалектологтар филология фәндәре докторҙары Н. Х. Мәҡсүтова һәм С. Ф. Миржанова, элегерәк Т. Ғ. Баишевтар асыҡланылар.

Бында мин көнбайыш башҡорттары теленең ер-һыу атамаларында һаҡланып ҡалған ҡайһы бер реликттарына иғтибарҙы йәлеп итер инем.

Дүртөйлө районында Миңеште, Балтас районындағы Мағашты, Илеш районындағы Лаяшты, Сүлте, Татышты, Туймазы районында Бишенде тигән ауылдарҙың исемдәрен генә алайыҡ. Уларҙағы *-ты, -те, -де* аффикстары көнбайыш башҡорттарының элекке тел үҙенсәлектәрен сағылдыра. Шулай булмағанда, был атамалар хәҙерге көндә Миңешле, Лаяшлы, Мағашлы, Сүлле, Бишенле формаһында *-лы, -ле* ялғауҙары менән йөрөтөлөр ине. Бындай көнсығыш диалектына хас аффикслы атамалар 60-ҡа яҡын. Тимәк, борон был яҡта *-ты/-те, -ды/-де, -ҙы/-ҙе, -лы/-ле* кеүек дүрт бөгөлөшлө аффикстар системаһы йәшәгән тигән һығымтаға килергә мөмкин.

Килтерелгән миҫалдар көнбайыш башҡорттары үҙенең элекке тел үҙенсәлектәрен хәҙер юғалта, яйлап татар теленә күсә барыуҙары тураһында һөйләй.

Ҡайһы бер кеше, телде юғалтыу ҡурҡыныс нәмә түгел, тамак туҡ, өҫ бөтөн булһа, шул еткән, тип уйларға мөмкин. Бында мин атаҡлы педагог К. Д. Ушинскийҙың бер фекерен хәтергә алырға тәҡдим итәм. Ул: *«Туған тел бөтһә, халыҡ та бөтә»,* — тигәйне. Рәми Ғариповтың: *«Теле барҙың ғына иле бар»,* — тигән иҫкәртеүен дә онотмайыҡ.

Икенсе милләткә күсеү туған телен онотҡан, рухи мәҙәниәтенән айырылған кешеләр араһында ғына осрай. Һәм, киреһенсә, үҙ туған телендә уҡый, яҙа, һөйләй белгән, рухи мәҙәниәтенә ныҡ бәйле кешеләр араһында икенсе милләткә күсеү осраҡтары бөтөнләй юҡ. Этнографтарҙың раҫлауынса ла, милли үҙаңды һәм этник һыҙаттарҙы (ер, тел берлеген, рухи мәҙәниәтте) һаҡлағанда ғына милләт үҙ асылын һаҡлай ала. (Ҡарағыҙ: Современные этни-

ческие процессы в СССР. — М.: Наука, 1975, 12-се бит.) Ә милли үҙаң, бигерәк тә рухи мәҙәниәт тик тел ярҙамында ғына формалаша. Тимәк, телгә өйрәтеү — милләттең асылын һаҡлауға илткән тәүшарт булып тора.

Был хәлде ғалимдарҙың аңлауы ғына етмәй. Ҡабатлап әйтәм, туған телгә, мәҙәниәткә иғтибар етешмәүенең, уның артта килеүенең өсөнсө сәбәбе — дәүләт етәкселәренең аңларға теләмәүендә, аңлаған хәлдә лә уны ғәмәлдә хәл итергә тырышмауҙа. Улар өсөн был бик мөһим мәсьәлә түгел, ә урындағы халыҡ, йәғни көнбайыш башҡорттары, үҙенең бөгөнгө аяныс хәлен яҡшы аңлай. Улар былай ти: «Ҡазанға барсаң, безне башҡортсоң, Уфаға барсаң, татарсың диләр».

Көнбайыш башҡортон мин ике юл сатлығына килеп етеп, ҡайһыһынан китергә белмәйенсә, икеләнеп ҡалған кешегә оҡшатам.

Бындай хәл төньяҡ һәм көнбайыш райондарҙа ғына түгел, ә Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө тирәһендәге һәм Дим йылғаһы бассейнындағы райондарҙа ла күҙәтелә. Унда йәшәгән башҡорттарҙың байтағы үҙ телендә уҡый, яҙа белмәй. Уҡый белмәү сәбәпле башҡорт телендә гәзит-журналдарҙы алдырмай. Уҡый-яҙа белгәндәре лә үҙ төбәгендәге яңылыҡтарҙы үҙ туған телендә түгел, ә рус һәм татар телендә сыҡҡан гәзиттәр аша ала, сөнки бындағы күп кенә райондарҙа гәзиттәр башҡорт телендә сыҡмай.

Туған телдә уҡый-яҙа белмәү — милли рухи мәҙәниәттән айырылыуға килтерә. Эш бик етди төҫ алырға мөмкин. Улар, дөрөҫөн әйткәндә, хәҙерге көндә ваҡытлыса ғына башҡорт булып тора. Ундай башҡорттар киләсәктә үҙҙәрен икенсе милләт кешеләре тип таныясаҡ.

Ни эшләргә кәрәк хәҙер?

Иң тәүҙә Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының Конституцияларына ярашлы рәүештә, башҡорт телен дәүләт теле итеп раҫлап, уның функцияһын социаль тәңгәлдә лә, территория йәһәтенән дә киңәйтергә тейешбеҙ. Ошоно эшләгән хәлдә генә Төньяҡ Уралда мең йылдан ашыу тарихы булған башҡорт милләте үҙенең милли йөҙөн юғалтмайынса, артабан үҫеүен дауам итәсәк.

Һуңғы биш йыл эсендә миңә Асҡын, Балтас, Илеш, Дүртөйлө, Кушнаренко һ. б. райондарҙа башҡорт телен һәм Башҡортостан мәҙәниәтен өйрәнеү торошон тикшереп күп тапҡырҙар булырға тура килде. Төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш райондарҙа хәҙерге ваҡытта башҡорт телен өйрәнеү бик ауыр бара. Илеш, Туймазы районында, Нефтекама ҡалаһында бер нисә мәктәптә башҡорт телен аҙнаһына

2 сәғәтлек программа менән уҡыталар. Асҡында ғына башҡорт теле милли уҡыу планы буйынса алып барыла.

Ни өсөн ошондай хәл килеп тыуған?

Минең күп йыллыҡ күҙәтеүем шундай фекергә килтерҙе: милләте башҡорт булған ата-әсәләр үҙ балаларының башҡорт телен өйрәнеүенә бер ҙә ҡаршы түгелдәр. Киреһенсә, ата-әсәләр ҙә, балалар ҙа башҡорт теленең өйрәнеү өсөн еңелерәк икәнен әйтеп тора.

Башҡорт телен башҡорт ауылы мәктәптәренә индереүгә башлыса РОНО етәкселәре һәм мәктәп директорҙары ҡаршы. Сөнки улар мәшәҡәтле эш менән шөғөлләнергә теләмәйҙәр. Эш шунан ғибәрәт: татар телен һәм әҙәбиәтен уҡытҡан белгесте эшенән бушатып, уның урынына башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһын эшкә урынлаштырырға кәрәк буласаҡ. Ауылда үҙ фатиры, мал-мөлкәте булған ғаиләле уҡытыусыға икенсе урынға йә булмаһа икенсе эшкә күсеүе еңелдән түгел. Башҡорт теле буйынса белгестәр ҙә ул яҡтарҙа юҡ дәрәжәһендә.

Ҡайһы бер урындарҙа татар теле уҡытыусыһына эш кәрәк булғанда, башҡорт телендә уҡытыуҙы бөтөрөп, тиҙ генә татар теленә күсә лә ҡуялар. Мәҫәлән, Асҡын районы Сураш мәктәбе директоры татар теле белгесе булған ҡатынына эш урыны табыу маҡсатында башҡортса уҡып йөрөгән башҡорт балаларын татарса уҡытыуға күсергән дә ҡуйған.

Сураш мәктәбен тамамлағас, татарса уҡып йөрөгән балалар Ҡашҡа ауылында 10, 11-се синыфтарҙа тағы ла башҡортса уҡырға тейеш була, сөнки Ҡашҡа урта мәктәбе башҡорт милли уҡыу планы буйынса эшләй.

Башҡорт телендә уҡытыуҙы киңәйтеүгә ҡамасаулаған тағы ла бер нәмә бар: төньяҡтағы, төньяҡ-көнбайыштағы, хатта төньяҡ-көнсығыштағы һәм үҙәк райондарҙағы халыҡ мәғарифы бүлеге мөдирҙәре булып башлыса татар һәм мишәр кешеләре эшләй. Уларҙың ҡайһы берҙәре дәүләт эше менән бер рәттән Татар ижтимағи үҙәге эшмәкәрлегендә лә әүҙем ҡатнашырға өлгөрә. Мәҫәлән, Мәсетлелә шулай. Ундай етәкселәр, әлбиттә, башҡорт теле һәм мәҙәниәтен үҫтереүгә ынтылып тормай. Әйтелгән фекеремде раҫлау өсөн бер нисә миҫал килтереп үтәм.

Ауырғазы районында Яңы Итекәй ауылында 57 башҡорт балаһы, район үҙәге Талбазыла — 80, Софиполь мәктәбендә — 16, Миңнебай (Дөйәбатҡан) ауылында — 2, Михайловкала — 11, Ситдыҡмулла (Берикмәк) ауылында 1 башҡорт уҡыусыһы үҙ туған телен өйрәнмәй.

Асҡын районы төньяҡтағы райондар араһында башҡорт телен өйрәнеүҙе бөтөнләйгә бөтөрмәгән берҙән-бер

район булып тора. Унда 80-се йылдар уртаһында 22 башҡорт мәктәбе эшләһә, хәҙер улар 13. Райондың 15 башҡорт ауылында балалар башҡорт теле һәм әҙәбиәтен өйрәнмәй. 49 процент башҡорт балалары үҙ туған телен, мәҙәниәтен өйрәнеүҙән мәхрүм.

Мәсетле районында башҡорт телен һәм әҙәбиәтен өйрәнеү торошо бер нисә йыл элек Мәғариф министрлығының коллегияһында ҡаралғайны. Унда районда был йәһәттән эштәрҙең бик үк яҡшы ҡуйылмағанлығы әйтелгәйне. Яҡын йылдарҙа Ҡыҙылбай, Әжекәй ауылдарында башҡорт телен өйрәнеүҙе тормошҡа ашырырға ҡарар ҡабул ителгәйне. РОНО мөдире ҡарарҙы үтәү урынына башҡорт теле яҡшы алып барылған Мәләкәҫ ауылында эште ҡыйынлаштырған.

Һуңғы 2—3 йылда Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы төньяҡ, төньяҡ-көнбайыш, төньяҡ-көнсығыш районддарҙа туған (башҡорт) телен өйрәнеү мәсьәләләрен үҙ коллегияһында тикшереп, тейешле ҡарарҙар ҡабул итте. Коллегияның был ҡарарҙарын әҙерләүҙә минең дә ҡатнашлығым булғанлыҡтан, уларҙы һанап үтеү урынлы булыр, тип иҫәпләйем.

**Беренсеһе.** Башҡортостан Республикаһының мәғариф тураһындағы законына һәм Министрҙар кабинетының милли мәктәптәрҙе үҫтереү концепцияһы тураһында 1993 йылдың 9 мартындағы ҡарарына ярашлы рәүештә һәр районда башҡорт милли мәктәптәрен үҫтереү буйынса перспектив план төҙөргә. Унда ҡайһы мәктәптең ҡасан туған телде өйрәнеүгә күсеүе аныҡ күрһәтелергә тейеш.

**Икенсеһе.** Төньяҡ-көнбайышта башҡорт теленән татарса уҡыуға тулыһынса күсеүҙе туҡтатыу маҡсатында ошо региондағы бөтә мәктәптәрҙәге башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына, кластағы бала һанына ҡарамайынса, 15 процент өҫтәмә түләү индерергә.

**Өсөнсөһө.** Башҡортостан Республикаһында үҙаллылыҡ процесын тәрәнәйтеү маҡсатында татар милли уҡыу планы буйынса эшләгән бөтә мәктәптәрҙә лә аҙнаһына 2 сәғәт башҡорт телен өйрәнеүҙе кертергә. (Бындай уҡыу планы шуның өсөн кәрәк, татарса уҡып йөрөгән ысын башҡорт ауылы мәктәптәре бер нисә йылдан һуң үҙҙәренән-үҙҙәре башҡортса уҡыуға күсәсәк.)

**Дүртенсеһе.** РОНО мөдирҙәре һәм мәктәп директорҙары эшкә тәғәйенләнгәндә, Башҡортостан Республикаһының Мәғариф тураһындағы законын, шулай уҡ Министрҙар Кабинетының милли мәктәптәрҙе үҫтереү концепцияһын үтәүгә мөнәсәбәтенә ҡарап ҡуйылырға тейеш.

һәм аҙаҡҡыһы. Әгәр ҙә ҡайһы бер мәктәптә башҡортса уҡытыуға күсергә теләп тә, тейешле белемле белгес таба алмаған осраҡта башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы шул ауылда элек эшләгән татар теле уҡытыусыһына ваҡытлыса тапшырып торорға мөмкин. Уларҙың теләгәндәрен аҙаҡ Башҡортостан мәғариф хеҙмәткәрҙәренең квалификацияһын күтәреү институтында башҡорт теле һәм әҙәбиәте курстарында ҡайтанан әҙерләргә була.

Шуларҙы башҡарып сыҡҡанда ғына башҡорт теленең, мәҙәниәтенең яҙмышы тураһында тейешле хәстәрлек күрелде, тип әйтергә мөмкин.

*1995*

*САИМӘ ҒИЗЗӘТУЛЛИНА*

## ҠИММӘТТӘРЕБЕҘҘЕҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛӘЙЕК

Башҡорт иле, уның яҙмышы, киләсәге...

Беҙ, башҡорт халҡы, бай инек, иҫ киткес бай инек. Урманға, кейеккә, алтын-көмөшкә... Ерҙәребеҙ, тау-йылғаларыбыҙ, шул ерҙәрҙең аҫабалары булған ырыу-ырыу халҡыбыҙ... шул ырыуҙарҙы берләштергән әхләҡи ҡанундарыбыҙ — йолаларыбыҙ менән бай инек. Күп төрлө кейемдәребеҙ, йырҙарыбыҙ, бейеүҙәребеҙ, һөйләштәребеҙ... Тик шуларҙың ҡәҙерен белмәй, әрәм-шәрәм итеүҙәребеҙ ғәфү итерлекме? Кейемдәребеҙгә генә күҙ һалайыҡ, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар сәхнәлә кейә торғанына иғтибар итәйек. Кемдеңдер зауығы, ирке менән башҡорт кейеме бер төр менән генә сикләнеп ҡалдырылды — елән һәм ыланбашҡа тиренән тегелгән кәпәс. Башҡорттоң бөтә йәшәйешкөнкүреш, булмышын — телен, йырҙарын, бейеүҙәрен сикләгән кеүек, кейемдәре лә тарихта бер ниндәй нигеҙе булмаған униформаға әйләндерелде. Күп ырыуҙарҙан торған башҡорт халҡының кейемдәре лә бик күп төрлө. Әйтәйек, Әй буйҙарында ҡатын-ҡыҙҙарҙың баш кейемдәре: яулыҡ, шәлъяулыҡ, ҡушъяулыҡ, ҡалпаҡ, тупый, ҡалын шәл, һаҡалдырыҡ. Әй буйы ҡатын-ҡыҙҙары кейеме араһында ҡайыулы күлмәк, ҡайыулы алъяпҡыстар ҙа бар.

Милли кейемдәр кешеләрҙең өҫтөндә булған ваҡыттарҙа — 50-се йылдарҙа СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы Тарих, тел, әҙәбиәт институтының экспедиция материалдарын туплаған «Археология и этнография Башкирии» тигән биш томлыҡ хеҙмәтте ҡулыбыҙға алайыҡ. Ниндәй байлыҡ, ниндәй төрлөлөк башҡорт ҡа-

тын-ҡыҙҙары кейемендә! Мин бала саҡта Мәсетле, Асҡын, Ҡариҙел райондары ауылдарында апайҙар, еңгәйҙәр ҡайыған алъяпҡыс, ашъяулыҡ, таҫтамалдар... Ундағы буяу төҫмөрҙәре, үрнәктәр (орнамент) байлығы, үрнәктәргә һалынған фекер тәрәнлеге... Быларҙың барыһы ла — башҡорттоҡо.

Милли кейем, тип ҡабул ителгәс, тормошсан нигеҙе булырға тейеш бит. Ебәк күлдәк, елән менән яланбашҡа кәпәс кейеү тормошта нисек урын тапты икән? Әгәр тышта ҡыш булһа, кәпәс тун йә көпө менән кейелер ине. Ә ҡатын-ҡыҙ өйҙә нисек кәпәс кейгән икән? Ошо униформаны тәҡдим иткәндәрҙе һәм шулай кейенеп сәхнәгә сыҡҡандарҙы бер-ике йәй селләлә мех кәпәстә йөрөтөп, бейә бәйләтеп, бейә һауҙырырға ине.

Татар образы гел хәҙер түбәтәйле булып күҙ алдына баҫа. Ә башҡорт малайҙары, егеттәре, ирҙәре, ҡарттары түбәтәй киймәй, яланбаш йә иһә йәй уртаһында тире бүрек кейгәндәрме әллә? Әй буйында 50-се йылдарҙа ололар ҙа, беҙҙең менән тиң малайҙар ҙа түбәтәй кейә ине, башҡорттар бар төбәктәрҙә лә түбәтәй кейгәндәр.

Бейеүҙәргә киләйек. Бөтә табанға баҫып тыпырлау башҡорт бейеүенең бер төрө генә итеп ҡабул ителде. Беҙҙең Әй буйында аяҡтың осона баҫып, етеҙ хәрәкәттәр менән еңел бейеү ҙә бар, тик татар бейеүҙәрендәге һымаҡ аяҡты юғары күтәреү генә юҡ. Өфөлә үҙебеҙҙең яҡтың бейеүен бейеп күрһәткәнем булды. «Татарса бейейһең», — тинеләр. Ә был бейеүҙе мин үҙ мөхитенән башҡаны күрмәгән, белмәгән, 50-се йылдарҙа әле йәш булған апай-еңгәйҙәрҙән отҡайным.

Беҙ, империяны тетрәткән ихтилалдарға күтәрелгән, тереләй яндырылған, ҡырылған дыуан ырыу халҡы, «татарса» бейейбеҙ булып сыға, ә ниндәй ырыу һуң ул дыуан ырыуы? Дыуан районы бар, ул урыҫтарҙан ғына торған район тип әйтерҙәр. Беҙҙең дыуан ырыуы ата-бабаларыбыҙ биләгән ерҙәр ғәйәт ҙур булған, көньяҡтан әйле ырыуы, төньяҡтан балыҡсы ырыуы менән сикләнгән. 1735—1739 йылдарҙа Бәпәнә абыҙ, Төлкөсура етәкселегендәге, 1740 йылда Ҡараһаҡал яуы тип аталған ихтилалдар төйәге... Тәфтиләү йәлдәт тарафынан ауылы-ауылы менән тереләй яндырылған ырыу. П. И. Рычков яҙып ҡалдырған билдәле Сөйәнтус — фажиғәле Сөйәнтус — Ҡараиҙел йылғаһы аша ғына, йылғаның уң ярында. Һул яғындағы дыуан ырыуы ауылдары ла шул уҡ фажиғәне кисергән. Бөгөнгө көндә ҙур территория урыҫ районы тип атала. Аҫаба халҡын ҡырғас, шул урындарға ҙур-ҙур урыҫ ауылдары килтереп ултыртылған: Дыуан сиркәүле, Суртан сир-

кәүле, Таҙтүбә, Ярославка сиркәүле, Вознесенка ике сиркәүле һ. б. Бына ошондай урыҫ ауылдары барлыҡҡа киләдыуан ырыу биләмәләрендә, ә төп халыҡтың иҫән ҡалғандары ырыу ерҙәренең Әй буйындағы өлөшөнә 19—20 ауыл булып урынлаша. Шуларҙың дүртәүһе һуңғы 20 йылда юҡҡа сығарылды.

...Ата-бабаларыбыҙ мираҫы булған рухи байлыҡтың ҡәҙерен белһәк, бөгөнгө көндә «аҙ һанлы», «малый народ» дәрәжәһендә булмаҫ инек. Йырҙарыбыҙ ҙа бит күбеһе башҡорт йыры булыуҙан туҡтаны. Әйтәйек, «Сарман буйҡайҙары»н ғына алайыҡ. Башҡортостанда нәшер ителгән йырҙар йыйынтыҡтарында ла улар татар халыҡ йыры итеп бирелә. Тарихҡа ҡараш ташлайыҡ: Сарман буйында урынлашҡан Минзәлә өйәҙенең Сарман ауылында 1834 йылда 219 ир, 194 ҡатын-ҡыҙ — байлар һәм мең ырыуы башҡорттары йәшәгән. Минзәлә өйәҙе — асылда байлар, биләр, бүләр, гәрә, йәнәй ырыуҙары башҡорттары төйәге. Ә ҡасандан бирле икәнен аныҡлап ҡарайыҡ.

925 йылда, йәғни 1070 йыл элек, Әхмәт ибн Фаҙлан атлы ғәрәп-мосолман дине миссионеры үҙенең юлъяҙмаларында атап киткән ерҙәрҙе, һыуҙарҙы иҫкә төшөрәйек: Яйыҡты сыҡҡанда күптәребеҙ ағып китте, ти ул. Ҡондоҙлоно атап китә, Ырғыҙҙы сыға, Һамарҙы кисә, гел көньяҡтан төньяҡҡа бара, Бәләбәй — Бөгөлмә яҫылығына килеп етә. Ә байлар, бүләр, биләр, булғар теҙмәһе шул төбәктә түгелме ни? Әхмәт ибн Фаҙлан быға хәтле үткән юлында күргән халыҡтар, йәғни төрки ҡәбиләләре береһе лә үҙен «башҡорт» тип атамаған. Ә ул ваҡыттарҙа уҡ күп ырыу-ҡәбиләләрҙе берләштергән башҡорт үҙ илен нык һаҡлаған. Янбайын ағастан эшләп, муйынына тағып ҡуйған ажар башҡортто ғәрәп илсеһе ер менән күк араһында түгел, ә бына нәҡ ошо ерҙә күргән бит.

Әхмәт ибн Фаҙлан оло башҡорт иленең көнбайыш сиге буйлап үткән. Ә бөгөнгө көндә беҙ уларҙы *с, ч* өндәрен ҡушып һөйләшкәндәре өсөн «татар» тип атайбыҙ. Ошо беҙ ситкә тибәргән ырыуҙарҙан тағы ниндәйҙәре булды икән? Әлбиттә, уран, гәйнә, балыҡсы, һуннар, өпәйҙәр. Ә инде уран ырыуы булмышын өйрәнеү, тәрән фәлсәфәи тамырҙарына йән өрөү башҡорт ғалимдарының мөҡәддәс бурысы ла бит, тик...

...Арҡайымды ла күҙ асып йомғансы «талап» алдылар. Был мәсьәләлә иң үкенеслеһе — бәғзе ғалимдарыбыҙҙың Арҡайым һәм свастиканың халыҡ тарихындағы тотҡан урынын аңлай алмауҙарында.

Свастика тураһында һүҙ сыҡҡанда бала сағым хәтирәләре иҫкә төшә. Беҙҙең бәләкәй генә — алтмышлап өйҙән

генә торған ауылда башланғыс мәктәп бинаһы ла юҡ ине. Ә ауылыбыҙ шундай тәртипле, әүҙем, уңған халыҡлы, донъя көтмәй эсеп йөрөгән бер кеше лә юҡ ине. Балалар йыл да берәй кешенең өйөндә уҡый инек. Өсөнсө синыфта беҙҙең менән бергә уҡыған Тәғзимәләрҙең өйөндә белем алдыҡ. Тәғзимәнең бар яҡтан да килгән, һуғыш ваҡытында бригадир булған инәһе Фәтҡиә еңгә «Ҡүҙем барҙа» тип таҫтамалдар һуҡты, күпмеһендер, Тәғзимәгә бирнәгә тип, һандыҡҡа бикләне, күпмеһендер элеп ҡуйҙы. Бына шунда башланды ла инде минең ҡайғыларым — элеп ҡуйылған таҫтамалдарҙың икеһендә ҡап-ҡара свастикалар! Иртәрәк тороп йүгереп барам да таҫтамалдарҙың тиҫкәре яғын әйләндерәм, кеше күрмәһен, бигерәк тә уҡытыусы күрмәһен, тип (ул сит ауылдан ине), Фәтҡиә еңгәне төрмәгә алып китмәһендәр, тип. Шулай бер-ике ай интеккәс, мине Фәтҡиә еңгә тотто. «Таҫтамалдарымды кем тиҫкәре яғын әйләндерә икән, тиһәм, һин икән. Нейә алай итәһең?» — тине. Мин үҙемсә аңлаттым. Фәтҡиә еңгә: «Мин ҡайҙан беләйем нимесен, аның ул нәмәһен, был беҙҙең башҡорттоң ер, һыу тигәне була»,—тип горизонталь ятҡанын—ер, вертикален — һыу, тип ҡулы менән йөрөтөп күрһәтте. «Свастика» тигәнде еңгәм белмәй ине, әммә ни булһа ла мин уның башҡорт халҡында булған Ер-һыу менән бәйле төшөнсә икәнен аңланым.

Фәтҡиә еңгәнең ҡыҙы Тәғзимәнең Ҡыйғы районында тормошта икәнен беләм, тик һаҡландылармы икән унда ошо таҫтамалдар?

...1924 йылда инде оло башҡорт халҡын ҡыйралыуға килтергән икенсе акт — бер һөйләште генә һәм уның һүҙҙәрен генә (мотлаҡ — «әсәй», «инәй» түгел, «ин» — «кер» түгел һ. б.) әҙәби тел нормаһы итеп алып, Башҡортостанда ла 17—20 районда Ҡазан биргән алдаҡ тарихлы дәреслектәр менән уҡытып, Илештә лә, Дүртөйлөлә лә, Мишкәлә лә үҙ кейемен **татар кейеме тип** кейеп, үҙ телен татар теле тип уйлап йәшәгән халыҡ барлыҡҡа килтерҙеләр. Башҡорт ғалимдарының битарафлығы, ҡайһы бер татар ғалимдары һәм милли лидерҙарының мәкерле эшмәкәрлеге менән бүләк, биләр, байлар, йәнәйҙәр, уран, гәйнәләр, һуннар һәм башҡа күп *с, ч*-лы башҡорттар татарлашып үҙ тамырҙарынан йолҡондо. Улар ситкә тайпылғандан *һ, ҫ*-лы башҡорттар һәләк көсәйеп китәме? Юҡ, көсәймәй, ә һәләкәткә тәгәрәй.

Ә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары нимә юғалта икенсе халыҡ исеме менән аталып? Үҙ ырыуы ерҙәрен, уға аҫабалыҡ хоҡуғын юғалта. Икенсе милләт кешеһе — килмешәк аҫаба була алмай. Ә ер — революцияға тиклем тик

башҡорттарҙа ғына һаҡланған аҫабалыҡ хоҡуғы (вотчинное право) менән беркетелгән ырыу байлығы.

Нимәгә ул хәҙерге цивилизация осоронда аҫабалыҡ хоҡуғы, тип тә әйтерҙәр. Быныһын да аныҡлап китәйек: президент һайлағанда Мортаза Рәхимов ерҙе хосусилаштырмау программаһы менән халыҡта яҡлау тапты түгелме һуң? Быны мин бик һәйбәт beләм. Башҡорт ауылдарында ғына түгел, урыҫ, сыуаш ауылдарында ла агитация менән йөрөгәндә Мортаза Рәхимовҡа уны ерҙе һаттырмау шарты менән һайлаясаҡтарын әйтеп яҙылған әллә күпме хаттар һәм ҡултамғалар бар минең ҡулымда. Халыҡҡа иң һәйбәт йоғонто яһағаны, Мортаза Рәхимовтың халыҡ мәнфәғәтен ҡайғырта белгән етәксе икәнен күрһәткәне — «Ер тураһында кодекс» булды. Ул, халыҡ ирке менән Мәскәү закондарына ҡаршы барып, ерҙе халыҡҡа бәйләне. Әгәр ҙә Мәскәүҙәге һәм үҙебеҙҙәге «демократтар» ерҙе хосусилаштырыуға баҫым яһай башлаһа, аҫабалыҡ хоҡуғын алға ҡуйып һөйләшеп, үҙ Президентыбыҙға халыҡты ергә бәйләргә ярҙам итергә кәрәк.

Әгәр беҙ быны ваҡытында һәм дөрөҫ файҙаланып өлгөрһәк, Башҡортостанда күптән йәшәгән бөтә милләт халыҡтары ла шул аҫабалыҡ хоҡуғын яҡлаясаҡ һәм уға һыйынасаҡ. Башҡорт халҡы өсөн хәҙерге хәүефле, һынылышлы заманда ерҙән айырылырға ярамай. Халыҡты ҡамғаҡ һымаҡ бер исемдән икенсе исемгә күсереп тамырһыҙ, ерһеҙ итеү — **енәйәт.**

Бөгөн бер төньяҡ-көнбайыш башҡорттарын башҡортлоҡтарына инандырып, күңелдәренә ата-бабалар рухын өрһәк, **уларҙы ошо ергә мораль** яҡтан **бәйләй** алһаҡ, алдағы халыҡ иҫәбен алғанда, улар үҙҙәренең башҡортлоҡтарын инҡар итмәһә, йәғни башҡорт тип яҙылһа, үҙҙәрен ергә юридик яҡтан да бәйләп ҡуясаҡ. Ә аҫабалыҡ хоҡуғы бөгөн кәрәкмәһә, иртәгә кәрәк булыуы бар — заманалар төрлө яҡҡа үҙгәрә, ә кеше ерҙә тора, ерҙә йәшәй, ергә кендеге менән бәйле. Енәйәт ҡылмайыҡ халыҡҡа ҡарата, таламайыҡ уның барлыҡ ҡиммәттәрен: рухын, телен, иманын, тамырын, ерен.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы кеүек мөбәрәк йыйында тирмәләр ҡороп, хәбәр һөйләп, шарап эсеп күңел асыу ғына булмаһын. Ә Башҡортостандың бөтә төбәктәрендә йәшәгән, төрлө һөйләштә һөйләшкән, төрлө кейемдәр кейгән, төрлөсә бейегән һәм йырлаған ырыуҙарын барлыҡ ҡиммәттәрҙең ҡәҙерен белгән бөтөн бер халыҡ итеп ойоштора алған йоғонтоло бер сара булһын ине.

*1995*

*Нәжибә МӘҠСУТОВА, филология фәндәре докторы*
*Зиннур УРАҠСИН, Башҡортостан Республикаһының Фәндәр академияһы академигы, филология фәндәре докторы*

# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ ХАЛЫҠТАРЫ ТЕЛДӘРЕНЕҢ СТАТУСЫ ТУРАҺЫНДА

## (Халыҡ депутаттарына мөрәжәғәттән)

...Башҡортостан халыҡтарының телдәре тураһында закон ҡабул итеү һуҙыла һәм шуның һайын ҡырҡыулашып ниндәйҙер кимәлдә сәйәси характер ала бара. Шуны хәтерҙә тоторға кәрәк, ниндәйҙер телгә дәүләт статусын бирергә тырышыу төп халыҡтың дәүләтселеген бүлеүгә дәғүә буласаҡ. «Төп халыҡ» төшөнсәһен — быға ҡаршы ҡайһы саҡта матбуғатта сығыш яһайҙар — Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы таный (ҡарағыҙ: «Кеше хоҡуҡтары, һорауҙар һәм яуаптар», Нью-Йорк, 1990, 39—40-сы биттәр). «Туған телеңде һаҡлау һәм шул телдә аралашыу» төп халыҡтың төп хоҡуҡтарының береһе тип аталған.

Башҡорт этносын күтәреү, уны һаҡлап алып ҡалыу һәм үҫтереү өсөн шарттар тыуҙырырға тейеш булған берҙәнбер дәүләтселек — Башҡортостан Республикаһы. Әлбиттә, төп халыҡ мәнфәғәттәре был территорияла йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың мәнфәғәттәренә ҡаршы килергә тейеш түгел. Айырым вәкилдәре Башҡортостанда йәшәгән күпселек халыҡтарҙың Рәсәйҙә, БДБ-ла (СНГ) үҙ дәүләтселектәре бар.

Матбуғаттағы, йыйылыштарҙағы һәм митингыларҙағы сығыштар буйынса фекер йөрөткәндә, Башҡортостанда башҡорт, рус, татар телдәрен дәүләт телдәре сифатында күрергә теләүселәр бар. Ошоларға өҫтәп, дүртенсе һәм бишенсе телдәрҙе тәҡдим итеүҙәре лә ихтимал.

Үҙ телеңде дәүләт кимәленә күтәреү теләге тәбиғи күренеш һымаҡ. Ләкин Татарстан, Сыуашстан, Мари-Эл һәм башҡа республикалар кеүек үк, Башҡортостан да этнотерриториаль берләшмә. Рәсәйҙәге күп милләтле республикаларҙың һәр береһе билдәле территорияла бер этнос башланғысында төҙөлгән.

Шуға күрә, конституция теле менән әйткәндә, бер милли-дәүләт берләшмәһенең бер дәүләт теле булырға тейеш: Башҡортостанда — башҡорт теле, Татарстанда — татар теле, Рәсәйҙә — рус теле, Сыуашстанда — сыуаш һ. б.

Һәм был төп дәлил. Әммә, нисек инде әҙселектең теле

дәүләт теле булһын, тип ҡаршы төшөүселәр бар. Сөнки башҡорттар республика халҡының 22%-ын ғына тәшкил итә, рустар — 39% тирәһе, татарҙар — 28%. Эйе, был шулай. Ләкин башҡорттарҙың үҙ республикаһында әҙселектә ҡалыуы уларҙың ғәйебе түгел, ә бәләһе һәм быны бик күп объектив сәбәптәре бар. Бөгөн килеп, хоҡуҡи дәүләт төҙөгәндә, үткәндәрҙәге бәләне киләсәктә фажиғәгә әйләндерергә ярамай.

Башҡортостандағы күп һанлы бөтә халыҡтарҙың да телдәрен дәүләт телдәре тип иғлап итһә, беҙҙең республика башҡа суверенлы дәүләттәрҙең бурыстарын үҙ өҫтөнә аласаҡ. Әйтәйек, Башҡортостан татарҙар өсөн үҙ әҙәби телен булдыра алмай. Был татар әҙәби телен һәм татар этносын бүлгеләүгә килтерәсәк.

Милләттең үҙбилдәләнеше дәүләтселек институтында сағылыш таба. Һәр дәүләт билдәле атрибуттарға эйә — территория, хакимиәт һәм идаралыҡ органдары, флаг, гимн, герб һ. б. Шул иҫәптән — дәүләт теле йәки рәсми тел, быныһы милли-дәүләт берләшмәһе өсөн айырыуса мөһим. Башҡортостанда башҡорт теле, башҡа телдәрҙән айырмалы рәүештә, дәүләт барлыҡҡа килтереүсе милләттең теле булып тора. Һәм шул телде дәүләт теле тип иғлан итеү — башҡорт милләтенең үҙбилдәләнешен бойомға ашырыу, үҙ милли-дәүләт берләшмәһен төҙөү ихтыяры. Әгәр ҙә Башҡортостанда йәшәүсе татарҙар үҙҙәрен татар милләтенең вәкилдәре тип иҫәпләһә, уларға татар милләтенең Татарстан Республикаһында үҙбилдәләнеш алыуын, татар теленә күптән инде дәүләт статусы бирелеүен һәм шуның менән татар теленә дәүләт яҡлауы булдырылыуын танырға ғына ҡала.

Башҡортостан Республикаһының дәүләт органдары өс телдең араһынан башҡорт теленә ҡарата ғына суверенлы вәкәләтлектәргә эйә. Улар, мәҫәлән, әҙәби тел нормаларын билдәләп, терминологияны һәм ғөмүмән яҙма телде тормоштоң төрлө өлкәләрендә ҡулланыу тәртибен раҫлай, тел үҫешенең тарихын, бөгөнгө торошон, киләсәген өйрәнеү буйынса саралар ҡабул итә һәм шул маҡсаттарҙа экспедициялар, фәнни-тикшеренеү үҙәктәре ойоштора, башҡа телдәр менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйға һала, ҡыҫҡаһы, ошо телгә ҡарата үҙ сәйәсәтен ҡора һәм ғәмәлгә ашыра ала. Башҡортостандың юғары хакимиәт һәм идаралыҡ органдары татар һәм рус телдәренә ҡарата быларҙы эшләй алмай.

Башҡортостанда башҡа телдәрҙе ҡыҫырыҡламау, бөтә телдәрҙең тиң хоҡуҡлылығын тәьмин итеү, уларҙың ҡулланылышы һәм үҫеше өсөн уңайлы шарттар булдырыу бу-

йынса саралар (шул иҫәптән закон акттары ла) ҡабул ителергә тейеш.

Башҡортостанда башҡорт теле менән бергә башҡа телдәргә лә дәүләт статусын биреүҙе талап итеп, ғәҙәттә Швейцария тәжрибәһенә мөрәжәғәт итәләр. Унда йәшәүсе немецтар, француздар, итальяндар үҙҙәренең этник нигеҙенән, милли дәүләтселегенән — Германия, Франция, Италиянан айырылып йәшәй. Улар үҙҙәренең этник нигеҙенән айырылған этник төркөмдәр ойошторған икенсе суверенлы дәүләт гражданлары булып торалар. Һәм Швейцарияла ретороман теле менән бер рәттән был телдәргә лә дәүләт статусы бирелеүенә ғәжәпләнергә кәрәкмәй. Сөнки Швейцария, суверенлы дәүләт булараҡ, немец, француз, итальян халыҡтары төркөмдәренең проблемаларын Германия, Франция, Италия менән берлектә түгел, ә үҙаллы ҡарай һәм хәл итә. Әгәр Швейцария тәжрибәһен Башҡортостанға күсереп, беҙҙә башҡорт теле менән бергә рус, татар, сыуаш һ. б. телдәрҙе лә дәүләт телдәре тип иғлан итһәк, бындай йүнәлеште эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыу Башҡортостандың Федерациянан сығыуына, Рәсәй һәм Татарстан менән мөнәсәбәттәрҙең Швейцария — Франция, Германия, Италия мөнәсәбәттәре кеүек үҫешеүенә килтерәсәк.

Милли хәрәкәттәрҙең айырым лидерҙары, иң изге милли тойғоларҙа уйнап, халыҡтың әҙерлекһеҙ өлөшөн яҙлыҡтыра һәм уларҙы үҙҙәренең этник берләшмәһенән дәүләт кимәлендә айырылыуға этәрә, башҡорт халҡына ҡарата урынһыҙ шикләнеү тыуҙыра, республикала социаль-сәйәси хәлде ҡырҡыулаштыра.

Башҡортостан суверенитетының реаль йөкмәткеһе тел мөнәсәбәттәрен хоҡуҡилаштырыуҙы күҙҙә тота. Республикала бөгөн башҡорт теле иң ауыр, иң хоҡуҡһыҙ хәлдә ҡалып килә — ҡулланыу даирәһе тар, социаль бурыстары сикләнгән, дәүләт яҡлауы булдырылмаған. Башҡорт теленә дәүләт теле статусын биреү уны асылда рус, татар телдәренең юридик, хоҡуҡи кимәле менән тигеҙләү өсөн нигеҙ булдырасаҡ.

*1993*

*Зөфәр ЕНИКЕЕВ, юридик фәндәр кандидаты*

## СУВЕРЕНЛЫ БАШҠОРТОСТАН ШАРТТАРЫНДА ТЕЛДӘРҘЕҢ ХОҠУҠИ СТАТУСЫ

Беҙҙең йәмғиәтте демократлаштырыу башланғас һәм СССР менән РСФСР эсендәге элекке республикалар су-

веренитетҡа юл алғас ҡына, телдәрҙе хоҡуҡи яҡлау мәсьәләһен ҡуйыу мөмкин булды. Һәр милләттең һәм халыҡтың теле, уның һанына ҡарамай, һис шикһеҙ, донъя мәҙәниәтенең бөйөк ҡаҙанышы булып тора, шуға күрә, телдәрҙе ассимиляциянан һәм бөтөнләй юғалтыуҙан һаҡлау — хоҡуҡи дәүләттең иң мөһим бурыстарының береһе. Беҙҙең ҡарашҡа, элекке совет республикаларының бөтәһендә лә тиерлек дәүләт телдәре тураһындағы закондар тап ошо маҡсаттарҙа ҡабул ителде. Тәүге тапҡыр бындай закон 1989 йылдың 18 ғинуарында Эстонияла ғәмәлгә индерелде. Унда эстон теле дәүләт теле итеп танылды һәм быны бойомға ашырыу өсөн дүрт йыл бирелде. Был хәл рус телле халыҡтарҙың ризаһыҙлығын тыуҙырҙы.

Молдовала иһә дәүләт телдәре тураһында закон индереү әлегәсә танылмаған Ғағауз һәм Днестр буйы республикаларының барлыҡҡа килеүенә сәбәп булды. Бөтә элекке союздаш республикаларҙа ла тиерлек тик төп халыҡтың телен генә дәүләт теле тип таныу рус телле халыҡтарҙың бер өлөшөнөң Рәсәй Федерацияһына күсеүенә килтерҙе. Ошоно иҫәпкә алып, һуңғы йылдарҙа Рәсәй Федерацияһындағы бөтә республикаларҙа тиерлек рус теле һәм төп халыҡтың теле дәүләт телдәре итеп танылды. Башҡортостан Республикаһында был өлкәлә эштәр башҡасараҡ тора. Беҙҙә телдәр тураһында закон ҡабул ителмәне әле һәм ваҡытлы матбуғат биттәрендә был хаҡта фекер алышыу бара. Рус һәм башҡорт телдәре дәүләт телдәре итеп берҙәм танылғанда, татар теленә лә дәүләт статусын биреү тураһындағы тәҡдимгә бәйле бәхәс тыуҙы. Бының яҡлылар республикала башҡорттарҙың татарҙарға ҡарағанда әҙерәк булыуын дәлил итеп килтерә.

Быға ҡаршы түбәндәге фекерҙәр әйтелә. Мәҫәлән, Уйылдан Сәйетов: «...Башҡортостанда татар телен дәүләт теле яһап, беҙ татар теленең дөрөҫ яҙылышына һәм әйтелешенә үҙгәрештәр индерә, уның алфавитын раҫлай, татар теленең таҙалығын һаҡлай һ. б. алырбыҙмы икән?»[1] — тигән шикләнеү белдерҙе.

Рәшит Ирназаров фекеренсә: «...Башҡортостан Республикаһының дәүләт органдары башҡорт теленә ҡарата ғына суверенлы хоҡуҡтарға эйә. Улар башҡорт теленең генә әҙәби һөйләш нормаларын билдәләй, терминологияһын раҫлай, ошо телгә ҡағылған сәйәсәтен ғәмәлгә ашыра»[2].

---

[1] Саитов Уилдан. «Языки народов — равноправны». Известия Башкортостана. 1992, 20 окт.

[2] Ирназаров Рашит. «Суверенитет Башкортостана и государственный язык». Известия Башкортостана. 1991, 10 дек.

Башҡортостан Республикаһы Президенты эргәһендә Терминология комиссияһын булдырыу үрҙә килтерелгән авторҙарҙың хаҡлы булыуын раçлай. Атап әйткәндә, башҡорт теленең ғәмәлдәге терминологияһын тәртипкә килтереү һәм яңыһын законлаштырыу, башҡорт телендәге матбуғат һәм башҡа әҙәби баçмалар биттәрендә, шулай уҡ мәҙәниәт һәм сәнғәт (театр, эстрада, кино һ. б.) йорттарында терминдарҙан файҙаланыуҙы даими рәүештә тикшереп тороу; терминология һүҙлектәре төҙөүселәргә, вывескаларҙы биҙәүселәргә, мөһөр һәм мисәт әҙерләүселәргә методик ярҙам күрһәтеү бурыстары ошо комиссияға йөкмәтелде.

Тел мәсьәләһен тикшергәндә Башҡорт АССР-ының 20—30-сы йылдарҙағы сағыштырмаса демократик һәм суверенлы үçеш этабы тәжрибәһенә мөрәжәғәт итергә кәрәктер. Ул дөрөç юл булып күренә, сөнки башҡорт халҡының ихтыяры менән барлыҡҡа килгән Башҡорт АССР-ында Сталин репрессияларына тиклем дәүләттең халыҡтан асыҡтан-асыҡ ситләшеүе булмаған — был күренеш һуңғы йылдарҙа ғына күҙәтелә. Үҙәк большевиктар хөкүмәтенең көслө баçымына һәм коммунистар партияһы аша тоталитаризм урынлаштырыуға ҡарамаçтан, Башҡорт АССР-ы, үҙ закон акттарын ҡабул итеп, ижтимағи һәм дәүләт тормошоноң күп өлкәләрен тәртипкә килтерергә тырышҡан. Милли һәм социаль ғәҙеллек урынлаштырыусы законлы нигеҙгә ҡоролған был акттар иғтибарға лайыҡлы, сөнки демократик юл менән ҡабул ителгәндәр. Ошо йәһәттән улар хоҡуҡи көскә эйә. Башҡортостанда хоҡуҡи дәүләт төҙөү осоронда уларҙың әһәмиәте шунда. 1921 йылдың 25 июнендә башҡорт телен рус теле менән бергә дәүләт теле тип таныған II Бөтә Башҡорт Советтар ҡоролтайының ҡарары шундай акттарҙың береһе булып тора. Ошо уҡ ҡарар бөтә уҡыу һәм хәрби-уҡыу йорттарында башҡорт телен уҡытыуҙы мотлаҡ индереү ихтыяжын таныған.

Был ҡарарҙы тормошҡа ашырыу өсөн БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1923 йылдың 18 февралендәге декреты менән башҡорт телен ғәмәлләштереү буйынса Үҙәк комиссия төҙөлә. Ул үҙенең эшендә Башҡортостан Халыҡ Комиссарҙары Советының 1923 йылдың 27 февралендәге ҡарарынан сығып, волость һәм ауыл кимәлендәге дәүләт һәм шәхси-хоҡуҡи йорттарҙа башҡорт телен индереү буйынса инструкцияға таяна. Уның буйынса башҡорт һәм рус телдәрен мотлаҡ өйрәнеү ғәмәлгә индерелгән.

Башҡорт телен ғәмәлләштереү буйынса Үҙәк комиссияның эшен БАССР дәүләт хакимиәтенең юғары органдар

һәр ваҡыт тикшереп торғандыр, күрәһең. Был йәһәттән БАССР Үҙәк башҡарма комитетының 1928 йылдың 5 сентябрендәге ҡарары ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Башҡорт телен бойомға ашырыуҙың өс йыллыҡ планы үтәлмәй, айырым алғанда, аппараттағы рустар башҡорт телен бөтөнләй тиерлек өйрәнмәй, шул арҡала Башҡорт республикаһының бөтә төбәктәрендә лә дәүләт йорттарының эшлекле хат алышыуы тик рус телендә генә алып барыла, тиелә был документта. Дәүләт йорто башҡорт теленә күсеп бөтөргә тейеш булған ваҡытҡа телде өйрәнмәгән һәм телде белеү талап ителгән вазифаны биләгән кешеләр мөнәсәбәтендә ҠЗОТ-тың эштән сығарыуҙы ҡараған 47-се статьяһын («В» пункты) ҡулланырға, тигән ҡарар ҡабул ителгән [1].

Әммә, Сталин репрессиялары һәм артабан ҠПСС-тың берҙәм совет халҡын барлыҡҡа килтереү теләге менән бөтә урындарҙа милли мәктәптәрҙе ябыуға йүнәлтелгән сәйәсәте йоғонтоһонда үрҙә килтерелгән закон акттарының күп талаптары онотолоп ҡалған. Башҡорт телен дәүләт кимәлендә ҡулланыу даирәһе бөгөнгө көндә ҡәтғи сикләнгән.

Телдең вазифаһын тарайтыу, билдәле булыуынса, ҡулланыуҙан уны бөтөнләй ҡыҫырыҡлап сығарыуға һәм халыҡтың икенсе этнос эсендә йотолоуына килтерә. Был йәһәттән, нисек кенә ғәжәп булмаһын, башҡа милләттәр менән сағыштырғанда, башҡорттар иң ауыр хәлдә ҡалды. Түбәндәге статистика мәғлүмәттәре шуға шаһит.

Әйтәйек, 1865 йылғы халыҡ иҫәбен алыу буйынса Өфө губернаһында 619 732 башҡорт (313 270 ир заты һәм 306 462 ҡатын-ҡыҙ) йәшәгән, йәғни губерна халҡының 50%-ын тәшкил иткән. Рустар — 221 575 (33,8%), 89 732 татар (45 712 ир заты һәм 44 020 ҡатын-ҡыҙ), йәғни губерна халҡының 6,9%-ы иҫәпләнгән.

Беренсе бөтә Рәсәй халҡының иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса 1896 йылда Өфө губернаһында 899 940 башҡорт (41%), 184 817 татар (8,4%), 90 957 мишәр (4,3%) һәм 39 955 типтәр (1,8%) йәшәгән. Шул иҫәптән, Өфө өйәҙендә башҡорттар халыҡтың — 30,4%, татарҙар — 1,2%, Бөрө өйәҙендә 51,1% һәм 0,5%, Мәсетле өйәҙендә 32,4% һәм 28,1%-ҡа тигеҙ булған [2].

Совет осорондағы халыҡ иҫәбен алыу материалдары иһә, татар һәм рус халыҡтары менән сағыштырғанда, башҡорт халҡының һан яғынан ҡырҡа кәмеүен күрһәтә.

---

[1] Башҡорт телен ғәмәлләштереү буйынса закондар йыйынтығы. Өфө, 1930. 15—16-сы биттәр.

[2] Первая всеобщая перепись населения Российской империи. Уфимская губерния. Том 4. Тетради 1, 2. СПб. 1901, 1904.

| Халыҡтар (проценттарҙа) | Йыл ар | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1923 | 1926 | 1939 | 1959 | 1970 | 1979 | 1989 |
| Башҡорттар | 29,3 | 23,5 | 21,2 | 22 | 23,4 | 24,3 | 21,9 |
| Татарҙар | 6,8 | 17,3 | 24,6 | 23 | 24,7 | 24,5 | 28,4 |
| Рустар | 39,6 | 40,0 | 40,6 | 42 | 40,5 | 40,3 | 39,3 |

Башҡортостанда барған этно-демографик процестар асыҡтан-асыҡ, бер яҡтан, башҡорттарҙың татар этносында юғалыуы һәм, икенсе яҡтан, элек үҙ аллы булған мишәр һәм типтәр этностарының татарҙар тарафынан «йотолоуы» йүнәлешендә бара. Төрки халыҡтарының һаны тураһындағы түбәндәге таблицаны ҡарағыҙ (мең кеше иҫәбендә)[1]:

| Йылдар | Башкорттар | Татарҙар | Мишәрҙәр | Типтәрҙәр |
|---|---|---|---|---|
| 1920 | 896,4 | 242,1 | 155,5 | 167,5 |
| 1923 | 686,8 | 143,6 | 100,2 | 144,2 |
| 1926 | 584,8 | 450,8 | 109,5 | 23,3 |
| 1939 | 671,1 | 777,2 | — | — |

Башҡортостанда башҡорт халҡы һанының кәмеүе үтә борсоулы тәьҫир ҡалдыра: әгәр 20-се йылдарҙа унда СССР-ҙағы бөтә башҡорттарҙың 80%-ы йәшәһә, 1989 йылда 59%-ы ғына ҡалған. Хатта тотош геноцид шарттарында һәм 1704—1711, 1735—1740, 1755—1756, 1773—1775 йылдарҙағы ихтилалдарҙан һуң да милли үҙенсәлеген һаҡлап алып ҡалған башҡорт халҡы Совет власы йылдарында, күрәһегеҙ, бик ҙур сифат һәм һан юғалтыуҙары кисергән.

Ассимиляция процестары бигерәк тә Башҡортостандың көнбайыш районДарында тәрән тамыр ебәргән — мәжбүри христианлаштырыуҙан ҡасҡан татарҙар нигеҙҙә шунда килеп урынлашҡан. Татар теленә айырыуса яҡын булған дөйөм төрки телендә балаларҙы уҡытыу ҙа ассимиляцияға булышлыҡ иткән.

Совет йылдарында башҡорт балаларын татар телендә уҡытыу хәлде тағы ла ауырлаштырған. Мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса Баҡалы районында — 2 716, Дөртөйлө районында — 13 652, Краснокамала — 10 273, Тәтешлелә—

[1] ЦГА БАССР. Ф. 1943. Оп. 1. Д. 18. Л. 177.

13 967, Саҡмағошта 6 107 башҡорт йәшәй. Әммә был райондарҙағы бер генә мәктәптә лә башҡорт телен уҡытыу ойошторолмаған. Шундай уҡ хәл Балтас, Йәрмәкәй, Илеш һәм башҡа районларҙа ла күҙәтелә. Шуға күрә, башҡорттарҙа үҙ телен туған теле тип таныу проценты башҡа халыҡтар араһында иң түбән кимәлдә. 1989 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре шуны күрһәтә. Әгәр рустарҙың 99,9%-ы һәм татарҙарҙың 92,9%-ы рус һәм татар телдәрен туған телдәре тип таныһа, шуға ярашлы башҡорттарҙың 74,7%-ы ғына башҡорт телен туған теле тип иҫәпләй.

Ҡайһы берәүҙәр, атап үткән районларҙа һәм төньяҡ-көнбайыштың башҡа төбәктәрендә башҡорт халҡы йәшәмәй, ундағы халыҡты партияның Өлкә комитеты ҡушыуы буйынса милләтен башҡорт итеп яҙғандар, тигән фекер белдерәләр. 1993 йылда Башҡортостан Республикаһының Юғары Советына минең яныма Пермь өлкәһенең Барҙы районының хакимиәт башлығы менән Башҡортостандағы Татар ижтимағи үҙәге рәйесе Кәрим Яуышев килеп ингәйнеләр. Фәнни-практик конференция уҙғарыу һәм Барҙы районы халҡы тураһында һүҙ барҙы. Район хакимиәт башлығы, Барҙыла 87% башҡорт йәшәй, тине. Шул ваҡытта Яуышев әфәнденән, әллә Пермь өлкәһендә лә халыҡ иҫәбен алғанда Башҡортостан Өлкә комитеты барып, ундағы халыҡты башҡорт яһаныммы, тип һораным. Татар хәрәкәте лидеры яуап итеп яурындарын ғына һикертте.

Әгәр ассимиляция процестары туҡтатылмаһа, улар кире ҡайтҡыһыҙ характер аласаҡ һәм бер ни тиклем ваҡыттан һуң юғарыраҡ кимәлдәрҙә Башҡортостан Республикаһын Өфө губернаһына әйләндереү йәки Татарстан Республикаһына ҡушыу мәсьәләһе көн үҙәгенә баҫасаҡ. Татар ижтимағи үҙәге, «Русь» йәмғиәте һәм башҡалар бөгөн үк был хаҡта һүҙ алып баралар инде. Был идеяны ғәмәлгә ашырырға тырышыу буйынса ниндәй ҙә булһа сәйәсәт үткәреү Башҡортостанды фажиғәгә килтерәсәге ап-асыҡ.

Ошолар тураһында борсолған республика йәмәғәтселегеге башҡорт теленә дәүләт яҡлауын булдырыу мәсьәләһен көн үҙәгенә ҡуя [1]. Килеп тыуған хәлдән сығыу юлын улар телдәр тураһында закон ҡабул итеүҙә күрә һәм, законда башҡорт теле менән башҡа халыҡтар телдәренең үҫеш гарантиялары урын алырға тейеш, тип иҫәпләй. Башҡорт-

[1] Валеев Д. «Здравый смысл подсказывает». Известия Башкортостана, 1992. 23 ғин. Был темаға Н. Мәксүтова, Р. Шәкүр, М. Ҡолшәрипов кеүек ғалимдарҙың һәм башҡаларҙың 1990—1994 йылдарҙа «Башҡортостан», «Йәшлек», «Замандаш» гәзиттәре биттәрендә мәкәләләре күп баҫылды.

остан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы З. Ғ. Ураҡсин етәкселегендә тел ғилеме белгестәре, ғалимдар «Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәре тураһында» закон проектын әҙерләне һәм Башҡортостан Республикаһының Юғары Советына тәҡдим итте. Ул Рәсәй Фәндәр академияһының Урал бүлексәһе Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғалимдар советында хуплау тапты һәм ҙур иғтибарға лайыҡ.

Закон проекты рус һәм башҡорт телдәренең дәүләт статусын раҫлап ҡына ҡалмай, элек ҡабул ителгән закон акттарынан айырмалы рәүештә, урындағы рәсми тел төшөнсәһен дә индерә. Был беҙҙең республикала тупланып йәшәгән мари, татар, сыуаш, удмурт һәм башҡа халыҡтарҙың телдәрен ҡулланыу өлкәһендәге хоҡуҡтарын һәм азатлыҡтарын яҡлау маҡсатын күҙ уңында тота.

*1994*

*Әкрәм БИИШЕВ*

## ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ ХАҠЫНДА

Дәүләт теле хаҡындағы мәсьәләне дөйөм милли мәсьәләнән айырып алып ҡарау мөмкин түгел, ул туранан-тура милләт һәм милли дәүләт проблемаһына бәйләнгән. Милләттең объектив үҫеш ҡануны буйынса, туғандаш ырыу һәм ҡәбиләләрҙән ойошоп, тейешле эстәлеккә эйә булған, йәғни тел, мәҙәниәт, ер, хужалыҡ уртаҡлығына өлгәшкән, халыҡ, башҡа ижтимағи күренештәр кеүек үк, үҙенә ярашлы ойошоу рәүешен алырға ынтыла, сөнки эстәлек менән ойошоу рәүешенең тулы берҙәмлеге генә уға иркен йәшәргә һәм үҫергә мөмкинлек бирә. Халыҡтың эстәлегенә ярашлы ойошоу рәүеше булып м и л л и  д ә ү л ә т хеҙмәт итә. Милли дәүләт төҙөү менән халыҡ милләткә әйләнә.

Эстәлек менән ойошоу рәүешен яраштырыу ҡануны, объектив ҡанун булған өсөн, һәр халыҡта үҙенән-үҙе милли дәүләт төҙөү ынтылышы уята. Ул ынтылыш бойондороҡло халыҡтарҙа быуаттар буйы һүнмәй торған хәрәкәткә, милли азатлыҡ көрәшенә әүерелә. Икенсе донъя һуғышынан һуң оло дәүләттәр шул милли азатлыҡ көрәшенә иғтибар бирергә, халыҡтарҙың милли дәүләт төҙөү хоҡуғын танырға мәжбүр булды. Сәйәси аң өлкәһендәге үҙгәреш 1945 йылдың 24 октябрендә ҡабул ителгән БМО Уставында сағылыш тапты. БМО Уставы халыҡтарға азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ биреү эшен халыҡ-ара

мөнәсәбәттәге төп принциптың береһе итеп ҡуйҙы. Уставтан тыш, БМО ошо мәсьәлә буйынса төп документ итеп 1960 йылдың 14 декабрендә үҙенең «Колониаль ил һәм халыҡтарға бойондороҡһоҙлоҡ биреү хаҡындағы декларация»һын ҡабул итте. Был Декларация һәр халыҡтың үҙаллылыҡ алыу хоҡуғын раҫлап, милли идараһы булмаған халыҡтарға һәм сит милләт ҡул аҫтында булған, һаман үҙаллылыҡ ала алмаған илдәргә һис кисекмәҫтән бөтә власты тапшырыу сараһы күрергә, халыҡ-ара мөнәсәбәтте тигеҙлек нигеҙендә, халыҡтарҙың суверенлыҡ хоҡуғын һәм территориаль бөтөнлөгөн хөрмәт итеү нигеҙендә үҫтерергә талап итте. БМО-ның 1966 йылда ҡабул иткән «Иҡтисади, ижтимағи һәм сәйәси хоҡуҡтар тураһындағы пакт»ы менән «Граждандлыҡ һәм сәйәси хоҡуҡтар тураһындағы пакт»ы ла халыҡтарҙың үҙаллылыҡ алыу һәм үҙенең тәбиғи байлығына хужа булыу хоҡуғын нығытып ҡуйҙы. БМО Генераль Ассамблеяһының 1979 йылғы сессияһы азатлыҡ, территориаль бөтөнлөк, милли берҙәмлек өсөн мөмкин булған бөтә саралар менән, шул иҫәптән ҡорал көсө менән, көрәшеүҙе законлы тип билдәләне. Шулай итеп, БМО-ның декларациялары һәм пакттары халыҡ-ара хоҡуҡ нормаларында милли азатлыҡ көрәшенә ныҡлы нигеҙ һалды.

Бойондороҡло халыҡтарҙың ҙур көс түгеп, иҫәпһеҙ күп ҡорбан биреп яулап алған милли дәүләте алдына, беренсе нәүбәттә хәл итә торған башҡа ауыр мәсьәләләр менән бергә, дәүләт телен ғәмәлләштереү мәсьәләһе килеп баҫа. Милли дәүләт милләттең ойошоу рәүеше булғас, эстәлек менән ойошоу рәүешенең үҙ-ара айырып алғыһыҙ ныҡлы бәйләнештә булыуы сәбәпле милли тел милли дәүләттең төп бер билдәһе була. Шуға күрә милли дәүләт милли телдең дәүләт теле булып хеҙмәт итеүен талап итә, ә дәүләт теле булып йөрөгән милли тел мотлаҡ милли дәүләттең булыуын күҙҙә тота; милли дәүләт булмағанда милли тел дәүләт теле булып йөрөй алмаған кеүек, милли дәүләт теле булмағанда милли дәүләт тә тейешенсә тереклек итә алмай. Башҡортостан Республикаһының дәүләт телен ғәмәлләштергәндә ошо объектив дөрөҫлөктән, ошо ҡағиҙәнән сығып эш итергә кәрәк.

Хәҙерге көндә Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып, һәр хәлдә дәүләт телдәренең береһе сифатында, милли башҡорт теле хеҙмәт итергә тейеш икәнен бер кем дә кире ҡаҡмай. Шуға ҡарамаҫтан, ошо уртаҡ фекерҙе юғарыла килтерелгән объектив ҡағиҙәнән сығып нигеҙләү талап ителә.

Башҡорт халҡы быуаттар буйы колониаль иҙгенлектә

йәшәргә мәжбүр булды, шул арҡала уның милли дәүләт төҙөргә мөмкинлеге булманы, милли теле лә дәүләт теле булып йөрөй алманы. Республиканың Юғары Советы 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостандың дәүләт суверенитеты хаҡында Декларация ҡабул итеп, мәңге хөкөм һөргән шул ғәҙелһеҙлекте күпмелер кимәлдә сикләне һәм башҡорт милли дәүләтен төҙөүгә нигеҙ һалды. Ҡайһы берәүҙәр ҡабул ителгән Декларация буйынса Башҡортостанда йәшәгән бөтә халыҡ Башҡортостан суверенитетының субъекты булып тора, сөнки унда милләттәрҙең бөтәһенә лә тигеҙ хоҡуҡ бирелә, тип әйтмәксе була. Был фекер, һис һүҙһеҙ, хата. Декларация республикала йәшәгән бөтә халыҡтың түгел, ә «башҡорт халҡының ҡағылғыһыҙ үҙбилдәләнеш хоҡуғын ғәмәлләштерер» өсөн Башҡортостандың дәүләт суверенитетын иғлан итте, һәм башҡорт халҡының шул хоҡуғы булмаһа, суверенитет иғлан итер өсөн, ғөмүмән, бер нигеҙ ҙә булмаç ине. Шулай булғас, тик башҡорт халҡы ғына, йәғни республиканың төп халҡы ғына, Башҡортостан суверенитетының субъекты булып тора. Был урында халыҡтарҙың күп быуатлыҡ колониаль сәйәсәт һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән һан нисбәте һис бер әһәмиәткә эйә була алмай. Тимәк, 1990 йылдың 11 октябрендә ҡабул ителгән Декларация менән башҡорт халҡының милли дәүләтселеге ғәмәлләштерелде, шулай булғас, ул милли дәүләттә башҡорт теленә, һис һүҙһеҙ, дәүләт теле тигән статус бирелергә тейеш. Ошо эш эшләнмәһә, башҡорт дәүләтселеге реаль эстәлеге булмаған формаль бер ғәләмәт кенә булып ҡала.

Шуның менән бергә Башҡортостан суверенитеты тулы суверенитет түгел. Был республика Рәсәй Федерацияһына инә, һәм шул Федерацияның дәүләт атрибуттары уға ла тарала. Шуның өсөн, ә бер ҙә рус кешеләре республика халҡының 39 процентын тәшкил иткән өсөн түгел, Бөтә Рәсәй Федерацияһында дәүләт теле булып йөрөгән рус теле Башҡортостан Республикаһында ла үҙ функцияһын һаҡлай. Хәҙерге сәйәси шарттарҙа был хәл юғарыла күрһәтелгән дөйөм ижтимағи ҡағиҙәгә ҡаршы килмәй тиергә мөмкин.

Шулай итеп, мәсьәләне ике тел, йәғни башҡорт теле менән рус теле файҙаһына хәл итеү, дәүләт һәм дәүләт теленең объектив бәйләнешенә нигеҙләнгәнгә күрә, һис бер бәхәскә урын ҡалдырмаçҡа тейеш ине. Ләкин татар милли эшмәкәрҙәре Башҡортостанда татарҙарҙың күп булыуына һылтанып һәм хәҙерге милли ситуацияға килтергән ысын сәбәпте күрәләтә боҙоп, республикала, йәнәһе, төп халыҡтарҙың береһе булған татарҙар ҙа үҙбилдәләнеш һәм

дәүләт теле йәһәтенән башҡорт милләте менән бер үк кимәлдәге хоҡуҡтан файҙаланырға тейеш, тип дәғүәләшә.

Объектив фекерҙә булған һәр кешегә төп халыҡтың кем икәне билдәле. Ләкин ышаныслыраҡ булһын өсөн, бында төп халыҡтың Берләшкән Милләттәр Ойошмаһында ҡулланылған билдәләмәһен күрһәтеп китергә кәрәк. Ул билдәләмә буйынса, үҙ аллы мәҙәниәте булған, сит халыҡтар баҫып алып көрәшкәнгә ҡәҙәр билдәле бер территорияны биләп торған, илбаҫарҙар баҫып инеп, колониаль система урынлаштырғанға тиклем шул территорияла йәшәп, шунда үҙ алдына үҫкән, һуңғы 500 йыл эсендә колониаль иҙгенлектән ғазап сиккән халыҡ төп халыҡ тип иҫәпләнә. (Коренное население. М., 1990. 29—32-се биттәр.) Тарихи мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә һәм тарихсыларҙың уртаҡ фекеренсә, Рус дәүләтенә ҡушылғандан һәм нуғайҙар ситкә ҡасып бөткәндән һуңғы тәүге дәүерҙә башҡорт халҡы үҙенең бөгөнгө республика территорияһынан бик күпкә артыҡ булған тарихи ерендә үҙе генә йәшәгән, башҡа төрлө һис бер халыҡ был ерҙә булмаған. Элекке рус хакимдары был тарихи фактҡа ҡарата бер ниндәй шик йөрөтмәгән. Мәҫәлән, 1830 йылдың 16 февралендә Ырымбур губернаһының хәрби губернаторы П. Ҡ. Эссен Правительствующий Сенатҡа ебәргән рапортында былай тип яҙған: «Башкирцы, пришед в подданство к царю Иоанну Васильевичу, — ти, — были пожалованы от него землями с правом вотчинников, что впоследствии подтверждалось и его преемниками. На основании сего права до произшедшего между башкирцами бунта они одни владели землями в Оренбургском крае» (ГЦИА РБ, Ф. № 2. Оп. 1. Д. 1506). Ә ул заманда Ырымбур «крайына» һуңғараҡ ойошторолған Өфө, Силәбе, Һамар губерналары һәм Пермь губернаһының күп өлөшө ингән булған. Мишәрҙәр менән татарҙар башҡорт еренә XVII быуат аҙағында күсә башлай һәм XVIII быуат уртаһында был күсеш киңерәк урын ала. Октябрь революцияһына ҡәҙәр ни хәтле күсһәләр ҙә, һуңғы 70 йыл эсендә генә татарҙар Башҡортостанда үҙҙәренең һанын байтаҡ арттырыуға өлгәшә: 1920 йылда 450 мең кеше булһа, 1989 йылда уларҙың һаны 1 120 меңгә етә. Тимәк, татар эшмәкәрҙәренең Башҡортостанда татарҙарҙы төп милләт итергә, татарҙарҙың үҙбилдәләнеш хоҡуғын Татарстанда ғәмәлгә ашырыу менән бергә Башҡортостанда ла ғәмәлләштерергә тырышыуы, йомшаҡ итеп әйткәндә, бөтөнләй нигеҙһеҙ. Үҙбилдәләнеш хоҡуғы булмағас, татарҙар, ни хәтле күп булһалар ҙа, Башҡортостан Республикаһында милли дәүләтселеген ғәмәлләштерә алмай, ә милли дәүләтселеге булмағас, үҙ теленә дәүләт ста-

тусын талап итергә лә уларҙың хоҡуғы юҡ. Башта килтерелгән төп ижтимағи ҡағиҙәлә күрһәтелеүенсә, милли дәүләт менән дәүләт теле үҙ-ара бик ныҡ объектив бәйләнештә тора, уларҙың береһен ғәмәлләштереү мотлаҡ рәүештә икенсеһен донъяға килтерә. Татар телен Башҡортостандың тағы бер дәүләт теле итеп белдереү, һис шикһеҙ, унда татар милли дәүләтселеген булдырыуға, Башҡортостанды ғәмәлдә Татар-Башҡорт Республикаһына әйләндереүгә һәм аҙаҡтан уны Татарстанға ҡушып, башҡорт халҡының милли дәүләтселеген бөтөнләй бөтөрөүгә юл асыр ине. Был хаҡта татар экстремистары күптән хыял йөрөтә. Улар 1917—1918 йылдарҙа Иҙел — Урал штаты төҙөргә бик ныҡ тырышты, 1919 йылда Совет хөкүмәтенең Татар — Башҡорт Совет Республикаһы төҙөү тураһында декрет сығартты һәм шул декретты ғәмәлгә ашырыр өсөн ифрат күп көс һалды, ләкин бер эш тә сығара алманы. Улар ошоға ҡәҙәр шул хыялдан баш тартмаған. Ҡайһы берҙәре шундай уҡ ҙур уйҙар менән Татар-Башҡорт Федерацияһы төҙөр өсөн программа эшләп маташа. Ләкин был хыялдарының тормошҡа ашыуы тағы бик шикле. Шуға күрә татар милли эшмәкәрҙәренә Башҡортостан Республикаһында татар мәсьәләһен айыҡ аң һәм ғәҙеллек менән хәл итеү юлына баҫырға кәрәк. Ә ул юл берәү генә: Башҡортостанда милли хоҡуҡҡа дәғүә итмәй, башҡа милләт кешеләре кеүек үк, гражданлыҡ хоҡуғынан файҙаланыу менән ҡәнәғәтләнергә; татар милли телен кеше хоҡуғы тураһындағы халыҡ-ара акттарҙа ҡаралған пункттар сигендә генә, йәғни үҙ-ара аралашыу һәм татар мәктәптәрендә уҡытыу өлкәһендә генә ғәмәлләштерергә. Бөтә булған башҡа нәмә милли хоҡуҡ өлкәһенә ҡарай, ә ул хоҡуҡты татарҙар бик законлы рәүештә тулыһынса Татарстанда тормошҡа ашыра.

*1995*

## ЯҘМЫШЫБЫҘ ҠЫЛ ӨҪТӨНДӘ

**(Һуңғы һүҙ урынына)**

925 йылда ғәрәп сәйәхәтсеһе Әхмәт Ибн Фаҙлан күреп киткән оло башҡорт иленән нимә ҡалды? Ҡаруанһарайлы Ырымбур, Ырғыҙ буйҙары тартып алынды. 190 саф башҡорт ауылдары булған Пермь... Екатеринбург менән Силәбе лә башҡорт һөйәктәренең өҫтөндә төҙөлгән. XX быуаттың атом мәхшәрен тәнендә һәм йәнендә кисергән Ҡонашаҡ һәм Арғаяш... Революциянан һуң беҙҙең сәйәси ли-

дерҙарыбыҙ, йомартланып, нефть ятҡылыҡтарын һәм иң уңдырышлы ерҙәрен — Аҡтаныш, Минзәлә, Бөгөлмә, Аҙнаҡай, Әлмәт, Алабуға, Баулы һәм башҡа райондарҙы урыҫ батшалығына ҡаршы иң тәүге ихтилалдарға күтәрелгән ғорур башҡорт халҡы менән бергә Татарстанға бүләк иттеләр.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡортостандағы төньяҡ-көнбайыш һәм дәүләт теле проблемаларын ғына түгел, ә Урал аръяғында килеп тыуған сетерекле мәсьәләне лә уртаға һалып тикшерергә тейештер, тип уйлайым. Сөнки ошо арала ғына Тажикстан, Үзбәкстан, Ҡырғыҙстан, Латвия, Молдова, Украинанан 485 «ҡасаҡ» Сибайға килеп һыйынды. Ҡала хакимиәте уларға ҙур мәрхәмәтлелек ҡылды: баҡыр-көкөрт комбинатына эшкә алды, торлаҡ менән тәьмин итте. Үҙ илендә теленән, дәүләтселегенән яҙып барған башҡортҡа ҡайһы республика, ил шундай шарттар тыуҙырыр ине икән?

Быға яуапты ниндәйҙер кимәлдә Рәсәй Федерацияһы Ҡонституцияһының 70-се статьяһы бирә: «Республика, край, өлкә, автономиялы өлкә, автономиялы округтарҙың конституция-хоҡуҡи статусын үҙгәртеү, шулай уҡ бүлгеләү һәм берләштереү уларҙа йәшәгән күпселек һайлаусыларҙың ихтыяры нигеҙендә, Рәсәй Федерацияһы халыҡ депутаттары съезы раҫлауы менән, ғәмәлгә ашырыла ала».

*Зәйтүнә ХАНОВА*

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . 3
*Т. Баишев.* «Башҡорт теленең көнбайыш диалекты» темаһына . 5
*Ж. Кейекбаев.* Башҡорт теленең диалекттары тураһында . . . 8
*М. Хәйруллина.* Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары . . . . . 9
*Н. Мәҡсүтова.* Башҡорт теленең көнбайыш диалекты . . . 13
*М. Ғилемханов, Ғ. Яппаров.* Дөмәйҙәр — аҫаба башҡорттар . 23
*З. Ханова.* Төньяҡ-көнбайыш — йөрәк яраһы . . . . . . 27
*Ш. Миңлеғәлиев.* Аптырайым мин... . . . . . . . . . 32
*Н. Ғарипов.* Башҡортостан — бөйөк исем . . . . . . . 34
*З. Ханова.* Таныҫ башҡорто . . . . . . . . . . . 36
Башҡорт ҡанлы Барҙы татары... . . . . . . . . . 41
Тарих аяҡ аҫтында . . . . . . . . . . . . . 54
*С. Ғиззәтуллина.* «...Тәфтиләүҙең ҡылған, ай, ҡәһәрен...» . . 59
*М. Ҡолшәрипов.* Ҡайырылған ҡанат . . . . . . . . . 68
*Р. Шәкүр.* Ассимиляциянан нисек ҡотолорға? . . . . . . 76
*А. Ҡамалов.* Туған тел — милләт яҙмышы . . . . . . . 82
*С. Ғиззәтуллина.* Ҡиммәттәребеҙҙең ҡәҙерен беләйек . . . . 90
*Н. Мәҡсүтова, З. Ураҡсин.* Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәренең статусы тураһында . . . . . . . 95
*З. Еникеев.* Суверенлы Башҡортостан шарттарында телдәрҙең хоҡуҡи статусы . . . . . . . . . . . . . 97
*Ә. Биишев.* Дәүләт теле хаҡында . . . . . . . . . 103
Һуңғы һүҙ урынына . . . . . . . . . . . . . 107

Т 34 **Теле барҙың — иле бар.** Мәҡәләләр йыйынтығы // Төҙ. З. Ҡ. Ханова. — Өфө: Башҡортостан «Ҡитап» нәшриәте, 1995. — 112 бит.

ISBN 5-295-01607-2

Йыйынтыҡҡа тарихсы ғалимдар, хоҡуҡ яҡлаусылар, яҙыусы, сәйәсмән һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәренең мәҡәләләре тупланды. Улар төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының тарихи яҙмышы, теле һәм мәҙәниәте тураһында һүҙ алып бара.

Йыйынтыҡ дөйөм белем биреү мәктәптәре уҡытыусыларына, уҡыусыларға, студенттарға, ғөмүмән тел менән ҡыҙыҡһынғандарҙың бөтәһенә лә тәғәйенләнә.

Т $\frac{4602000000-112}{М 121(03)-95}$ 148—95

ББК 81.2 Баш

Научно-популярное издание

**БЕЗ ЯЗЫКА НЕТ ОТЧИЗНЫ**

*(на башкирском языке)*

Составитель: **Зайтуна Ҡанзафаровна ХАНОВА**

Редакция мөдире *С. Ғ. Мөхтәруллина*
Мөхәррирҙәре *С. Ғ. Мөхтәруллина, З. Ҡ. Ханова*
Рәссамы *Ф. Ф. Ислахов*
Техник мөхәррире *Г. Ә. Янғужина*
Ҡорректоры *З. Р. Даянова*

ИБ № 5317

Йыйырға бирелде 19.04.95. Баҫырға ҡул ҡуйылды 19.05.95. Ҡағы
форматы 84×108¹/₃₂. Тип. ҡағыҙы № 2. Әҙәби гарнитура. Ҡалҡы
ысул менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 5,88. Шартлы буяу отт. 6,3
Иҫәп-баҫма таб. 5,96. Тиражы 2500 дана. Заказ № 45.

Башҡортостан «Ҡитап» нәшриәте. 450001, Өфө, Левченко урамы, 4а
Өфө полиграфия комбинаты. 450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.